ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 ноябрь (ҡырпағай) 2023

№45 (1087)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ер ҡыртышын аҡтарып...**

алтын эҙләй ситтәр



4

**Тылда йәшәүселәр...**

тыныслыҡтың ҡәҙерен белһен ине



5,9

**Ҡаныбыҙҙа бар яугирлыҡ**



8-9

**Туҡланыуың...**

совет осорондағы кеүекме?



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!*



## ЙӘЙӘҮ ЙӨРӨҮСЕЛӘРГӘ...

**Уҡыусыларыбыҙға Өфө ярымутрауының Ағиҙел, Ҡариҙел йылғалары ярҙары буйлап 62,5 километр оҙонлоғондағы "Өфө муйынсағы" тип аталған йәйәү йөрөү һуҡмағы һалыныуы тураһында хәбәр иткәйнек инде.**

Ошоғаса Рәсәйҙең бер генә ҡалаһында ла ошондай ҡеүәтле проект планлаштырылғаны юҡ ине. Төп оло һуҡмаҡ һәр бер район биләмәһенә ҡараған төҙөкләндерелгән һәм уңайлы бәләкәй маршруттарҙы тоташтыра барып, һуҡмаҡтар сылбырын хасил итәсәк. Әле "Өфө муйынсағы"ның барса участкаларында заманса энергия һаҡлағыс лампалар ҡорола, тимәк, Өфө халҡы кис көнө, эштән ҡайтҡас та, үҙҙәренә яҡын һуҡмаҡҡа сығып, рәхәтләнеп ял итә аласаҡ. Маршрут 2024 йылда баш ҡалабыҙҙың 450 йыллыҡ юбилейына тиклем үк тулыһынса әҙер була. "Өфө муйынсағы" баш ҡала янындағы гүзәл тәбиғәт зоналары аша һалына, ә был таш йорттарҙа йәшәп арыған кешеләргә үҙе бер йыуаныс булыр, тибеҙ.

## ҠУРСАҠТАЙ ҠУРСАҠ ТЕАТРЫ...

**Баш ҡалабыҙҙа "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә Ҡурсаҡ театрын яңыртып төҙөү ҡыҙыу темптар менән бара.**

Театрҙың фасады яңыртылған, уға төкәтмә төҙөлгән. Бында витражлы тәҙрәле кафе һәм асыҡ холл була. Театр алдындағы майҙанда байтаҡ ҡына эштәр тамамланған: тротуар һәм амфитеатр плиткалары һалынған, эскәмйәләр ҡуйылған, газон, ағас-ҡыуаҡтар ултыртылған. Биналағы эске эшкәртеү эштәре тамамланғас, декабрҙең икенсе яртыһында яңыртылған театрҙа беренсе тамаша күрһәтеү күҙаллана.

Театр янындағы 0,4 га майҙан бик ҡыҙыҡлы итеп үҙгәртеп ҡорола, бындағы "Әкиәтттәр аллеяһы"на ЮНЕСКО реестрына ингән 12 Рәсәй объектының һәм 4 Башҡортостан тәбиғәте ҡомартҡыһының миниатюралары (һын-макеттары) ҡуйыласаҡ. Был үҙенә күрә асыҡ һауалағы бәләкәй генә музейҙы хәтерләтәсәк. Башҡортостан объекттары - Ирәкташ, Ләлә-Тюльпан мәсете, Шүлгәнташ музейы, Турахан кәшәнәһе макеттары тейешле урындарына ҡуйылды ла инде. Беҙҙең скульпторҙарыбыҙ Рәсәй объекттарынан Ҡырымдың Ҡарлуғас ояһын, Мәскәүҙәге Василий Блаженный һәм Санкт-Петербургтағы Исаакий соборҙарын, Волгоградтағы "Ватан-әсә саҡыра" монументы һындарын, башҡа объекттарҙы эшләүҙе дауам итә. Шулай уҡ "Әкиәт һарайы" ла төҙөлөп бөтөп бара.

## ЗАМАНСА ЗАВОД

**Башҡортостан Хөкүмәтенең мәғлүмәт хеҙмәте хәбәр итеүенсә, баш ҡалабыҙҙың Дим районында яңы станоктар төҙөү заводы һалына башлаясаҡ.**

Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса район биләмәһенән төҙөлөш инвесторы - "Технопром" компанияһына 274 сутый маҙандағы ер участкаһы ҡуртымға бирелгән. Ошо компания 334 миллион һумлыҡ проектты бойомға ашырып, 49 хеҙмәт урыны булған предприятиены төҙөп бирәсәк. Заводта цифрлы идара итеү программаһы ярҙамында эшләй торған дозалаусы һәм хонинговаль станоктар, ҡойоусы машиналар һәм сэндвич-панелдәрҙе йәбештерә торған линиялар етештереләсәк. Әүәл ошондай яңы технологиялы ҡорамалдар сит илдәрҙән һатып алына ине.

## ҺАУЛЫҠ ХАҠЫ...

**Өфөлә йәшәүсе 60 йәшлек һәм унан өлкәнерәк кешеләргә физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәре менән файҙаланыу өсөн социаль сертификаттар тапшырыласаҡ. Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев ошо хаҡтағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы.**

Был документта шулай уҡ дәүләттеке (муниципаль) булмаған учреждениелар ойошмаларының айырым категория граждандарына физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәре күрһәтеү өсөн ҡала ҡаҙнаһынан субсидия бүлеү хаҡында ла әйтелә. Ҡарарҙа билдәләнеүенсә, был Өфөлә үткәрелеүсе физкультура-һауыҡтырыу сараларына өлкән йәштәгеләрҙе күберәк йәлеп итеү өсөн эшләнә. Былтыр Башҡортостан пенсионерҙары уҡыу, спорт менән шөғөлләнеү һәм буш ваҡыттарын үткәреү маҡсатында сертификаттар алғайны. "Башинформ" агентлығы хәбәр итеүенсә, 2 мең һумлыҡ сертификат менән өлкәндәр йога, һауыҡтырыу физкультураһы, һулыш гимнастикаһы һәм бейеү дәрестәре өсөн түләне.

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

## ҠАҒЫҘ БАҪМАҒА ЕТМӘЙ

**Һуңғы йылдарҙа ҡағыҙға баҫылған матбуғат баҫмаһын алдырмайым, интернеттан ғына уҡыйым, тигән кешеләр күбәйҙе. Эйе, бөгөн барлыҡ гәзит-журналдарҙың интернетта электрон сайты, социаль селтәрҙәрҙә үҙ төркөмдәре бар. Мин дә аңһатыраҡ юл эҙләп, шулай уҡып ҡараным да, ҡағыҙ гәзиткә етмәй тип, ташланым был ғәҙәтте.**

(Дауамы 3-сө биттә).



12+

✓ *Берҙәм дәүләт имтиханы, Төп дәүләт имтиханы менән ҡурҡытырға ярамай балаларҙы. Уҡымаһаң, бирә алмайһың, тип хәүеф өҫтәмәгеҙ уларҙың күңеленә. Имтиханды бирә алмаһаң, нимә эшләйбеҙ, тип башҡа юлдарҙы ҡарарға кәрәк.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЙЫЛЫ ӨЛӘШЕП ЙӘШӘЙЕК!



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Гөлшат ХӨСӘЙЕНОВА, Дүртөйлө ҡалаһының Н. Нәжми исемендәге Башҡорт гимназияһы директоры, Дүртөйлө районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, район Советы депутаты:*** Бөгөн кешегә күңел йылыһы кәрәгерәк. Бер күренеш гел күҙ алдымда. Юл аша йәп-йәш кенә ҡыҙ сығып бара. Башын аҫҡа эйгән, илайҙыр ҙа, бәлки, ҡаңғырып, бөтөрөнөп китеп бара. Шул ҡыҙҙы туҡтатып әйткем килгәйне: "Башыңды күтәр, һылыу, һин йәш бит әле, барыһы ла яйланыр! Бөгөнгө көндә һин үҙеңдең йәшлегең менән көслө!" Ысынлап та, һәр кемдең әлеге мәлдәге проблемалары, хәүефтәре менән бергә ниндәйҙер көслө яғы ла бар. Кемдеңдер һаулығы бар, кемдеңдер туғандары бар һ.б. Холҡондоң да көслө яҡтары бар, шуларға таянып, бирешмәйенсә, үҙеңдең күңеленде күтәреп йәшәргә кәрәк.

Йәш быуын менән эшләүсе педагог булараҡ, балаларыбыҙҙа ла ошо сифаттарҙы тәрбиәләһәк ине, тип әйткем килә. Баланың күңел торошон беҙ, уҡытыусылар, әлбиттә, күрәбеҙ, уға ярҙамға ла киләбеҙ. Был йәһәттән әллә күпме бәләләрҙән йолоп та ҡалғанбыҙҙыр күптәрҙе. Ҙур мәктәптәрҙә психолог штаты ла бар, улар ҙа балалар менән эшләй. Әммә ата-әсәләр ҙә иғтибарлы булһын ине. Сөнки бөгөнгө заманда балаларға икеләтә ауыр, уларға аҡты ҡаранан айырырға ғына түгел, ҡиммәттәрҙе дөрөҫ баһаларға өйрәтергә кәрәк. Интернетта башҡаларҙың бөтөнләй башҡаса йәшәүен күреп тә төшөнкөлөккә бирелеүе бар йәш кешенең. Ҡиммәтле тормоштан йылы мөнәсәбәттәр яҡшы икәнен аңлаған бала ғына бындай хәлдә ҡалмаясаҡ. Бөтөнләй иғтибарһыҙ ҡалған балалар ҙа бар, сөнки ата-әсәләрҙең донъяға ҡарашы башҡа хәҙер. Кемдер матди яҡтан, кемдер рухи йәһәттән ауырлыҡ кисерә. Уҡытыусыға шуға ла ата-әсә менән дә күп аралашырға тура килә.

Берҙәм дәүләт имтиханы, Төп дәүләт имтиханы менән ҡурҡытырға ярамай балаларҙы. Уҡымаһаң, бирә алмайһың тип хәүеф өҫтәмәгеҙ уларҙың күңеленә. Имтиханды бирә алмаһаң, нимә эшләйбеҙ, тип башҡа юлдарҙы ҡарарға кәрәк. Мәктәп белем бирә, әммә ата-әсә өйҙә ыңғай психологик мөхит булдырырға тейеш. Ғаилә йылыһы булырға тейеш. Хәтерләгеҙ әле, элекке ғаилә ҡоролошо ниндәй ине: атай-әсәй, балаларҙан тыш, өләсәй-олатайҙар ҙа булды. Әсәй, атай эштә, әммә баланың күңелен тап өләсәйҙәр имләне, улар рухи тәрбиә бирҙе. Шуға ла бала туған телендә һөйләште, сөнки өләсәй әкиәт һөйләне, йырҙар йырланы, йомаҡтар ҡойҙо. Заман менән бергә, өләсәйҙәр ҙә үҙгәрҙе, үкенескә. Беҙгә хәҙер ошо мәктәпте лә ҡабат ҡайтарырға кәрәк.

Нисек кенә булмаһын, барыһы ла килеп сыға, һин барыһын да эшләй алаһың, барыһы ла алда әле, тигән уй һалып үҫтерегеҙ балаларығыҙҙы. Һәр баланың нимәгәлер һәләте бар, уны күреп, үҫтереү - ата-әсәнең бурысы. Һәр кем үҙенең кәрәк икәнен тойоп йәшәргә тейеш. Һин миңә кәрәкһең, балам, ярай әле һин бар, тип әйтеүҙән тартынма.

Һәм, әйҙәгеҙ, ошо бәхет формулаһын йәмғиәтебеҙгә лә күсерәйек. Көслө яҡтарыңды белергә һәм төшөнкөлөккә бирелмәҫкә, яҡты киләсәккә ышанырға өйрәнәйек. Бер-беребеҙгә кәрәк булайыҡ!

**Ләйсән ВӘЛИЕВА яҙып алды.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

**Әлбиттә, яҡшы, ҡыуаныслы хәбәрҙәрҙән башлағы килә. Өфө һәүетемсә йәшәй, юбилейын ҡаршыларға әҙерләнә кеүек. РФ Президенты В.В.Путин яңыраҡ ҡына Рәсәй төбәктәре һәм Ҡаҙағстан вәкилдәрен 2024 йылда Өфөлә үткәреләсәк Рәсәй - Ҡаҙағстан хеҙмәттәшлегенә арналған XX төбәк-ара форумға саҡырҙы. Ил Президенты шулай уҡ киләһе йыл Өфөлә тағы бер оло сара - "Рәсәй - спорт державаһы" йыйыны үткәреләсәге хаҡында ла хәбәр итте.**

# БАШ ҠАЛАЛА НИҘӘР БАР?



Әбит баш ҡалабыҙҙа быйыл ғына ла әллә күпме халыҡ-ара кимәлдәге саралар булып үтте: "Китап байрамы" йәрминкәһе, "Әйҙә, уйнарға!" Бөтөн Рәсәй фестивале, Х Рәсәй - Беларус форумы, II Халыҡ-ара "Башҡорт аты" йыйыны һәм башҡалар. Тимәк, баш ҡалабыҙ киң ҡоласлы халыҡ-ара саралар майҙаны булып танылыу яулаunion; тимәк, Башҡортостанға мөһим ойоштороу эштәрен ышанып тапшырырға мөмкин, тигән баһа был. Заманға ярашлы яңыра, социаль-мәҙәни объекттар төҙөлә: Спорт көрәше үҙәге, Бокс үҙәге, Студенттар кампусы, торлаҡ йорттар, күперҙәр, юлдар һәм башҡалар...

Әйткәндәй, һуңғы ваҡыт баш ҡала яңылыҡтары блогына күҙ йүгерткәндә, әлеге мөһим төҙөлөштәр хаҡындағы хәбәрҙәр менән бер рәттән, ниндәйҙер аттракциондар тураһында мәғлүмәттәр күҙҙе сыбарлай башланы. Күптәнге, 5 августағы бер хәбәр иғтибарҙы йәлеп итте: Екатеринбург инвесторы А.Зорин Өфөлә 150 миллионға "Күҙәтеү башняһы" төҙөргә ниәтләй, тип хәбәр иткән баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте. Күрәһең, был ниәт барып сыҡмаған, ахыры, сөнки әле, 12 ноябрҙә, РБК сайтында ниндәйҙер Мәскәү фирмаһының Өфөлә "Күҙәтеү ҡуласаһы" менән карусель ҡуйырға ниәтләүе хаҡында һүҙ бара. Баш әйләнде был "тәгәрмәс"тәргә ултырмаҫ борон... Ысын булһа, быныһы Өфөләге өсөнсө ҡуласа-тәгәрмәс булмаҡсы, һәм ул яңыраҡ төҙөкләндерелгән Ағиҙел ярында урын аласаҡ, тиҙәр.

Ә уларҙың элеккеләре - М.Ғафури ял һәм мәҙәниәт паркы менән Менделеев урамындағылары ни хәлдәләр икән һуң? Бер заман уларҙың "Ирәмәл" сауҙа үҙәге янындағыһын хужаһы 67 миллионға һатмаҡсы булып, аттракцион туҡтатылып та торғайны, булһа кәрәк. Ярай, ҡала бюджетына һуҡһа, һуғалыр ҙа, тик ял итергә һәм баш ҡалабыҙға бейектән күҙ һалырға яратыусыларға берүк имен-аман күңел асырға яҙһын, юғиһә, ҡайҙалыр бындай хәүефле ҡуласаларҙың ауып, йә әйләнеүҙән шып туҡтап, фажиғәгә килтергән осраҡтары ла булманы түгел бит.

Күңел асыу, ял, спорт - былар, һис һүҙһеҙ, кәрәк ҡала тормошонда, тик бөгөн бөтәһенән дә бигерәк ҡалабыҙға элеккеләй гөрләп торған завод-фабрикалар ҙа кәрәк, сөнки беҙ бит хәҙер сит ил тауарҙарын уларҙан һатып алмай, үҙебеҙ етештерергә һүҙ ҡуйыштыҡ түгелме, йәмәғәт? Әллә беҙ һаман да шул Ҡытай тауарына ымһынабыҙмы? Ҡала халҡына эш урындары ла кәрәк бит! Юғиһә, КП Өфө сайты хәбәр итеүенсә, "аналитиктар Өфөнөң Октябрь районы эшһеҙҙәр һаны буйынса иң тәүге урында килә," тип иҫәпләй. Сентябрь мәғлүмәттәре буйынса, унда 905 кеше, ә Калинин районында 591 һәм өсөнсө урындағы Киров районында 565 эшһеҙ кеше көн күрә. Ә эшһеҙлек нимәгә илтә икәне барыбыҙға ла яҡшы мәғлүм. Тәбиғи, эскелек. Эше булмаһа ла, "ашы" бар, тимәк, бәғзе берәүҙәрҙең. Шулайҙыр шул, халыҡ бит кредитҡа йәшәп күнекте бер талай. Рәсәйҙәге банктар алдында бурыслыларҙың 42,5 миллионы бер үк ваҡытта өс һәм унан күберәк кредит алған. Уны нисек түләйҙәрҙер, түләйме-юҡмылыр - әммә уларҙың хәле баяғылай, ҡуласа-тәгәрмәс эсендәге кейек хәлендәлер. Ҡараһаң, урам тулы машина. Эксперттар иҫәпләүенсә, автомобиль һатып алыусыларҙың 90 проценты әлеге лә баяғы кредит менән бәйле.

Машиналарҙың күплеге бер ҙә яҡшыға килтермәй: уны йөрөтә белгәне лә, белмәгәне лә рулгә ултыра. Ярай ҙа айыҡ аҡыл менән ултырһа... Әйткәндәй, Өфө Дәүләт автоинспекцияһы хәбәр итеүенсә, үткән аҙнала БР буйынса ЮХХДИ-ның Юл-патруль хеҙмәте Өфө ҡалаһы урамдарында киң ҡоласлы рейд-операция үткәргән. Һөҙөмтәлә 697 транспорт сараһы тикшерелә. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 97 осрағы асыҡлана, эскән килеш рулгә ултырған 12 водитель тотола. Шундай әҙәмдәр арҡаһында ла инде ноябрҙең тәүге ун көнөндә Өфө урамдарында 6 кеше (шуларҙың икәүһе балалар) машина менән бәрҙереп кителә һәм һәләк була. 11 ноябрҙә, мәҫәлән, йәйәүле үтә торған законлы урында (зебра һыҙыҡлы) шәп тиҙлектә килгән машина 49 йәшлек ҡатынды шундай көс менән бәрҙертә, хатта ки меҫкен ҡатынҡайҙың кәүҙәһе бер-ике метрҙай бейеклеккә осоп, ергә килеп төшә... Руль артындағы ирҙең махсус билдә янында ла тиҙлеген кәметмәүенә шаһит булған кешеләр бындай ҡот осҡос хәлдән шаҡ ҡата...

Баш ҡала проблемалары күп һәм төрлө, әлбиттә, айырыуса водителдәр һәм йәйәүлеләр тарафынан юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен күрәләтә боҙоуҙар, эске тәртип хәлдәре, урамдар һәм йорт алдарының бысраҡлығы, ҙур-ҙур күләүектәр, ир-аттың ғына түгел, уларға эйәреүсе үҫмерҙәрҙең шаҡшы итеп һүгенеүҙәре бер ҙә генә баш ҡала йөҙөн йәмләмәй. Таҙалыҡ, тигәндән, һуңғы ваҡыт айырыуса бысраҡлыҡ, сүп-сарға күмелеп бара ҡайһы бер ситтәрәк ятҡан биләмәләр, мәҫәлән, Сипайлово биҫтәһе. Бәләкәй эш хаҡы сәбәпле, Өфө ҡалаһында торлаҡ-коммуналь эшселәре, урам һепереүселәрҙең мәңге күпләп етешмәүе бер кемгә лә сер түгел. Баш ҡала байрамына әҙерлек сараларында ошо мәсьәләләргә лә күҙ һалынһа икән...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 139 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 179 пациент, шул иҫәптән 106 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 1786 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 795-е - 60 йәште үткән. Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова Федерация Советындағы "Хөкүмәт сәғәте"ндә был миҙгелдә коронавирустан вакцинация талап ителмәүен белдерҙе. Сөнки COVID-19 артыҡ хәүеф менән янамай.

✓Мәскәүҙә үткән "Рәсәй транспорты" Халыҡ-ара форумы һәм күргәҙмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллинға төбәктең мөһим инфраструктура проекттары тураһында һөйләне. Һүҙ башлыса Өфөнән Көнсығыш сығыу юлы төҙөлөшө тураһында барҙы. Шулай уҡ вице-премьер менән Стәрлетамаҡтан Ергәнгә тиклемге Р-240 федераль трассаны киңәйтеү буйынса пландар менән уртаҡлаштылар.

✓Республика Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Яңы йыл тантаналарының датаһын үҙҙәренә билдәләү һәм ошо ваҡытта байрам ҡаласыҡтарын асыу бурысын йөкмәтте. "Беҙгә Яңы йылға әҙерләнергә ваҡыт, - тине Радий Хәбиров. - Етем, йә ата-әсәһе хеҙмәт иткән йәки һәләк булған балалар категорияһы беҙҙең иғтибар үҙәгендә булырға тейеш". Республика етәксеһе Мәҙәниәт һәм Мәғариф министрлыҡтарына киләһе дүшәмбе был тема тураһында ентекле мәғлүмәт бирергә ҡушты. 2024 йылда яңы йыл каникулдары 10 көн дауам итә.

✓Башҡортостанда ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеттың 25 йыллығын билдәләргә әҙерләнәләр. 28 ноябрҙә Өфөлә ошо уңайҙан тантаналы сара уҙғарыла. Республика Башлығының тейешле бойороғона ярашлы, сараны үткәреү бурысы республиканың Мәғариф министрлығына, мәҙәни программаны ойоштороу - Мәҙәниәт министрлығына, ҡатнашыусыларҙың туҡланыуы - Сауҙа министрлығына, транспорт менән хеҙмәтләндереү Башҡортостан Башлығының эштәр идаралығына йөкмәтелгән.

✓Өфөлә 19 ноябргә тиклем полиция генерал-лейтенанты Артур Әхмәтханов иҫтәлегенә көрәш буйынса Бөтә Рәсәй турниры бара. "Динамо" спорт комплексында сараны асыу тантанаһында Рәсәйҙең 24 төбәгенән 250 спортсы ҡатнашты. "Ике көн буйына 17-19 йәшлек көрәшселәр араһында 10 ауырлыҡ категорияһында миҙалдар уйнатыла", - тип билдәләнеләр ведомствола.

✓ *Әсәй һөтө менән, донъяны танып белә башлау менән ингән тел бер ҡайҙа ла булмай, юғалмай, онотолмай. Шуға балаларымдың туған телдәрендә аралашыуына тағы ла иғтибарлыраҡмын.*



ТУҒАН ТЕЛЕМ...

# АТАЙЫМДЫҢ ҺУҢҒЫ ҺАБАҒЫ

**Туған телебеҙҙең торошо, киләсәге хаҡындағы уй-фекерҙәре менән уртаҡлашҡан замандаштарға эйәреп, мин дә бер нисә күҙәтеүемде, баштан үткәндәремде яҙырға булдым.**



Ауыл ерендә тыуып үҫтем. Мәктәптә 9-сы класты тамамлаған-сы бар предметтарҙы ла тиерлек туған телемдә, үҙем көн-һайын күреп-белеп йөрөгән уҡытыусылар уҡытты. Ниндәй телдә һөйләшергә, һайларға тигән һорау тормай ҙа ине. Ағай-ҡустыларым менән атай-әсәйҙе тап атай, әсәй тиеп атауыбыҙ менән генә ауылдаштарҙан бер аҙ айырылдыҡ, сөнки күпселек балалар ҡәҙерлеләрен әней-әтей тиеп йөрөттө. Өйҙә ошо хаҡта һорау биргәс, атайым: "Минең тыуған Йылайыр районында атай, әсәй тип өндәшәләр, шуға минең балаларым да шулай тип әйтеүен теләйем",- тине.

Артабан урта белем алған В.И. Ленин исемендәге Стәрлетамаҡ лицей-интернатында ла милли мөхиткә барып эләктем, төрлө райондарҙан йыйылған балалар рәхәтләнеп башҡортса аралаша инек.

Һынауҙар БДУ-ға уҡырға ингәс башланды. Дөрөҫөрәге, ингәндә үк. Ул ваҡытта имтихан тапшырып инә инек бит. Журналистика бүлегенә һынауҙың береһе урыҫ теленән булып, шул имтиханды бик күп абитуриенттар, башлыса башҡорт ауылдарынан, мәктәптәрҙән килеүселәрҙән бирә алмаусы әсендерҙе. Мәктәп йылдарынан төрлө гәзит-журналдарға яҙышҡан, аңлы рәүештә ошо һөнәрҙе һайлап килгән йәш хәбәрселәр ине бит улар! Хыялдары менән хушлашып, Салауат Юлаев һәйкәле янында көйөфһеҙ генә йөрөгән шул егет-ҡыҙҙар һаман күҙ алдымда...

Беҙ, башҡорт телен ярайһы белгән, урыҫса имтиханды ла уңышлы үткән бер нисә абитуриент (40-ҡа яҡын кешенән торған төркөмөбөҙҙә 7-8 кеше инек) студент тормошона инеп киттек. Тәүге йылдарҙағы ауырлыҡтарҙы тәфсирләп яҙып тормайым. Сөнки башҡортса уйлап, фекерләп, яҙғанһөйләшкән кешегә ошо белгәндәрҙе тиҙ арала үҙ башыңда ғына тәржемә итеп, аҡ ҡағыҙға йә ҙур аудитория алдында урыҫ телендә еткереүе енел түгел икәнен ошондай эш менән шөғөлләнгәндәр генә аңлай. Тап шул ваҡытта урыҫ телен дә туған телем кеүек белергә тейешмен тип сәмләнеп, өйрәнеп, әле һаман урыҫ журналистикаһында эшләүемә нигеҙ шунда һалынды, буғай. Әммә үҙ телемә ҡарата һөйөүем дә, ихтирамым да һис кәмемәне. Унһыҙ үҙемдең балаларым тыуғас тағы һайлау алдына ҡуйҙы.

Өлкән ҡыҙым Гүзәлиәгә мәктәп һайлағанда, йәшәгән еребеҙгә яҡын булыр, тип математиканы көслө уҡытҡан лицейҙа туҡталдыҡ. Хәл ителеп бөткән мәсьәләгә яңы сиселеште ҡыҙым үҙе индерҙе. Балалар баҡсаһынан башҡорт гимназияһына экскурсияға барып ҡайтҡас, "Мин шунда ғына уҡырға барам", тине лә ҡуйҙы. Минең ҡарарыма ҡаршы сыҡһа ла эй ҡыуандым шул ваҡытта! Әлбиттә, кәңәштәре менән башыбыҙҙы бутарға маташыусылар булды. "Башҡорт мәктәбендә белемде түбән кимәлдә бирәләр", "Уны тамамлағас, юғары уҡыу йортона инеүе ауыр буласаҡ" һәм башҡалар. Яуабым бер булды: "Туған телен белгән кеше бер нисек тә кәм була алмай, башҡорт телен күберәк уҡығандан ғына башҡа предметтарҙан артта ҡалып булмай".

Хәҙер инде яуабым тағы ла төпләрәк. Ҡыҙым гимназияны алтын миҙалға тамамланы, бер репетиторға йөрөмәйенсә, Берҙәм дәүләт имтихандарын яҡшы тапшырҙы, техник йүнәлештә юғары белем алды. Минең өсөн иң мөһиме - балам менән рәхәтләнеп башҡортса һөйләшә алам. Һәм ул һылыуын да башҡорт гимназияһына биреүемде һораны. Шулай итеп, икенсе балам да башҡорт гимназияһында уҡып йөрөй. Яңыраҡ ҡылын тартып, "Әллә башҡа мәктәпкә күсерәйемме?" тигәнгә, "Юҡ, миңә бында бик оҡшай!" тине. Апаһы менән сағыштырғанда туған телдә аҙыраҡ аралаша, гаджеттар заманаһы балаһы бит. Ләкин минең үҙ телемдә сутырлауымды, өләсәһенең һөйләшен аңлай, йылдан-йыл үҙе ҡыҙығып, өйҙә башҡортса һөйләшеү сәғәттәре үткәрергә теләк белдереп ала. Был йәһәттән ҡыҙыма әсәй дәрестәре күп кәрәк әле. Тырышырбыҙ, сөнки... атайымдың һуңғы дәресе, бер ваҡиға шаҡ ҡатырҙы.

Атайым Йылайыр районында тыуып үҫһә лә, ғүмеренең күпселек өлөшөн Федоровка районында йәшәп, баҡыйлыҡҡа күсте. Беҙҙең район күп милләтле, төп аралашыу урыҫ телендә алып барыла. Йәшләй бында эш йүнәлтмәһе буйынса килеп төпләнгән атайым, әлбиттә, урыҫ телен бик яҡшы белде. Һөнәре буйынса район, совхоз кәңәшмәләрендә йыш сығыш яһай ине. Күп уҡыны. Һәм бына ғүмеренең һуңғы көндәрендә район дауаханаһына эләгеп, реанимациянан һуң өйрәнгән урыҫ телен онотоп, саф башҡортса, "йылайырса" ғына аралашҡан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бары бер тәүлек йәшәне шунан һуң, мин уны Мәләүез дауаханаһына күсергәндә һөйләшә алмай ине инде. Шунда тиҙ ярҙам каретаһында барғанда медсестраның һорауы аптыратты: "Атайығыҙҙы ҡасан күсерҙегеҙ беҙҙең районға? Яңыраҡтыр, бөтөнләй урыҫса белмәй ҙә, аңламай ҙа", - тине.

Албырғап ҡалдым. Тел мәсьәләһе үҙәктә түгел ине ул мәлдә, ныҡлы иғтибар итмәнем. Ҡәҙерлебеҙҙе ерләп, бер аҙ тынысланғас, атайҙы алып киткән ағаһыҙ төндә эргәһендә булған ҡустым да шул уҡ күҙәтеүе менән бүлеште. "Атай башҡортса ғына, беҙҙең яҡтыҡынан айырылған башҡорт телендә һөйләште", - тине. Эйе, Федоровка менән Йылайыр башҡорттарының һөйләше айырыла.

Хәҙер шуларҙы уйлайым да, әлдә генә ҡустым эргәһендә булған, әлдә генә туған телебеҙҙе белеп үҫкәнбеҙ, яҡынлыбыҙҙың һуңғы һүҙҙәрен аңламай, үкенестә ҡалыр инек бит, тип, тетрәнеп китәм. Тимәк, әсәй һөтө менән, донъяны танып белә башлау менән ингән тел бер ҡайҙа ла булмай, юғалмай, онотолмай. Атайымдың һуңғы һабағы булды был. Шуға балаларымдың туған телдәрендә аралашыуына тағы ла иғтибарлыраҡмын. Мәңгелеккә юлланғанда васыятымды аңларлыҡ балаларым булһын эргәмдә...

**Гөлиә ШАҺИҒӘЛИНА.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ҠАҒЫҘ БАҪМАҒА ЕТМӘЙ

**(Башы 1-се биттә).**

Беренсенән, интернетта баҫылған нәмәне башҡасараҡ уҡыйһың барыбер. Нисектер, күҙ йүгертеп кенә сығыу ҙа етә. "Төбөнә тоҙ ҡойоп", аңлап уҡыйым тиһәң, был ысул бөтөнләй бармай. Икенсенән, интернеттағы анау хәтле мәғлүмәт ағымынан баш мейеһе беҙҙе үҙенсә һаҡлай ҙа, ахыры: уҡығаның шунда уҡ онотолоп тора. Йәғни ул мәғлүмәттән икенсеһенә күстеңме, тәүгеһе хәтерҙән юйылып та ҡуя. Ә уҡырға өйрәнгән уҡыусыны был ҡәнәғәтләндерә буламы инде? Шуға ла өйрәнгән яҡшы ғәҙәт буйынса гәзит-журналды ҡулға тотоп уҡыу яҡшыраҡ.

Шулай уҡ халыҡ араһында таралған тағы бер фекергә ҡарашымды белдергем килә. Урамдарҙа матбуғат киоскыларының юҡҡа сығыуы баҫма матбуғаттың үлә барыуын күрһәтә, тигән булалар. Был аҡса мәсьәләһе менән бәйлеләр, сөнки хәҙер күп килем килтермәгән нәмәнән баш тартырға ғына торалар. Дим биҫтәһендә, мәсәлән, ике бөртөк киоск ҡалған. Ҡайһы бер гәзит-журналды һатып алам тип эҙләүселәр бар ул, үҙем шаһит булғаным бар. Ә киоск тотоу файҙалы түгел. Ә бына баҫма матбуғаттың көсөн реклама биреүселәр юғары баһалай. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, тауарҙары тураһында яҙып, гәзит итеп баҫтырып, почта йәшниктәребеҙгә тултырып китәләр бит.

Унан һуң, үҙен блогер тип атаусылар күбәйҙе. Уларҙың төп маҡсаты - аҡса эшләү, ниндәйҙер ваҡиға айҡанлы үҙен күрһәтергә тырышыу. Иртәнән кискә тиклем, йылдар дауамында урындағы проблемалар тураһында яҙамы ни ундай кешеләр! Быны әлеге лә баяғы гәзиттәр генә эшләй. Гәзиттең интернет баҫманан айырмаһы ла, өҫтөнлөгө лә шунда.

Баҫма матбуғатта баҫылған мәҡәләләр йыр кеүек йырлап торорға тейеш ул: күңелдең төпкө ҡылдарын сиртһен, уйҙарға этәрләк хистойғолар ҙа сағылһын. Билдәле шәхестәр, үҙ тарихыбыҙ тураһында уҡығанда бына мин шундай хистәр кисерәм. "Киске Өфө"нөң, мәҫәлән, баш ҡалабыҙға ҡағылышлы яңылыҡтарын яратам, гәзит мотлаҡ шулай булырға тейеш. Һәр кем бит үҙенә тәғәйен мәғлүмәтте күрергә теләй. Шулай уҡ фотоларҙа йөҙҙәр сағылһын, унда кешенең хистәре күренеп торһон.

Ә интернетта еңел-елпе "һоро" мәғлүмәттең етди әйберҙәргә ҡарағанда күберәк "лайыҡ" йыйыуына көйөнмәгеҙ. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле, ун йылдан һеҙҙән: "Журналист булараҡ, ниндәй яҡшы эштәр эшләнегеҙ, нимәләр тураһында яҙҙығыҙ?" - тип һорайҙар икән, ти. Ә һеҙ бынамын тигән тарихи мәғлүмәттәрҙе, замандаштарыбыҙ менән диалогтарҙы, халҡыбыҙҙы асылына ҡайтара торған матур мәҡәләләрҙе күрһәтәсәкһегеҙ һәм бынан ғорурлыҡ кисерәсәкһегеҙ. Улар ул заманда ла ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле буласаҡ.

**Вәлиулла БАЯЗИТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 2024 йылға йәшәү минимумы раҫланды. 1 ғинуарҙан ул 13 753 һумға еткерелә (хәҙер 12 650 һум). Эшкә яраҡлы халыҡ өсөн йәшәү минимумы күләме - 14 991 һум, пенсионерҙарға - 12 530 һум, балаларға 13 340 һум була. Республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, йәшәү минимумы халыҡтың йәшәү кимәлен асыҡлау һәм уларҙы аҙ тәьмин ителеүселәр категорияһына индереү өсөн ҡулланыла. Ул дәүләт социаль ярҙамы тәғәйенләү өсөн кәрәк.

✓Өфөлә ҡатын-ҡыҙҙар араһында бокс буйынса Рәсәй чемпионаты үтте. Турнир 11 ноябргә тиклем барҙы. Унда Рәсәйҙең 49 төбәгенән 180 спортсы ҡатнашты. Башҡортостан спортсыһы Юлия Чумгалакова 48 килограмм ауырлыҡ категорияһында бокс буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Рәсәйҙең Бокс федерацияһы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл турнирҙың дөйөм приз фонды - 24 миллион һум. Еңеүселәргә - миллион ярым, көмөш миҙалсыларға - 250 мең, ә бронза миҙал өсөн 125-шәр мең һум тапшырылды.

✓Уҡыусыларға 2024 йылда математиканан төп дәүләт имтиханында мәсьәләләр сискәндә программалау функцияһы булмаған калькулятор ҡулланырға рөхсәт бирелде. Хәбәр ителеүенсә, Федераль педагогик үлсәмдәр институты (ФИПИ) сайтындағы имтихан демоверсияһында ошондай мәғлүмәт бар. "Әште башҡарғанда КИМ варианты менән бергә бирелгән белешмә материалдары, линейка һәм программаланмаған калькулятор менән файҙалана алаһығыҙ", - тиелгән документта. Быға тиклем физика, химия һәм биология фәндәренән имтихан тапшырғанда ошондай калькулятор менән ҡулланырға мөмкин ине.

✓"Ҡарһылыуҡай - 2023" башҡорт Ҡарһылыуҙары конкурсы өлкәндәр һәм балалар номинацияһында кастинг башлай. Өлкәндәр номинацияһында ҡатнашыу өсөн 16-35 йәшлек ғүзәл заттар саҡырыла. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, төп бүләк - IPhone 14 һәм 100 мең һум. Башҡа номинацияларҙа ла шәп бүләктәр вәғәҙәләйҙәр. Финал эстрада йондоҙҙары ҡатнашлығында яңы йылса мюзикл-шоу форматында үткәрелә. Балалар номинацияһында 5-15 йәшлек ҡыҙҙар ҡатнашырға мөмкин.

✓ *Компанияларҙың дүрттән бер өлөшөндә штатта 1 кеше иҫәптә тора, тимәк, ҡалғандар килешеүһеҙ эшләй. Бынан урындағы бюджетҡа һалым килмәй. Һалымды һәм страховка взностарын да 21-ҙән 15 предприятие ғына түләй.*

*ҠЫҪҠАСА*

# ЛАВРОВ ҠОТЛАНЫ!

**Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең сит ил эштәре министры Сергей Лавров менән осрашты.** Улар төбәктең тышҡы иҡтисади бәйләнештәрен үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһы Башлығының матбуғат хеҙмәте. Рәсәйҙең Сит ил эштәре министрлығы етәксеһе билдәләүенсә, Башҡортостан илдең дуҫ дәүләттәр менән хеҙмәттәшлеген нығытыуға тос өлөш индерә. "Халыҡ-ара саралар үткәреү өсөн яҡшы мөмкинлектәр булдырыуығыҙҙы баһалайбыҙ. Киләһе йылда Рәсәй һәм Ҡаҙағстандың сираттағы төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумын юғары кимәлдә үткәрерһегеҙ тип ышанабыҙ, - тине Сергей Лавров. - Беҙгә ярҙам иткән ЮНЕСКО эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнашыуығыҙҙы ла билдәләп үтергә теләйем, өҫтәүенә миңә ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәйҙең хөкүмәт комиссияһына етәкселек итеү бурысы йөкмәтелде. Шуға күрә был өлкәләге ҡаҙаныштар һәм мөмкинлектәр асыҡтан-асыҡ күренә, беҙ уларҙы яҡшы күрәбеҙ". Осрашыуҙа Сергей Лавров Радий Хәбировҡа күкрәккә таға торған "Халыҡ-ара хеҙмәттәшлеккә индергән өлөшө өсөн" билдәһен тапшырҙы.

✓ **Өфөлә махсус операцияла ҡатнашыусыларға бер тапҡыр бирелә торған 100 мең һумлыҡ өҫтәмә түләүҙең ғәмәлдә булыу ваҡыты 2023 йылдың 1 декабренә тиклем оҙайтылды, тип хәбәр итә баш ҡала хакимиәте.** Һүҙ Рәсәй Ҡораллы Көстәре менән контракт төҙөгән хәрбиҙәр тураһында бара. Әлегәсә Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фондының ярҙам сараһы 23 октябрҙән 15 ноябргә тиклем ғәмәлдә ине. Муниципалитет хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, сумма меценаттар аҡсаһынан түләнә. "Урынлашыу өсөн Өфөнөң махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам үҙәгенә мөрәжәғәт итергә кәрәк (Октябрь проспекты, 85, тел.: +7 (34-72) 15-15-70, 215-16-70). Йәмәғәт фонды ла +7 (34-72) 46-26-86 телефоны буйынса түләүҙәр тураһында һорауҙарға яуап бирергә әҙер", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Өфө мэрияһында. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдың октябренән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға аҡсалата минималь түләү 210 мең һум тәшкил итә. Башҡортостандың ирекле батальондары яугирҙарына өҫтәмә ярҙам саралары бар. Мәҫәлән, әгәр хәрби 180 көн хеҙмәт итһә, республика уға 200 мең һум аҡса бүлә.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылдан республиканың дөйөм белем биреү ойошмаларында илһөйәрлек тәрбиәләү буйынса эште яҡшы ойошторған өсөн гранттар булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Документҡа ярашлы, һәр уҡыу йылы йомғаҡтары буйынса 500-әр мең һумлыҡ 10 грант бүленергә тейеш. Уларҙың хужалары республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы ойошторған конкурс нигеҙендә һайлап алына. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, Башҡортостанда 2023 йылда патриотик тәрбиә биреү тураһында закон ҡабул ителде. Бынан тыш, Мәғариф һәм фән министрлығы 2027 йылға тиклем илһөйәрлек тәрбиәһе буйынса республика программаһы проектын әҙерләне. Патриотик эш буйынса муниципаль координаторҙар институты эшләй, улар был эште системалы рәүештә алып бара.

*КӨН ТЕМАҺЫ*

**Төрлө ҡаҙылма байлыҡтар табыу менән шөғөлләнеүселәрҙең ерҙәребеҙҙе соҡоп, ер-һыуға, кейек-йәнлеккә күпме зыян килтереүен үҙебеҙ күреп йөрөйбөҙ. Бер туҡтауһыҙ байлыҡ арттырыуҙы маҡсат иткән ситтәрҙең урындағы халыҡтың сәләмәтлегендә лә, тәбиғәттең юҡҡа сығыуында ла эше юҡ - ауыр техника ер ҡыртышын аҡтара ғына. 2021 йылда Радий Хәбиров тәҡдиме менән Ер аҫты байлыҡтары менән ҡулланыу буйынса республика ведомство-ара комиссияһы булдырылғайны. Ул ҡаҙылма байлыҡ табыусыларҙы уларҙың эшмәкәрлектәре һөҙөмтәһендә уңдырышһыҙға әйләнгән ерҙең етештереүсәнлеген тергеҙергә мәжбүр итеү менән дә шөғөлләнә.**

# ЕР ҠЫРТЫШЫН АҠТАРЫП...

## алтын эҙләй ситтәр



Яңыраҡ Учалы районында урынлашҡан "Альтинвест" алтын йыуыу компанияһы һәм уның подрядсыһы "Гасадд" яуаплылығы сикләнгән ойошмаһы эшмәкәрлеге тикшерелеп, суд Ураҙ ауылы әргәһендәге территорияларҙы рекультивацияларға тигән ҡарар сығарғайны. Әммә Комиссия ағзалары был ерҙәрҙә һаман да тергеҙеү эштәре башланмауы, улай ғына ла түгел, һаман да ер аҫты байлыҡтарын сығарыуҙы дауам итеүҙәрен асыҡлаған. "Альтинвест" компанияһын ойоштороусыларҙың береһе Польша гражданины Анджей Персона, ул әлеге мәлдә Варшавала йәшәй һәм компанияның 70 проценты уның ҡулында. 30 проценты иһә Кипрҙа теркәлгән компаниянықы, уны инде Рәсәйҙең санкция исемлегендә булған Украина гражданы Леонид Козаченко ойошторған. "Альтинвест"тың Өфөләге юридик адресы буйынса офисы юҡ, отчеттарҙа ул килемен нуль тип күрһәтә, әммә Учалыла бик әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Компанияның был районда ике территорияла геологик тикшеренеүгә һәм алтын табыуға лицензияһы бар, улар икеһе лә Ураҙ ауылы әргәһендә.

Шуныһы ҡыҙыҡ, Комиссия 2022 йылдың апрелендә үк уны алтын табыу лицензияһынан мәхрүм иткән, бының өсөн төрлө закон боҙоуҙар нигеҙ булып торған. Әммә ошо уҡ йылдың октябрь айында Учалы район-ара прокуратураһы үткәргән тикшереүҙәр унда һаман да эштәр алып барылыуын асыҡлаған. Һөҙөмтәлә, "Альтинвест"ың яуаплы шәхестәренә ҡарата РФ Енәйәт кодексының "Эштәр алып барғанда тирә-яҡ мөхитте һаҡлау ҡағиҙәләрен боҙоу" 246-сы статьяһы буйынса енәйәт эше ҡуҙғатыла. Быйылғы йылдың февралендә иһә суд был ике компанияға рекультивация проектын эшләргә һәм уңдырышһыҙға әйләнгән ерҙең етештереүсәнлеген тергеҙергә тигән ҡарар сығара. Россельхознадзор мәғлүмәттәренә ярашлы, ергә килтерелгән зыян 28,5 млрд һум иҫәпләнә.

Законға ярашлы, ерҙәргә рекультивация эшләү өсөн башта уның проекты булырға тейеш. Уны муниципалитет менән тикшереүсе органдар раҫлай. Быға тиклем фирма хужалары проектҡа дәүләт экологик экспертизаһын үткәреүҙе лә ойошторорға бурыслы. Тик быңдай документ эшләнмәгән. Шулай ҙа "Гасадд" ойошмаһы август аҙағында рекультивацияға әҙерлекте башлаған, тигән хәбәр булған. Әммә Комиссия ағзалары билдәләүенсә, унда эшләүсе техника рекультивация менән түгел, ә, киреһенсә, алтын табыу менән шөғөлләнә. Тимәк, компания халыҡтың күҙен буяп, һаман да законһыҙ рәүештә алтын табыуын дауам итә, тигән фекерҙә улар.

Компания етәксеһе Динара Пигарева сәләмәтлегенә һылтанып, Комиссия үткәргән ултырышҡа килмәй. Предприятие вәкиле Тимур Латыпов төрлө һылтанyуҙар килтерә: әйтәйек, ерҙәрҙе тергеҙеү өсөн 2017-2018 йылдарҙа участкаларҙың һыу баҫыуы ҡамасаулай, ә 2019 йылда рекультивация проекты асыҡ тыңлауҙарҙы үтмәй. Компания эшлекле диалогҡа әҙер, проект дәүләт экспертизаһы үтеү менән, "финанс мөмкинлектәр булғас та" рекультивацияға тотонасаҡ, тип белдерҙе ул. Әммә ҡасан быңдай финанс мөмкинлектәр була, быныһын әйтеүе ҡыйын. Белгестәр әйтеүенсә, уларға ойошманы ябыу хәҙер хатта ҡулайлыраҡ та. Был осраҡта иһә тәбиғәтте тергеҙеү бурысы тулыһынса дәүләт иңенә ятасаҡ.

Әлеге ваҡытта Учалыла 36 компания эшләй, уларҙың ҡиммәтле байлыҡтарҙы эҙләү, разведкалау һәм табыу буйынса 51 лицензияһы бар. 2022 йылдың октябренән лицензиялар биреү туҡтатылған. Дөйөм Башҡортостан буйынса алтын табыу буйынса бирелгән лицензияларҙың 84 проценты тап Учалыға тура килә. Комиссияға эш етерлек бында. Мәҫәлән, компанияларҙың дүрттән бер өлөшөндә штатта 1 кеше иҫәптә тора, тимәк, ҡалғандар килешеүһеҙ эшләй. Бынан урындағы бюджетҡа һалым килмәй. Һалымды һәм страховка взностарын да 15 предприятие ғына түләй, ҡалған 21-е йыл һайын килемде нуль тип бирә. Төрлө кимәлдә тикшереүҙәр булып торһа ла, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрмәй. Бында бәләкәй бизнесты тикшереүгә мораторий булыуы ла ҙур роль уйнай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәбиғәткә зыян килтерелгән, ә хәлде үҙгәртеү өсөн аҡса юҡ, тигән һылтауҙар булмаһын өсөн республика Хөкүмәте аппараты, Тәбиғәттән файҙаланыу министрлығы һәм БР Дәүләт Йыйылышы федераль закон проекты өҫтөндә эш башланы. Лицензия хужалары өсөн эшмәкәрлектәре һөҙөмтәһендә уңдырышһыҙға әйләнгән ерҙең етештереүсәнлеген тергеҙеү өсөн банкта махсус иҫәп булдырырға тигән тәҡдим менән сығыш яһай улар. Иҡтисади ғына түгел, экологик зыян килмәһен өсөн бөтөн ысулдар ҙа үҙен аҡлаясаҡ һәр хәлдә. Был эштә иһә бөтөн кимәлдәге власть органдарының берләшеүе мөһим.**

**Роман ЯКИМЧУК.**
**"Башинформ".**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Рәсәй ҡалалары союзы вице-президенты итеп һайланды. Был 91 Рәсәй ҡалалары мәнфәғәттәрен кәүҙәләндереүсе Союз 33 йыл элек ойошторола. Өфө уны ойоштороусы инициаторҙар рәтендә була һәм 1991 йылдың 13 мартында уның ағзаһы булараҡ ҡабул ителә. Ошо йылдарҙа Союз Рәсәй ҡалаларын, илдәге муниципаль хәрәкәтте үҫтереү һәм яңыртыу өсөн төрлө ысулдар үҙәгенә әйләнә.

✓ Башҡортостан вәкилдәре кросс-эстафетала беренсе урынды яуланы (6 кеше 3-әр саҡрым). Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Ногинск ҡотҡарыу үҙәгендә ҡотҡарыусылар күпбәйгеһе буйынса чемпионат үтте. Ярыштарҙа бөтәһе 19 команданан 250-нән ашыу хеҙмәткәр ҡатнашты. Волга буйы федераль округынан ҡатнашҡан һигеҙ кешелек командала Өфөнән алты ҡотҡарыусы булды.

✓ Республиканың Парашют спорты федерацияһы спортсылары парашют спорты буйынса Рәсәй кубогы финалында юғары пилотаж күрһәтте. Улар биш көмөш һәм бер бронза миҙал алып ҡайтты. Бына улар беҙҙең чемпиондар: Антон Филиппов, Евгения Торгашева, Игорь Митюков, Илнур Хәлиуллин, Артём Боровик һәм Ольга Кириллова.

✓ Рәсәйҙә өсөнсө кварталда икенсел баҙарҙа торлаҡҡа ихтыяж бер йылда 15 процентҡа һәм уҙған квартал менән сағыштырғанда 11 процентҡа артҡан. Торлаҡҡа хаҡтар ҙа күтәрелә. Айырыуса Мәскәүҙә, Силәбелә һәм Һарытауҙа. Баш ҡалала икенсел торлаҡтың уртаса хаҡы 15,3 миллион һумға баһалана. Өфөлә икенсел торлаҡҡа хаҡ бер йылда 9 процентҡа артып, уҙған квартал менән сағыштырғанда үҫеш 2 процент тәшкил иткән. Шулай итеп, Өфөлә икенсел баҙарҙа фатирҙы уртаса 4,7 миллион һумға һатып алырға мөмкин.

✓ Рәсәй банкы ЦСКА, "Динамо" һәм "Локомотив" кеүек билдәле клубтар хөрмәтенә "Рәсәй спорты" серияһынан иҫтәлекле көмөш тәңкәләрҙе әйләнешкә сығарҙы. Ошо клубтарҙа бик күп чемпион тәрбиәләнгән. Бөгөн бында тотош илдән тиҫтәләрсә мең өлкән һәм йәш спорт һөйөүселәр шөғөлләнә. Үҙәк банктың матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 1 һумлыҡ көмөш тәңкәләрҙең (925-се ҡеләймә) ауырлығы - 7,78 грамм, диаметры - 25 миллиметр. Улар пруф сифатында эшләнгән. Тиражы - һәр береһе 10 мең дана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

# ТЫЛДА ЙӘШӘҮСЕЛӘР...

## тыныслыҡтың ҡәҙерен белһен ине

**"Ирҙәр айырылһа, ил таралыр", тигән боронғолар һәм ил өҫтөнә килгән һәр һынауҙа берҙәм күтәрелеп сыҡҡандар. Бөгөн дә илде берләштерер ирҙәр бар: уларҙың күбеһе Украиналағы махсус хәрби операцияла үҙ бурысын намыҫлы үтәй. Ошо көндәрҙә яҙмышын ил хәүефһеҙлегенә бәйләгән йәкташтарыбыҙ менән осрашыу мөмкинлегенән файҙаланып, "Әсән" хәрби ҡушаматлы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, йырсы Радик Динәхмәтов, 1-се ротаның "Алпан" ҡушаматлы замполиты, лейтенант, "Аҡ барыҫ" ҡушаматлы өлкән сержант менән әңгәмәләштек.**



➔ **Махсус хәрби операцияла һеҙ һәр берегеҙ үҙ урынында мөһим бурыстарҙы атҡараһығыҙ. Һүҙҙе ошо турала һәм МХО-ла ҡатнашырға тигән ҡарарға нисек килеүҙән башлайыҡ.**

**Әсән:** Һүҙемде күптәргә таныш һәм күңелемә яҡын, һәр концертта башҡарылған йырҙан башлайым: "Һаумы, гүзәл тыуған яҡтарым! Һаумы, шатлыҡ һайрар ҡоштарым! Һаумы, ғәзиз яҡын дуҫтарым! Һеҙгә һөйөү йырҙарым!" Бына ошо һүҙҙәрҙә, халыҡ көйҙәрендә, монобоҙҙа күңелдәребеҙгә яҡын, рухи көс бирерҙәй тәрән мәғәнә, хистәр һалынған һәм беҙҙең хәрби хеҙмәтебеҙҙә еңеллек килтерә был. Был буш һүҙҙәр түгел, саҡ ҡына ваҡыт килеп сыҡһа ла, тиҙ арала ҡулға флейтамды алып, үҙебеҙҙең башҡорт-татар моңдарын уйнап, шиғырҙар һөйләп, ҡыҫҡа ғына осрашыуҙар ойошторop алырға тырышабыҙ.

Мин, 22 июндә - Хәтер һәм ҡайғы көнөндә, контрактҡа ҡул ҡуйҙым һәм үҙем менән ғорурланыу тойғоһо кисерҙем. 58 йәшемдә был минең иң мөһим дөрөҫ ҡарарҙарымдың береһе булыуына әлегә тиклем инанам. Тормоштоң ошо һынауҙарын да үтәм. Был килешеү минең өсөн Ватанды һаҡлау, ярҙам өмөт итеп торған күршеләребеҙҙе яҡлау кеүек мөһим эшкә үҙ өлөшөмдө индерә алыуым менән әһәмиәтле.

Махсус хәрби операцияла мин ашығыс ярҙам машинаһының санитар-водителе булып хеҙмәт итәм. Был осраҡлы килеп сыҡты, әммә кеше тормошонда бер нәмәлә осраҡлы булмағанын да аңлайым. Башҡортостандан үҙ ирек-тәре менән тупланған полктарҙың береһендә 17 кешелек тынлы оркестр төҙөү тураһында бойороҡ барлығын ишетеп, уйлап та тормайса, шул коллективта булырға теләнем. Ҡыҙғанысҡа күрә, кәрәкле музыканттар тупланманы. Т. Кусимов исемендәге 3-сө батальондың етәкселеге мине ҡайҙа тәғәйенләргә тип хәл иткәндә, шундай һорау яңғыраны: "Кемдең водитель таныҡлығы бар?" Яугирҙарҙың ҡайһыныһы үҙе менән алмаған, ҡайһыныһы уҡымаған, кемдеңдер таныҡлығын тартып алғандар, ә минеке кеҫәлә булып сыҡты. Ашығыс ярҙам машинаһын шулай ышанып тапшырҙылар. Яралған яугирҙарға беренсе ярҙам күрһәтелгәндән һуң, тәүлектең ҡайһы сәғәтендә лә тиҙ арала ашығыс ярҙам машинаһында уларҙы кәрәкле дауаханаға алып барып еткереү - төп бурысым. Беҙҙә яраланғандар ғына түгел, кемдең теше һыҙлап, ҡан баҫымы күтәрелеп тә килә, уларға ла ярҙам итеп ебәрәләр һәм кәрәк саҡта дауаханаларға илтеп ҡуям. Йәш арауыҡтарыбыҙ төрлө булыуға ҡарамаҫтан, хеҙмәттәштәрем менән беҙҙә рух ныҡлығы, илһөйәрлек, бер-беребеҙгә ярҙам итергә ашығыу тойғоһо берләштерҙе.

**Алпан:** Күптән инде бер урында был тиклем күмәк кеше йыйылғанын күргәнем юҡ, сөнки беҙ алғы һыҙыҡта, көн дә окоптарҙа: 3-4 кешенән дә артыҡ йыйылмайбыҙ. Минең төп бурысым: окоптарҙа йәшәгән яугирҙар насар уйҙарға бирелмәһен, өйҙә ҡалған яҡындары тураһында борсолмаһын өсөн улар менән аралашыу, хәл-әхүәлдәрен белешеү һәм ярҙам итеү. Ҡайһы урындарҙа ике кеше бергә йәшәй һәм уларҙың бар донъяһы шул, бөтә һуғышты икәүләп үтәләр. Төрлө кешеләр, төрлө яҙмыштар бында, әммә махсус хәрби операция барыһын да тигеҙләне. Иң мөһиме, ирекмәндәр полкы беҙ, һәр кем ҡайҙа барырын аңлап, Ватанды һаҡларға килгән.

(Дауамы 9-сы биттә).

ҠЫҪҠАСА

## АҒАСТАР КИҪЕЛӘ ИКӘН...

**Өфө урамдарында саманан тыш ҡартайған һәм эстетик күренешен юғалтҡан ағастарҙы ҡырҡыу эштәре алып барыла.** Әммә Өфө халҡына ошо хаҡта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирелмәй, һөҙөмтәлә ризаһыҙлыҡ барлыҡҡа килә. Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Киров һәм Совет районлары хакимиәте башлыҡтарына мөрәжәғәт итеп, район биләмәләрендәге нормативтарға ярашһыҙ ағастарҙы киҫеп алыу һәм улар урынына яңы ағастар ултыртыу мәсьәләһе буйынса аңлатыу эштәрен әүҙемерәк башҡарырға ҡушты. "Мәғлүмәти вакуумдан ризаһыҙлыҡ ярала. Мин ҡала кешеләре менән тулыһынса килешәм. Әгәр ҙә һинең өйөң алдында үҫеп ултырған ағасты, ни сәбәптән икәнен әйтеп тә тормайынса, киҫеп ташлаһалар, һин мотлаҡ рәүештә иҫкәртеү яһарға хаҡлыһың... Һөҙөмтәлә һеҙ ҡала юбилейын күңелһеҙ конфликтҡа әйләндерәһегеҙ. Кешеләр әйткәнгә ҡолаҡ һалып, алдан күреп эшләү фарыз", - тине хакимиәт башлығы. Хәбәр ителеүенсә, Өфө властары Рәсәйҙең иң йәшел ҡалалары рейтингында Башҡортостандың баш ҡалаһы тотҡан урынды яҡшыртырға ниәтләй һәм Өфөнөң 450 йыллығына кәмендә 45 мең ағас ултыртылырға тейеш, тигән маҡсат ҡуя.

✔ **Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы штаб начальнигы, эске хеҙмәт полковнигы Артур Хафизов ҡала хакимиәтенең оператив кәңәшмәһендә сығыш яһаны.** Уның билдәләүенсә, үткән аҙнала Өфөлә дөйөм еңәйәтсел характерҙағы 73 дистанцион мутлыҡ ҡылыу осраҡтары теркәлеп, бөлгә тарыусылар 18 млн һумлыҡ зыян күргән. Зыян күреүселәр араһында Өфө дәүләт нефть техник, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеттары хеҙмәткәрҙәре һәм студенттары, "Созвездие" балалар ижады үҙәге, 68-се лицей, 3-сө гимназия уҡыусылары, "РТЮ", "Гидравлика" предприятиелары, Дим районы дауаханалары, Республика туберкулезға ҡаршы диспансер, Автомобиль юлдарының федераль идаралығы хеҙмәткәрҙәре һәм башҡалар бар. Полиция хеҙмәткәрҙәренең уяулығы һөҙөмтәһендә 70 мең һумға иҫәп тотолған бер мутлыҡ осрағы ҡылынмай ҡала. Ҡала мэры Ратмир Мәүлиев әлеге киң ҡолəмле мутлыҡ ҡылыу осраҡтарынан хәбәр алып, уҡыу йорттары хеҙмәткәрҙәре һәм студенттар араһында иҫкәртеү саралары үҙгәрыу зарурлығын билдәләне.

✔ **Ҡала хакимиәтенең оператив кәңәшмәһендә торлаҡтарҙы йылытыу буйынса Өфө халҡынан ялыуҙарҙың күп булыуы сәбәпле "БашРТС" һәм "ӨИС" предприятиеһы вәкилдәренең докладтары тыңланды.** Уҙған аҙнала байтаҡ ҡына йорттарҙа йылытыу йә бөтөнләйгә туҡтатылыу, йә иһә бик аҙ ғына кимәлдә йылытыу арҡаһында торлаҡтарындағы һалҡынлыҡтан зарланыусылар бермә-бер күбәйҙе. Йылытыу системаһы вәкилдәре ошо хәлдең сәбәптәрен йылы һыу үткәреү торбаларының боҙолоуы, иске йылытыу системаларын ваҡытында эшләтә башламау һәм етешһеҙлектәрҙе тиҙ арала бөтөрөү өсөн хеҙмәткәрҙәрҙең етешмәүе менән аңлатты. "Алдағы көндәрҙә ялыуҙарҙың мөмкин тиклем аҙыраҡ булыуына һәм йылытыу системаһында ниндәйҙер боҙолоу осраҡтарын оператив төҙәтә алыуығыҙға өмөтләнәм. Был - комплекслы эш, "БашРТС" хеҙмәткәрҙәре "ӨИС" предприятиеһындағы һәм "Өфөводоканал"дағы коллегалары менән оператив эш итергә тейеш. Эшегеҙҙә башҡаса ошондай етешһеҙлектәргә юл ҡуймауығыҙҙы үтенәм", - тине ҡала башлығы.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейгәндә

❖Ҡурай еләгенең йәш ботаҡтарының баштарын 15-20 см оҙонлоғонда өҙөп, буйына ҡырҡырға һәм 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға. Шунан термосҡа ҡойоп алып, 1,5 сәғәт төнәтергә. Көн һайын берәр стакан эсергә.

❖Бер ҡалаҡ шәкәр ҡара һоро төҫкә ингәнсе ут өҫтөндә тоторға, шунан һөт ҡойолған сынаяҡ аҫтына һалырға. Был шәкәрле кәнфит ҡоро йүтәл булғанда ярҙам итә.

❖Юл япрағы, туҡранбаш сәскәһе, кейәү үләне, бөтнөк, мәтрүшкә, болон туҡранбашы, үгәй инә үләне япрағы, ҡыр алмаһы япрағы һәм емеше, бесәй тырнағы (алтей) тамыры, андыҙ һәм татлы тамырҙан торған йыйылма ярҙамында һалҡын тейеүҙе дауаларға була.

❖15 грамм алоэ һуты, 100 грамм эс майы (ҡаҙ йәки суҫҡа), 100 грамм аҡ май, 100 грамм бал, 50 грамм какаоны бергә ҡушырға. Иртән һәм кискә 1 стакан эҫе һөткә 1-әр ҡалаҡ ҡушып ашарға.

### Панкреатит

❖Даими рәүештә диңгеҙ кәбеҫтәһе ашарға.

❖Цикорийҙы кофе урынына һөт менән яртылаш әҙерләп эсергә.

❖1 ҡалаҡ ҡарабойҙай онона 1 стакан кефир ҡушып, иртәнге аш урынына эсергә.

❖500 грамм петрушка өҫтөнә ҡайнар һыу һибергә, шунан тураҡларға. Кәстрүлгә һалып, өҫтөнә сыҡҡансы һөт ҡойорға. Бик әсе булмаған мейескә ҡуйырға, тик һөт ҡайнап бөтөргә тейеш түгел. Һөҙөргә. Сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡлап, бер көндә эсеп бөтөргә.

### Тамаҡ ауыртҡанда

❖ Яңы йомортҡаны туҡып, йылы һыулы стаканға ҡойорға һәм шуның менән тамаҡты тәүлегенә 5-6 тапҡыр сайҡарға.

❖ Сөгөлдөрҙө ваҡ ҡырғыстан үткәреп, 1 ҡалаҡ аш һеркәһе ҡушырға. Сөгөлдөрҙөң һуты сыҡҡас, һығып алырға һәм шул шыйыҡса менән тамаҡты сайҡарға. Сөгөлдөр урынына кишер ҡулланырға ла була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА** әҙерләне.

✓ Суд ҡарарҙың законлы һәм нигеҙле булыуын билдәләй. Магазин уға 100 мең һумлыҡ сертификатты аҡсалата ҡайтарып бирергә, ошо ваҡыт эсендә ошо сумманы үҙ файҙаһына ҡулланған өсөн процентарын түләргә тейеш.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Бәләкәй аҡҡош
### (Малый (тундряный) лебедь)



Аҡҡоштан саҡ ҡына бәләкәйерәк. Суҡышы яртылаш ҡара, яртылаш һары. Аҡҡош кеүек үк тауышлы. Евразияның тундра зонаһында таралған. Һыу аҫты үҫемлектәре, үләндәр, балыҡ менән туҡлана. Төньяҡ диңгеҙ, Көнбайыш Европаның башҡа ярҙарында ҡышлай. Башҡортостанда бер тапҡыр ғына күренә: 1986 йылдың 16 апрелендә "Шүлгәнташ" ҡурсаулығында 34 ваҡ аҡҡош осрай. Улар Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә үлән суҡып йөрөгән була. Халыҡ-ара, Рәсәй, Ҡаҙағстан Ҡыҙыл китаптарына, Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән һәм һаҡлауға мохтаж ҡош.

### Ышылдаҡ аҡҡош
### (Лебедь-шипун)



Аҡҡош кеүек ҙурлыкта һәм апаҡ төҫтә. Ҡанатын арҡаһына йәйеп, матурлап "өйөп" йөрөтә. Төп айырмаһы - ҡара нигеҙле ҡыҙыл суҡышлы. Осҡан саҡта ҡыҫҡырмай, бары тик ҙур ҡеүәтле ҡанаттарының шаулап тауышланыуы ишетелә. Ҡош туйы мәлендә генә "кгиооор" тигән тауыш сығара, башҡа мәлдә ышылдай ғына. Шуға ла ышылдаҡ аҡҡош тигән исем алған.

Рәсәйҙең көньяғы, төньяҡ-көнбайышында, Алыҫ Көнсығышта оя ҡора. Күлдәрҙә генә түгел, быуаларҙа осрай. Ҡамышлы бәләкәй күлдәрҙе үҙ итә, унда уларға туҡланыу өсөн ризыҡ күп.

Парҙар ояны бер-береһенән йыраҡ ҡора. Көньяҡ Уралда ла осрай. Әммә оя ҡороуын күргән ғалимдар булмай. 1982 йылда Федоровка районында Пугачев совхозының балыҡсылыҡ быуаһында ышылдаҡ аҡҡош күренә. Һуңғараҡ Әбйәлил, Баймаҡ, Учалы, Архангел, Дүртөйлө, Дәүләкән, Ейәнсура, Краснокама, Кушнаренко, Тәтешле, Федоровка, Шишмә райондарында 1-2-шәр пар оя ҡороуы билдәле, миграция мәлендә иһә 3-15 ҡошто осратыусылар була. 1986 йылда Урал арьяғындағы күлдәрҙе тикшереп, 10 күлдә 15 пар ышылдаҡ аҡҡош иҫәпләнек.

Оя ҡорған урындарына боҙ яткан мәлдә үк ҡайта. Инә ҡоштоң иғтибары өсөн ата ҡоштар үҙ-ара ҡаты ҡанға батып һуғыша. Инә ҡош ояһын ҡамыш эсенә ҡора. 7-9 йомортҡа һала, 35-40 көн баҫа. 65-70 көнлөк бәпкәләр осор хәлгә етә.

Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Сентябрҙең аҙаҡтарында ҡышлау ерҙәренә осоп китә башлай. Эксперт мәғлүмәттәренә ярашлы, республикала ышылдаҡ аҡҡоштарҙың дөйөм һаны яҡынса 40-50 пар. Һаҡмар, Ағиҙел, Бөрө йылғаларында ҡышлауҙары ла билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЮРИСТ КӘҢӘШЕ

# КҮРШЕЛӘРГӘ - ТЫНЛЫҠ

**Кеше уңайлы йәшәргә теләй - был тәбиғи. Матур, йылы, яҡты өйҙә йә фатирҙа. Һәр кем торлағын үҙенсә биҙәй, үҙ зауығына ярашлы хәлгә килтерергә тырыша. Әлбиттә, был хыялдарҙы тормошҡа ашырғанда ремонтһыҙ булмай. Тик бындай эштәр ваҡытында тауыш та сыға, ә уныһы инде, ҡайҙа барайһың, күршеләргә ҡамасаулай. Ике яҡтың да хоҡуғын һаҡлаған махсус закон бар. Бөгөн шуның төп ҡағиҙәләре менән танышып сығырға тәҡдим итәбеҙ.**



Башҡортостан Республикаһының "Төнгө ваҡытта граждандарҙың тынлығын һаҡлау тураһында"ғы Закон буйынса төндә ремонт эштәре менән шөғөлләнергә рөхсәт ителмәй. Шулай уҡ салют аттырыу, ҡысҡыртып музыка уйнатыу, йырлау, бейеү, һыҙғырыу һәм башҡа ғәмәлдәр ҡәтғи тыйыла.

"Төнгө ваҡыт" тип беҙҙә эш көндәрендә сәғәт киске 10-дан иртәнге 7-гә ҡәҙәрге, ял көндәре иһә киске 10-дан иртәнге 9-ға тиклемге ваҡыт һанала. Унан тыш, эш көндәрендә лә, ялдарҙа ла төш мәлендә, сәғәт берҙән алып өскә тиклем, тынлыҡты һаҡлау мотлаҡ (Был ҡағиҙә яңы сафҡа индерелгән күп фатирлы йорттарға тәүге йыл ярымда ҡағылмай).

Күршеләрегеҙ хоҡуҡтарығыҙҙы боҙа икән - был осраҡта хоҡуҡ һаҡлау органдарына йә Рәсәй ҡулланыусылар хоҡуҡтарын күҙәтеү органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Был мәсьәлә буйынса административ эш ҡуҙғатылырға тейеш һәм хоҡуҡ боҙоусы өсөн штрафтар ҙа ҡаралған:

- физик шәхестәр өсөн 2 меңдән алып 3 мең һумға тиклем;
- вазифа биләүселәр өсөн - 5 меңдән алып 8 мең һумға тиклем;
- юридик шәхестәр өсөн - 20 меңдән алып 30 мең һумға тиклем.

Әгәр бындай хәл тағы ҡабатланһа, штрафтар ҙа арта:

- физик шәхестәргә - 3 меңдән алып 5 мең һумға тиклем;
- вазифа биләүселәргә - 5 меңдән алып 8 мең һумға тиклем;
- юридик шәхестәр өсөн 30 меңдән алып 50 мең һумға тиклем.

Ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе үтәп, күршеләргә, бер-беребеҙгә хөрмәт күрһәтеп, тынлыҡ боҙмай, тыныс йәшәйек, дуҫтар.

**Руслан БИККИНИН,**
**юрист.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БҮЛӘК КАРТАҺЫН...
## аҡсалата




**Аҡсаһын ҡайтарып бирешеүҙе һорап, бер ҡатын мөрәжәғәт итте. Тыуған көнөнә бер магазиндың сертификатын бүләк иткәндәр, ул унда үҙенә кәрәкле әйберҙе тапмаған. Магазиндан ошо сертификаттың суммаһын ҡайтарыуҙы талап иткән һәм кире яуап алған. Бындай хәлдә ҡалған күп кеше сертификат әрәм булмаһын тип, үҙенә кәрәк булмаған әйберҙе һатып алырға мәжбүр була.**

Ысынлап та, бөгөн барлыҡ магазиндар ҙа тиерлек төрлө номиналдағы бүләк сетификаттары ла һата. Был уларға файҙаға ғына, уны һатып алған кеше тауарҙың хаҡын ҡаплаған да инде. Ә бына ул тауар артынан киләләрме, юҡмы, быныһы уларға ҡыҙыҡ түгел. Туғандарына, яҡындарына бындай бүләк эшләүселәр ошо сертификаттың хаҡын ҡайтарып була икәнен дә белмәй.

Мәҫәлән, күптән түгел Екатеринбургта ошондай хәл була. Спорт магазинында үҙенә кәрәкле тауарҙы тапмағас, сертификат эйәһе уның хаҡын ҡайтарыуҙы һорай. Әммә быны ҡаралмауын дәлил итеп, магазин баш тарта. Ҡатын судҡа мөрәжәғәт итә һәм үҙенең хаҡлы икәнен раҫлай. Магазин был ҡарарҙы яңынан ҡарауҙарын талап итә, әммә отола. Суд ҡарарҙың законлы һәм нигеҙле булыуын билдәләй. Магазин уға 100 мең һумлыҡ сертификатты аҡсалата ҡайтарып бирергә, ошо ваҡыт эсендә ошо сумманы үҙ файҙаһына ҡулланған өсөн процентарын, шулай уҡ әхлаҡи зыян өсөн 5 мең һумды, суд сығымдарын һәм 30 мең һум штрафты түләргә тейеш булып сыға.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ - бүләк картаһы (сертификаты) - ул һатып алынасаҡ тауар өсөн алдан аҡса түләү, йәғни аванс. Магазин уны һатып алыусыға кире ҡайтарып биреүҙән баш тарта алмай. Законлы хоҡуҡтарығыҙҙы белегеҙ. Судҡа мөрәжәғәт иткәндә РФ Юғары судының 16.03.22 йылдағы 307-ЭС21-16004 номерлы билдәләмәһенә лә һылтанма яһағыҙ. Бындай осраҡтар килеп тыуғанда Роспотребнадзорға мөрәжәғәт итергә кәрәк, ул һеҙҙе яҡларға бурыслы.

***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ,***
***РФ Дәүләт Думаһы депутаты.***

# СТУДЕНТТАРҒА...
## дәүләт ярҙамы




**Студенттарға стипендияның академик һәм социаль төрҙәре бар. Уҡыуҙағы уңыштар өсөн түләнә торған ҡәҙимгеһе дәүләт академия стипендияһы тип атала. Ул "өслө" билдәһе алған йә имтиханын тапшыра алмағандарға бирелмәй. Ә социаль стипендия алған баһаларына ҡарамай, социаль йәһәттән яҡлауһыҙ студенттарға түләнә. Шул уҡ ваҡытта аспиранттар менән ординаторҙарҙың был стипендияға хоҡуғы юҡ, ул көндөҙгө бүлектә белем алыусы студенттар өсөн генә тәғәйенләнгән.**

Кемдәр социаль стипендияға лайыҡ һуң? Иң беренсе сиратта, ул ата-әсәһе ҡарауынан мәхрүм ҡалған һәм етем балалар; уҡыған осорҙа ата-әсәһе йә уларҙың береһе мәхрүм булған осраҡта; инвалид балалар, 1 һәм II төркөм инвалидтар, бала саҡтан инвалидтар; Чернобыль АЭС-ы һәләкәте, Семипалатинск полигонында үткәрелгән ядро һынауҙары һөҙөмтәһендә радиация тәьҫиренә дусар булғандар; хәрби хеҙмәт осоронда хәрби йәрәхәттәр арҡаһында инвалид булған студенттар һәм хәрби хәрәкәттәр ветерандары; РФ Ҡоралллы көстәрендә, РФ Эске эштәр министрлығы ғәскәрҙәрендә, федераль дәүләт органдарында, РФ Милли гвардия ғәскәрҙәрендә, инженер-техник, федераль башҡарма власть органдарының ҡотҡарыу ғәскәрҙәрендә граждандар оборонаһы, РФ Тышҡы разведка хеҙмәтендә, федераль хәүефһеҙлек хеҙмәтендә, дәүләт һаҡ хеҙмәтендә һәм РФ дәүләт власть органдарының мобилизацияға әҙерлеген тәьмин итеүсе федераль органдарҙа хәрби вазифаларҙа һалдаттар, сержанттар, старшиналарҙы алыштырырлыҡ һәм хәрби хеҙмәттән сығарылған граждандар иҫәбенән РФ Ҡоралллы Көстәрендә командә өс йыллап контракт буйынса хеҙмәт иткән студенттар; дәүләт социаль ярҙамы алыусы студенттар социаль пенсия алырға хоҡуҡлы.

Социаль стипендия юллау өсөн ниндәй документтар кәрәк? Бына улар: граждандың студент булыуы хаҡында белешмә; һуңғы өс ай эсендәге стипендия күләме; ғаилә составы хаҡында белешмә; ғаиләнең бөтөн ағзаларына килем тураһында документ; социаль стипендияға хоҡуҡты раҫлаусы документтар.

Стипендияны юллау өсөн бөтөн документтар менән Күп функциялы үҙәккә йәки йәшәгән урын буйынса социаль яҡлау органына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Дәүләт социаль стипендия алыу өсөн үҙегеҙ уҡыған факультет деканатына ғариза яҙырға кәрәк. Бынан алдараҡ Башҡортостанда колледж студенттары өсөн академик стипендия күләмдәре билдәләнде.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

✓ ***Был урын турбаҫлылар төйәк иткән ерҙәрҙең үҙәгенә әйләнә. Өфө ҡалаһы тирәләй һәм уның территорияһында 20-нән артыҡ асыҡ торлаҡ пункттары барлыҡҡа килә.***



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа

**Турбаҫлы мәҙәниәте ҡәбиләләре**

Дала күскенселәренең иң ҙур төркөмө, ниндәйҙер беҙгә билдәле булмаған сәбәптәр арҡаһында төньяҡҡа күсеп китергә мәжбүр була, һәм улар Ағиҙел йылғаһының урта ағымы бассейнында, үҙәге Ҡариҙел (Өфө) йылғаһы тамағы янындағы, йәғни хәҙерге Өфө территорияһында булған төбәктә төпләнә. Был ваҡытта (б.э. IV быуаты) халыҡ күпләп йәшәгән ошо территория эре мәҙәни-иҡтисади үҙәктәрҙең береһе була. Ошоға бәйле Ағиҙел йылғаһының уң яҡ ярында хәҙерге "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы һәм мосолман зыяраты участкаларында тимер быуаты башында уҡ 6 эре ҡәлғә-ҡаласыҡ барлыҡҡа килеүе, ошо урында берегенән 300 метрҙан алып 1-2 километрға тиклем арауыҡта ананьин (б.э. тиклемVII-V бб.) һәм ҡараабыҙ (б.э. тиклем IV б. - б.э. II б.) мәҙәниәттәре ҡәбиләләре йәшәүе хаҡында иҫкә алырға була. Улар - Уфимское (Чертово), Усть-Уфимское.

Сутолока йылғаһы тамағындағы Дуҫлыҡ монументы, Өфө-III, Өфө-IV ҡаласыҡтары.

"Динамо" стадионы, Башҡорт дәүләт университеты территорияһында XX быуаттың 50-се йылдарындағы ер-төҙөлөш барышында өләшләтә тикшерелгән, б.э. тиклем II - б.э. II быуаттарына ҡараған бик ҙур ер зыяраты булыуы аныҡ билдәле. Шул уҡ дәүерҙәң икенсе бер зыяраты БДУның Коммунистик урамда урынлашҡан сит ил телдәре факультеты бинаһы районында табыла. Ошо зыяраттарҙың емертелгән ҡәберлектәрендә ул дәүерҙәр өсөн бик һирәк булған алтын һәм бронза һырғалар, ерҙә ятҡан арыҫлан һындары төшөрөлгән Мысыр (Египет) муйынсаҡтары, күп кенә ҡайыш өсөн эшләнгән бронза биҙәүестәр табыла.

Шулай итеп, Ағиҙел йылғаһы бассейнында турбаҫлы ҡәбиләләре урындағы ҡарабыҙ халҡы варистары менән бәрелешә һәм, улар элек-электән үҙләштергән биләмәлә көс ҡулланып нығынғандыр, тип уйларға була. Был урын турбаҫлылар төйәк иткән ерҙәрҙең үҙәгенә әйләнә. Өфө ҡалаһы тирәләй һәм уның территорияһында 20-нән артыҡ асыҡ торлаҡ пункттары барлыҡҡа килә, ә Сутолока йылғаһы тамағы районында ялан яғынан бейек валдар һәм тәрән йырындар менән нығытылған ике ҡаласыҡ төҙөлә. Уларҙың береһе хәҙер Дуҫлыҡ монументы урынлашҡан ерҙәге моронда, икенсеһе унан 300 м алыҫлыҡта, Пушкин урамының Яңы Мостовой һәм Салауат Юлаев проспекты менән сикләнгән түбәнге кварталында төҙөлә. Ҡаласыҡ урынлашҡан моронадо ике тәрән йырын хасил иткән. Бында тормош, күрәһең, беҙҙең эра сиктәрендә башлана, быға ҡулдарына өс йылан тотҡан ҡанатлы гений һыны төшөрөлгән уникаль табылдыҡ - тау хрусталенән яһалған гемма дәлил булып тора. Ошондай геммалар Парфия аҡһөйәктәренең шәхси мисәте рәүешендә ҡулланылған, улар беҙҙең эраның беренсе быуаттарына ҡарай.

Был ҡомарҡы шартлы рәүештә Өфө-II ҡаласыры тип аталды, һәм V - XVI быуаттарға ҡараған мәҙәни ҡатламдарындағы бай табылдыҡтарҙың яҡшы һаҡланған булыуы һәм уның урта быуаттарҙағы тарихының айырым этаптары (XIV-XVI бб.) төрлө илдәрҙең яҙма сығанаҡтарында сағылдырылыуы арҡаһында киң танылыу тапты. Был ҡомарҡы хаҡында ентеклерәк мәғлүмәттәр "Башҡорт ҡалаһы" бүлегендә бәйән ителәсәк.

Турбаҫлы ҡәбиләләре йәшәгән территория Кушнаренко ултырағы һәм ҡәберлеге, Шәрәй ҡәберлеге һәм Еҙем йылғаһы буйындағы Имәндәш ҡаласығы кеүек терәк ҡомарҡылар менән билдәләнә. Иң көньяҡ тарафтағы ҡомарҡы - Һаҡмар ҡаласығы. Күрһәтелгән территория бик яҡынса ғына: турбаҫлыларҙың Көньяҡ Урал далалары буйлап киң массив булып таралып йәшәүе хаҡында фараз итергә төплө нигеҙ бар, әммә уларҙың бындағы тормошо эҙҙәре әлегә асыҡланып бөтмәгән.

Турбаҫлы ҡомарҡыларынан ҡурғандар барыһынан да яҡшыраҡ өйрәнелгән, уларҙың иң ҙурҙары - Турбаҫлы, Дежнев, Глумилино ҡурғандары. Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап, Ырымбур күперенән Өфө ҡалаһының мосолман зыяратына тиклемге арауыҡта, Туҡай, Зәки



Вәлиди һәм Пушкин урамдарын да индереп, урынлашҡан ҡурғандарҙы иң күләмле тип атап була.

XVIII - XIX быуаттарҙа Өфө ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеүселәре бында яңы йорттар төҙөгәндә, урамдар һалғанда һ.б. шундай эштәр барышында бик күп ҡурғандарҙың (меңәрләгән булыуы ла мөмкин) емертелеүе хаҡында яҙып ҡалдырған. Әйтергә кәрәк, тап ошо ҡурғандарҙа ерләнгән кешеләрҙең юғары иҗтимағи хәлен дәлилләүсе иң ҡыҙыҡлы әйберҙәр табыла. Шундай осраҡтарҙың ҡайһы берҙәрен айырым билдәләп үтәйек.

1786 йылда Өфө наместнигы И. Якоби өйөнә нигеҙ ҡаҙығанда (хәҙерге Республика Йорто районында) ҙур ҡурған ҡаҙып асыла, ошо турала бына нисек яҙып ҡалдырылған: "... саф, лигатураһыҙ алтындан ҡойолған прибор (йыйылма) табылды, ул... Императрица Екатерина II ебәрелде лә инде".

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



Беҙ, хәҙерге заман башҡорттары, уҡымышлы боронғо төрки бабаларыбыҙ кеүек, яҙма телебеҙҙе "Әлифба" китабынан башлап үҙләштерә башлаһыҡ. Әлиф - ғәрәп алфавитының тәүге хәрефе, әммә ул ғәрәпсә "а" хәрефен белдереп, "алиф" тип әйтелә. Ҡашғари һүҙлеге лә тап ошо хәрефтән башланып китә.

**"Ар (Әр) - (кириллицала: ап. - Тәрж. иҫк.), көсәйтеү һәм өҫтөнлөк киҫәксәһе, предмет иң юғары өҫтөнлөк сифатына эйә булғанда ҡулланыла. Әйтәләр: әр әҙгү нәg (әп әҙгү нәг) - бик яҡшы әйбер; ар aq (ап ак), бөтөнләйгә аҡ, уғыҙса."**

Ҡашғари миҫал итеп килтергән "ап-ак" һүҙенең һис бер үҙгәрешһеҙ тиерлек башҡорт лексиконында ул йәшәгән XI быуатта уҡ ҡулланылыуына шик юҡ. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының бала бәпләгәндәрендә уларға "аппағым", тип иркәләүе шулай уҡ билдәле бер өҫтөнлөк, артыҡлыҡ дәрәжәһен белдереп тора.

Ғөмүмән, "ап" киҫәксәһе ҡулланылған һүҙҙәр хәҙерге башҡорт телендә байтаҡ: "ап-асыҡ", "ап-аяҙ", "ап-айыҡ" һ.б. Күрәһең, боронғо дәүерҙәрҙә "ап" һүҙе һоҡланыуҙы, көслө тойғо менән өндәү-өндәшеүҙе белдергән ымлыҡ булғандыр.

Мәхмүт Ҡашғари "ап" киҫәксәһенең икенсе бер мәғәнәһен дә аңлатып китә:

**"Ар - түгел (не) мәғәнәһендә ҡулланыла торған киҫәксә. Әйтәләр, ар bu ар ol - был да түгел, теге лә түгел, тигәнде аңлата". Күреүегеҙсә, башҡорттар был осраҡта "ап" киҫәксәһен ҡулланмай. Атабан: "Үр - төҫтө көсәйтеү киҫәксәһе, чигил һөйләшендә: үр үгүg (үп үрүг) - бигерәк аҡ".**

Башҡорт телендә был киҫәксә лә бар, әммә үтә һирәк ҡулланыла: "үп-үткер бысаҡ". Шул уҡ ваҡытта телебеҙҙә Ҡашғари атап үткән әлеге киҫәксәгә оҡшаған "өп" һүҙе бар, мәҫәлән, был киҫәксә "әр" киҫәксәһе менән бәйләнештә тора: "өп-әр-яны". Дөрөҫ, һуңғы осраҡта, башлыса "өп" киҫәксәһе төшөрөлөп ҡалдырыла: "әр-яны". Ғөмүмән, башҡорт телендә "өп" киҫәксәһе һирәк ҡулланыла, күбеһенсә, ошо ҡиҫәксәне ҡушып һөйләү диалекттарға хас. Миҫал өсөн: "өп-өҫтән", "өп-әркәк". "Өп"кә параллель рәүештә уның ҡалын әйтелешле "оп" варианты ла осрай: "оп-осло бағана".

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 42-43-сө һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

**Ковель йүнәлешендәге һәм Владимир-Волынский янындағы яу хәрәкәттәре**

Ҡала янына үтеп кереү өсөн дошман оборонаһындағы өҙөклөктө эҙләргә тура килә. Һәм бындай урын табыла: Овадно станцияһы тәңгәлендә йылға күпере емертелгән була, шуға күрә ул тирәлә дошман көстәре күренмәй. Беҙҙең саперҙар бер нисә сәғәт эсендә күперҙе ремонтлай, һәм полктар, тыл подразделениеларынан башҡа, немец оборонаһы артына үтеп инә. Әйтергә кәрәк, ошоға тиклем булған ҡаты алыштарҙа беҙҙең дивизиябыҙҙа ла юғалтыуҙар аҙ булмай, һәр полкта 4 эскадрон урынына тулы булмаған 3-әр эскадрон ғына ҡала.

Немецтар үҙ тылына сыҡҡан полктарҙы шәйләп ҡалып, ҡалаға резервтарын килтерә. Улар Владимир-Волынский ҡалаһы тирәләй ныҡлы оборона системаһы төҙөй: ҡала ике рәт траншеялар, сәнскеле тимер сыбыҡлы кәртәләр, дзоттар, мина яландары менән уратып алынған була.

11 апрелдә 58-се һәм 60-сы гв. полктары ҡалаға яҡынлаша. 58-се гв. атлы полкының хәрби хәрәкәттәре журналында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "... 12 апрелдә иртә менән дошман ҡыҙыу артиллерия уты асты. Беҙҙең уң флангыға 6 "фердинанд" сыҡты һәм, көслө ут асып, тимер юлы буйлап хәрәкәт итә башланы. 16 сәғәттә комдив бойороғо менән беҙҙең эскадрондар кирбес заводы янына сигенеп, оборона биләне. Боеприпастар менән тәьмин ителеү етерлек булманы (бер яугирга - 10 - 15 патрон). Көн буйына дошман авиацияһы әүҙем эшләне. Был көндә 58-се гв. атлы полкы һәләк булғандарҙан 55, яраланғандарҙан - 114 яугирын юғалтты, 4 орудие, 3 станоклы пулемет, 3 ПТР сафтан сыҡты. Дошман һәләк булғандары һәм яраланғандары менән 350 - 400 тирәһе һалдатын һәм офицерын юғалтты. 4 "фердинанд" емертелде. 13 апрелдә полк позицияларын ҡалдырҙы һәм, Турья, Поливки, Загатки ауылдары районында етеп, элекке рубежда оборонаға күсте".

6-сы гв. атлы полкының хәрби хәрәкәттәре журналынан: "... 11 апрелдә өс эскадрон һәм миномет батареяһы йәйәүле стройҙа ҡул аҫтындағы материалдарҙан һалынған штурм күперенән Турья йылғаһы аша сыҡты. Владимир-Волынский ҡалаһы янында тәүлек буйына барған алышта һәм Овадно ауылындағы венгр гарнизоны менән бәрелештә, шулай уҡ бомбаға тотоуҙан полк ҙур юғалтыуҙарға дусар булды: 33 кеше һәләк булды, 50 кеше яраланды. Дошмандың юғалтыуҙары: 160 кеше юҡ ителде һәм таралып китте, 10 ут нөктәһе баҫтырылды, 2 урта танк сафтан сығарылды. Владимир-Волынский янындағы алыштарҙа батырлыҡ күрһәтте: 3-сө эскадрондың 4-се взводы командиры, гв. лейтенанты Н. Әнүәров. Ул үҙенең взводы менән беренсе булып дошман биләгән урынға бәреп инде һәм тинһеҙ алышта һәләк булды, взводтың тағы ла 11 яугиры үлеп ҡалды. Фашист йыртҡыстары 12 апрелгә ҡаршы төндә Әнүәровтың кәүҙәһен сәнскеле тимер сыбыҡҡа эләктереп ҡуйып, уның мәйетен ут аҫтында тоттолар. Алыштa шулай уҡ гвардия сержанттары Атаев, Лопатин, Савоцкий, гвардия рядовойҙары - Мощиев, Разистный, Кондратьев батырлыҡ күрһәтте. Гвардия өлкән лейтенанты Колесниковтың һәм гвардия лейтенанты Симановтың подразделениелары бигерәк тә ныҡ тороп алышты".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Улар барыһына ла әҙер. Гендар аша килә батырлыҡ. Мин тәүҙә, һалдаттарҙың күпселеге аҡса эшләргә барғандыр, тип уйлағайным. Барып һөйләшә башлағас, бөтөнләй улай түгеллеген аңланым.*



**Күренекле яҙыусы, драматург, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, республика, Рәсәй һәм халыҡ-ара әҙәби конкурстар лауреаты, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Мөнир ҠУНАФИН уҡыусылар араһында киң танылыу яулаған Фәнис Хөсәйенов тураһындағы "Бер ғүмер етмәй икән...", "Ҡыҙарып сейә бешкән мәл ине" тигән юлъяҙмалары өсөн Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһына лайыҡ булды. Уның менән ҡорған әңгәмәбеҙ ошо очерктарында күтәрелгән проблемалар хаҡында барыр.**

# ҠАНЫБЫҘҘА БАР ЯУГИРЛЫҠ



**Мөнир Сәхиулла улы, махсус хәрби операция барған ергә сәфәрең осраҡлы ғына булмағандыр. Әлбиттә, журналистарҙың был командировкаһы Башҡортостан Республикаһы етәкселеге, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, "Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы тарафынан ойошторолдо. Ә бына яҙыусы һәм журналист булараҡ унда барырға үҙеңдең шәхси маҡсаттарың бар инеме?**

- Махсус хәрби операция хаҡында мәғлүмәт туплап, үҙемсә анализлай барҙым. Яҙғандарыма ҡарап дәғүә белдереүселәр ҙә булды, йәнәһе, мин ситтән тороп яҙғанмын. Белеүегеҙсә, үткән ҡыш халыҡ батыры Фәнис Хөсәйенов хаҡында очергым донъя күрҙе. Фәнистең әсәһе, тәүге уҡытыусыһы, күршеләре, ауылдаштары менән осрашып, батырҙың бала сағы, үҫмер йылдары, бигерәк тә махсус операция барған ерҙәге батырлыҡтары тураһында ентекләп яҙҙым. Очеркты халыҡ яратып ҡабул итте. Фәнистең батырлығы хаҡындағы эмоциональ күңел тороштарым уҡыусыға тәьҫир иткәндер. Ләкин мин унда һуғыш яланындағы ысынбарлыҡты шаһит булараҡ түгел, күҙ алдына килтереп кенә яҙҙым. Шуға күрә ул ерҙәргә барырға, күрергә тигән маҡсатым барлыҡҡа килде. Мөмкинлек килеп сығыу менән унда барырға теләк белдерҙем.

Беҙҙең маҡсат алғы һыҙыҡта окоптарҙа, блиндаждарҙа булып, дары еҫен еҫкәп, һалдаттарҙың күңел торошон тойоп ҡайтыу, аҙаҡ күргәнебеҙҙе халыҡҡа нисек бар, шулай еткереү ине. Китер алдынан ныҡлы инструктаж үткәрҙеләр. Бер үк ваҡытта ҡурҡыттылар, сөнки унда аҙым һайын хәүеф һағалап тора. Мәҫәлән, 90 йәшлек әбейҙең: "Бәлеш бешерҙем, балаҡайҙарым, ашағыҙ", - тип тәҡдим итеп, ике һалдатты ағыулауы хаҡында әйттеләр. Снаряд килеп шартлап, үҙең йә иптәшең яраланған осраҡта беренсе ярҙамды нисек күрһәтергә кәрәклеген дә өйрәттеләр. Бер үк ваҡытта беҙ ысын мәғәнәһендә яуға барғанлығыбыҙҙы белеп, барыһына ла әҙер булып юлға сыҡтыҡ. Һуңынан юлъяҙмамда барыһын да түкмәй-сәсмәй яҙып сыҡтым.

**Беҙ, Рәсәйҙә йәшәүселәр, Кавказдағы ҡайһы бер һуғыш ваҡиғаларын иҫәпкә алмағанда, тыныс тормошта йәшәнек. Шул тормоштан ҡапыл алғы һыҙыҡҡа аяҡ баҫыуҙы нисек кисерҙең? Хәҙер технологиялар һуғышы мәле. Бер секундтан снаряд килеп төшөүе бар. Ундай саҡта кеше ҡасып та, йәшеренеп тә ҡотола алмай бит инде...**

- Ҡыҙыҡ та, бер үк ваҡытта ҡыҙыҡ та түгел һорау. Ысынлап та, беҙ бәхетле бала саҡ, бәхетле үҫмер, бәхетле йәшлек осоро кисерҙек. Унда барғансы ул һуғыш миңә ҡағылмай тигән тойғо бар ине. Мин унда барыуға әҙер ҙә түгел инем. Үткән йәй ғаиләм менән Ҡара диңгеҙҙә ял иткән саҡта диңгеҙ арьяғында барған һуғыш әллә ни йоғонто яһаманы. Ял иткәндә Анапалағы шифаханала мәҙәни мәсьәләләр буйынса директор урынбаҫары булып эшләгән яҡташ бер апай менән һөйләшеп киттек тә, ул: "Беҙгә Донецк ҡалаһынан ял итергә килгән балалар һауала вертолет йә самолет күренеү менән, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, ағас ышығына йүгереп барып сүкәйә төшәләр. Бер көн йомала туй барҙы һәм шунда салют аттырҙылар ҙа, барып инһәм, балалар сумаҙандарын алып, ишек төбөндә көтөп ултыралар", - тип һөйләне.

Был хәлдәр мине бик ныҡ уйландырҙы. Ә бит беҙгә туранан-тура ҡағылмағас, һин уны, ысынлап та, тоймайһың. Бөйөк Ватан һуғышында, белеүебеҙсә, бөтә ил менән күтәрелеш күҙәтелгән. Шуға күрә, алдан шундай хәлдәрҙе ишеткәс, күңелем менән еңелерәк уйлап барҙым.

Ростов өлкәһенән барғанда игендәр тулҡынланып ултырған иҫ киткес матур баҫыуҙар күңелгә тыныслыҡ килтерә. Луганск Халыҡ Республикаһы территорияһына инеү менән картина бөтөнләй үҙгәрә. Ағастар яна, уларҙың күбеһе ҡороған, юлдағы яҙыуҙар тутығып, иҫкереп бөткән. Беҙҙәге 70-се йылдарҙа күҙәтелгән ҡотһоҙ күренештәр хасил булды. Быларҙы күреп, күңел һиҫкәнеп китте, һаҡланыу инстинкты уянды. Гражданскийҙар һиңә һынап ҡарай, күҙҙәреңә тура ҡарамаған кеүектәр. Уларҙы йәлләп тә, бер ни эшләй алмауыңды аңлауҙан ҡыйын булды.

Шайморатов, Доставалов батальондары һалдаттары менән осраштыҡ. Улар шул тиклем берҙәм, үҙҙәренең бурыстарын яҡшы аңлайҙар. Яҙған саҡта инде һәр береһенең кисерештәренә инергә тырыштым. Улар өсөн ҡәҙерле булған төшөнсәләргә барыбер ҡағылаһың. Һәр һалдат янында мөмкин тиклем оҙағыраҡ булдым. Мин - уларҙың энергетикаһын, улар минекен тойҙоҡ. Һәр береһенең тауышы, һөйләгәндәре барыһы ла хәтеремдә. Мин улар менән кем булыуҙары хаҡында мәғлүмәт алыу өсөн генә аралашманым.

Азат Шамил улы Бадранов менән осраштыҡ. Ул хәүефһеҙлектең иң беренсе нәүбәттә үҙебеҙҙән торғанын аңлатты. Әлбиттә, беҙҙең хәүефһеҙлек алдан ҡайғыртылғайны. Бронежилет, касканан алып маршруттарға тиклем алдан билдәләнде. Шул уҡ ваҡытта өҫтөңә снарядтар килеп төшмәҫ тигән бер ниндәй ҙә гарантия булманы.

**Унда үҙең, ҡустыларың, улың йәшендәге егеттәр махсус хәрби операцияла ҡатнаша. Бындағы, тыныс тормоштағы егеттәр менән сағыштырғанда уларҙағы үҙгәрештәр нисек тойолдо?**

- Ныҡ һиҙелә. Бер үк ваҡытта улар шаяра, көлә, көләмәстәр һөйләй. Һуғыштың үҙ тормошо бар. Нисек кенә сәйер яңғырамаһын, матур яҡтары, ҡыҙыҡ хәлдәре бар. Шул уҡ ваҡытта һуғышты беҙ атакаға барыу, һәләк булыу тип кенә күҙ алдына килтерәбеҙ. Өлкәнерәктәр араһынан "Вилнон" позывнойлы яугир ярты йылға ғына контракт төҙөгән, ҡайтыр ваҡыты етһә лә, ҡайтҡыһы килмәй. Икенсе бер яугир һәләк булған Учалы егеттәрен иҫенә төшөрөп, илап ебәрҙе. Йәшерәктәрҙән ике егет: "Беҙгә ҡыҙҙар алып килегеҙ әле", - тип шаяртып алдылар. Әммә улар менән етди һөйләшә башлаһаң, ни тиклем тәрән аҡыллы булыуҙарын тояһың. Улар тәү ҡарашҡа ғына ябай һәм шаян тойолалар. Тағы ла бер егет бөтөнләй шиғыр уҡырға яратмаған, үҙенең шиғыр уҡығыһы килә, үҙенең дә күңелендә шиғыр барлыҡҡа килә. Ә бит шиғыр күңелгә былай ғына, рифма эҙләү булып ҡына килмәй. Шул тиклем тәрән кисерештән, илаһилыҡтан йә булмаһа тетрәнеүҙән генә тыуа.

*Шайморатов, Доставалов батальондары һалдаттары менән осраштыҡ. Улар шул тиклем берҙәм, үҙҙәренең бурыстарын яҡшы аңлайҙар. Яҙған саҡта инде һәр береһенең кисерештәренә инергә тырыштым. Улар өсөн ҡәҙерле булған төшөнсәләргә барыбер ҡағылаһың. Һөйләшә башлаһаң, ни тиклем тәрән аҡыллы булыуҙарын тояһың. Бер егет бөтөнләй шиғыр уҡырға яратмаған, үҙенең шиғыр уҡығыһы килә, үҙенең дә күңелендә шиғыр барлыҡҡа килә. "Мулла" ҡушаматлы егет 2020 йылда намаҙға баҫҡан.*

"Мулла" ҡушаматлы егет 2020 йылда намаҙға баҫҡан. Уға: "Дин кешеһенә ҡорал тотоп, тере йән эйәһенә тоҫҡарға, уның йәнен ҡыйырға яраймы һуң?", - тигән һорау бирҙем. Унан берәй вәғәз һөйләр тип көттөм. Ә ул: "Бер ун йылдан үҙебеҙҙең ни тиклем хаҡлы булыуыбыҙҙы белербеҙ. Әгәр ҙә берәүҙең улы икенсе берәүҙең улын "кәләш" итеп алам тиһә, атай-олатайҙарыбыҙ ҡәберенән ҡалҡып торасаҡ бит. Шул тиклем хәшәрәтлек беҙгә килмәһен өсөн мин ҡулыма ҡорал алып, шул хәшәрәттәргә атырға мәжбүрмен", - тип яуап бирҙе. Мин иһә шулай уйлайым: беҙҙең илдә, Башҡортостанда шундай тормош башланасаҡ һәм әлеге көнбайыш илдәренең алдынғы ҡарашлы кешеләре беҙҙең илдә йәшәгеһе киләсәк.

**Беҙ йыш ғына йәштәрҙе: "Һеҙ битарафһығыҙ, ялҡауһығыҙ, беҙ бөтөнләй икенсе төрлө булдыҡ", - тип тәнҡитләргә яратабыҙ. Ә бит экстремаль хәлдәр, башҡа төрлө көтөлмәгән ваҡиғалар килеп сыҡһа, беҙ тәнҡитләгән йәштәр батырлыҡҡа һәләтле, шулай бит? Беҙҙең халыҡтың ҡанында ята ул батырлыҡ...**

- Эйе, улар барыһына ла әҙер. Гендар аша килә батырлыҡ. Мин тәүҙә, һалдаттарҙың күпселеге аҡса эшләргә барғандыр, тип уйлағайным. Уларҙы ғүмерҙәрен аҡсаға алыштырыусыларға ла тиңләүселәр булды. Барып һөйләшә башлағас, бөтөнләй улай түгеллеген аңланым. Улар, бәлки, тәүге айҙарҙа аҡса эшләргә килдем тип тә уйлағандарҙыр. Хәҙер заман шундай, бындай ауыр хеҙмәт буш булырға ла тейеш түгел. Әммә бер нисә ай бер-береңә иң терәшеү, дуҫлыҡ, туғанлыҡ, яуҙаштарыңдың һәләк булыуына шаһит булыу бөтөнләй башҡа маҡсаттарҙы барлыҡҡа килтерә һәм аҡса үҙенән-үҙе икенсе планға ҡала.

Ишембай батыры "Дикий" тыныс тормошта иретеп йәбештереүсе булған, кәүҙәгә әллә ни оҙон түгел, әммә физик яҡтан көслө, уны барыһы ла ярата. Ул көн аша алғы һыҙыҡҡа аҙыҡ-түлек, боеприпастар ташый. Рота командиры уны буласаҡ генерал ти. "Мин илемде ныҡ яратам, шуға ла батырмын", тине ул миңә. Кешене өйрәтһәң дә улай әйтә алмай, был һүҙҙәрҙе ул йөрәгенән сығарҙы. Егет үҙе күп һөйләргә яратмай. Хушлашҡан саҡта: "Беҙ рация аша үҙ-ара башҡортса һөйләшәбеҙ. Дошмандар аңламаһын өсөн. Һеҙ унда: "Башҡорт телен һәйбәтерәк белегеҙ, был яу яланында ла кәрәк", - тип яҙығыҙ әле", - ти.

**Фәнис Хөсәйенов тураһында һин унда бармайынса яҙҙың. Хәҙер барыһын да ку-**

✓ *Улар бәхетле кешеләр. "Баш осонда аяҙ күк йөҙө" тигән һүҙҙәр менән өсөн элек ниндәйҙер байрамда әйтелгән теләк кенә булһа, хәҙер бөтөнләй башҡаса яңғырай.*



**реп ҡайтҡандан һуң был темаға әйләнеп ҡайтһаң, бөтөнләй башҡаса яҙыр инеңме?**

- Әсәһе, ауылдаштары, туғандары менән аралашыуым хаҡындағы өлөшө шул килеш ҡалыр ине. Дуҫ егеттәре менән аралашыуға бәйле өлөшкә, әлбиттә, күп нәмә өҫтәр инем. Әле яңыраҡ Фәнистең дуҫы "Бабай" менән осраштым һәм дуҫ егеттәре менән аралашҡанда тупланған мәғлүмәт менән яңылары тап килде. Шулай ҙа очерҡҡа "Бабай"ҙың ҡайһы бер әйткәндәрен өҫтәрмен тимен.

**Хәҙер шундай фекер нығына бара: Бөйөк Ватан, Афғанстан, Чечня һуғыштарынан быныһы нык айырыла. Шул фекергә нисек ҡарайһың?**

- Рота командиры "Боцман" Чечня һуғышында булған. Ул махсус хәрби операция башҡа һуғыштарҙан нык айырыла, ти. Беренсенән, техника йәһәтенән, икенсенән, тәртип буйынса. Совет мәктәбен үткән офицерҙарҙың нык әҙерлекле булыуын таный рота командиры. Аҡыллы, тәжрибәле офицерҙар һалдатын да, үҙен дә һаҡлай, ти.

**Фәнистең тормошон өйрәнеү, китап яҙыу, махсус хәрби операция урынына барып ҡайтыу тормошҡа ҡараштарыңды, тормошоңдо үҙгәрттеме?**

- Минең был йәштә тормошҡа ҡарашым нығынған инде. Уны үҙгәртеүе бик еңел түгел. Әммә ундағы егеттәр минең яҡын туғандарыма әйләнде. Әле Илмир атлы Әбйәлил батыры "Шатай"ҙың һәләк булыуын ишеттем дә, түгелеп илап ебәрҙем. Ул үҙенең дуҫ егетен махсус хәрби операцияға ебәрмәҫ өсөн үҙе бара.

**Тимәк, дуҫы өсөн һәләк тә була. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, һуғыш гражданкалағы күп кенә хаталарҙы төҙәтә, тәрбиәнең дөрөҫ ҡуйылмауын иҫкәртә. Шулай түгелме?**

- Эйе, элек буранда аҙашып йөрөгән кеше юлында ниндәй йорт күрә, шунда ингән дә ятҡан. Хәҙер ҡоймалар бейегәйә, йоҙаҡтар күбәйә. Патриотлыҡ, бер-береңә өсөн үлергә әҙер булыу кеүек төшөнсәләр ҙә беҙгә яҡын ине...

**Ни өсөн беҙгә берҙәм, көслө, рухлы булыр өсөн фәҡәт һуғыш ҡына кәрәк?**

- Асылға ҡайтыр өсөн ҡайһы ваҡыт комфорт зонаһынан сыға белергә лә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙә лә шулай. Бында ла халҡыбыҙҙың асылы күренәләр инде.

**Махсус хәрби операция урынына барып ҡайтҡандан һуң ҙур күләмле әҙәби әҫәр, роман яҙырға теләгең юкмы?**

- Роман түгел. Роман өсөн персонаждар күп кәрәк буласаҡ һәм әҫәрҙән күп өлөшөн уйлап сығарған ваҡиғаларға ҡоролға тура киләсәк. Бында иң ҡулайы повесть йә сәхнә әҫәрҙәре.

**Әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Мөнир Сәхиулла улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ*

# ТЫЛДА ЙӘШӘҮСЕЛӘР...

## тыныслыҡтың ҡәҙерен белһен ине

**(Башы 5-се биттә).**

Осрашыуҙа, ғәҙәттә, шундай мөһим һорауҙы йыш бирәләр: ҡурҡытамы? Әлбиттә, бик ҡурҡыныс. Был һүҙҙе үҙҙәре шунда булмаған кешеләр тулы мәғәнәһендә аңлап та етмәйәсәк. Мин дә элек һуғыш тураһында телевизорҙан ҡарай торғайным, тик беренсе атыш булғанда уҡ барыһы менән дә уйымдан ғына хушлаштым, ә бит ул саҡта минең эргәлә пулялар осмаған, шартлауҙар булмаған...

Махсус хәрби операцияға тиклем мин Дүртөйләнөң "Алпан" балалар-йәштәр спорт мәктәбендә башта 7 йыл тренер, аҙаҡ 7 йыл директор булып эшләнем һәм был вазифанан арып, һуңғы йылдарҙа киренән тренерлыҡҡа күстем. Хәрби ҡушаматым "Алпан" да шунан алынған. Махсус хәрби операцияға барыуымдың сәбәбенә килгәндә, мин - хәрбиҙәр ғаиләһендә тыуғанмын: атайым һәм ҡустым майор. Ҡустым баштан уҡ үҙ бурысын үтәй, күрешә лә алдыҡ. Миңә август айында лейтенант званиеһы бирҙеләр, минең контракт МХО тамамланғанға тиклем дауам итәсәк.

**Аҡ барыҫ:** Мин үҙемде профессионал хәрби тип иҫәпләйем: 15 йыл армияла хеҙмәт иттем. Шуға махсус хәрби операцияға барыу тураһында ҡарар минең өсөн еңел бирелде, әммә ғаиләне көндәреүе ауырыраҡ булды. Сөнки армияла оҙаҡ йөрөгәс, һуң ғына өйләндем. "Шайморатов" полкы туплана башлағанда беренселәрҙән уҡ булып барҙым, әммә ул ваҡытта һаулыҡ яғынан сикләүҙәр бар ине, мине алманылар. Чечнялағы ике хәрби кампанияла ла ҡатнашып, шунда алған яралымдың эҙемтәләрен күҙ унында тоттолар. Шулай ҙа быйыл мине матди тәьминәт ротаһына тәғәйенләнеләр, ә үҙем элек огнеметчик булдым. Әлеге көндә яғыулыҡ-майлау материалдарын ташыусы автомобилдәр взводы командиры булып хеҙмәт итәм. Алғы һыҙыҡҡа бармайбыҙ, аҙна-ун көнгә кәрәкле яғыулыҡты урынына ташып торабыҙ.

**➔ Ошо арауыҡ эсендә һуғыш мәхшәрҙәрен дә күргәнһеҙҙер, йөрәктәрегеҙ туңманымы? Бигерәк тә йырсы йөрәге былар҄ҙы нисек кисерә?**

**Әсән:** Һамар өлкәһендә өс ай уҡыуҙарҙа булғанда психолог беҙҙең менән күп шөғөлләнде, ҡуҡтан ергә төшөрҙө, тип әйтәйемме. Бер ваҡыт бергә ризыҡланып ултырғанда хәлдәремде һорашып: "Һин унда ниҙәр күрәсәгеңде күҙ алдына килтерәһеңме?" - тигәйне. Ул саҡта мин хистәргә тулышып, "Барыһы ла яҡшы, бына шул турала уйланам, аңым аша үткәрергә тырышам", тип яуап биргәйнем. Мин барлыҡ мәғлүмәтте күҙҙәрем аша хәтерҙә ҡалдырам, музыкант булараҡ, бөтә уйналаһы әҫәрҙәр күҙ алдымда тора һәм бында ла күргән һәр нәмә шул тиклем йөрәккә уйылып ҡала. Шуға бында баш менән уйлау, барыһын да баш аша үткәрә алыу бик мөһим һәм дөрөҫ. Яугирҙарҙың ҡаты яраланып, ыңғырашыуҙарын ишетеү, уларҙың яраларын бәйләүҙәрен күреүе ауыр тәьҫир итә. Ашығыс ярҙам машинаһында һәр кемде тиҙ арала тәғәйен табип ҡулына ваҡытында алып барып тапшырырға тырышаһың. Ә юлдарҙың торошо ҡот осҡос насар, асфальт юлға сыҡҡансы машина саҡ ҡына һикереп китһә лә, яугирҙың ауыртыныуы ихтимал. Мин инде флейтамды һәр ваҡыт үҙем менән алып йөрөргә, кемгә һүҙ, кемгә моң менән дә ярҙам итеп ебәрергә тырышам. Беҙҙең полктың үҙ гимны бар: һүҙҙәрен замполит Митрофаныч, ә көйөн БР-ҙың атҡаҙанған артисы Олег Жданов яҙҙы, башҡарыусыһы - атҡаҙанған артист Александр Петров. Гимнды уҡыуҙар осоронда уҡ бергәләп ижад иткәйнек. Уның һүҙҙәре былай яңғырай:

*Время пройдет, мы пройдем через беды*
*Татарин, мариец, чуваш и башкир.*
*Русские братья, добъемся победы!*
*Долгожданный наступит наш мир!*
*Равняйся на наши знамена,*
*Батыров великих на них имена.*
*И мы пред ними клянемся,*
*Достойными быть на все времена!*

**Алпан:** Хәрби бәрелештәрҙә, шөкөр, әлегә тиклем бер яуҙашыбыҙҙы ла юғалтманыҡ. Күптән түгел мин дә контузия алдым, әммә ауыр яраланғандар арабыҙҙа юҡ. Шулай ҙа кеше яҙмышы төрлөсә була, һаҡһыҙлыҡ, вайымһыҙлыҡ арҡаһында бәләгә тарығандар бар. Мәҫәлән, сентябрь башында килгән мобилизацияланған яугирҙар араһында береһе ике дуҫын саҡырып, "ҡыңғырау" тип йөрөтөлгән кассеталы снарядты алып, уға отвертка тыҡҡан. Уның һәр нәмәнән рюмка оҫталау ғәҙәте бар ине, был осраҡта ла шул маҡсатты алға һөргәндер... Үҙ ғүмерең өсөн яуаплыһың унда, сөнки беҙ йөрөгән урындарҙа аҙым һайын мина, билдәле һуҡмаҡтарҙан ғына үтергә мөмкин. Һеҙҙең һорауға яуап биреп, шуны әйтер инем: тыныс тормош шарттарында бөтөнләй ҡабул ителмәгән күренештәр һуғышта күнегелгәнгә әүерелеп китә.

Беҙҙең штурмлаусы отрядҡа тәү сиратта эстән әҙер булғандарҙы һайлап алалар, унда физик көс, әҙерлек ҡайһы саҡта мөһим дә түгел. Штурмлаусы отрядтаһың икән, был - һин дошманға ҡаршы барырға тейеш, тигәнде аңлата. Ҡыйыулыҡ, геройлыҡ - ул ни тиклем ҡурҡыуыңды тик үҙең генә белеү. Бөтәһе лә ҡурҡа, шуға психологик яҡтан ныҡлы әҙерлек талап итеlә. Шәхсән мин һуғыш ысынбарлығын ике аҙна тирәһе ҡабул иттем, тип әйтәйемме. Тәү сиратта дошман ҡайҙа булыуын аңлап алырға кәрәк. Беҙҙе башта алғы һыҙыҡтан алыҫтараҡ ятҡан урынға алып килделәр, унда бөтә ерҙә атыш тауыштары яңғырап тороуына иҫебеҙ китте һәм үҙебеҙҙекеләр ҡайҙа икәнен, дошман ҡайһы яҡта булыуын аңлай алмай торҙоҡ. Ошо шарттарҙа ике аҙна тирәһе йәшәгәс кенә кем ҡайһы яҡта һуғышыуын, һин ҡайһы яҡта булырға тейешлекте, үҙүҙеңде ҡарарға өйрәнәһең. Ер аҫтында һәм яҡтылыҡһыҙ йәшәргә күнегергә кәрәк, төндә лә ут ҡабыҙмай йөрөйһөң.

**Әсән:** Атыштар тураһында һүҙ сыҡһа, күләмәскә әүерелгән, әммә һуғыштың барлыҡ фажиғәһен сағылдырған бер осраҡ хәтергә төшә. "Прилет" булһа, дошмандар беҙгә ҡаршы снаряд яуҙыралар, "отлет" булһа, беҙҙекеләр - уларға. Беҙ урынлашҡан тораҡ пунктта ике яугир урам буйлап китеп барған, эргәләрендә магазиндан бер ҡарсыҡ аҙыҡ-түлек күтәреп ҡайтып бара икән. Шул саҡ бик көслө шартлау яңғырай. Беҙҙе баштан уҡ шартлау ишеткәндә ергә ятырға өйрәтәләр, яугирҙар шундуҡ ҡолаған. Ә теге ҡарсыҡ шундай тыныс тауыш менән быларға: "Балалар, торогоҙ-торогоҙ, был "отлет", "отлет", - тип юлын дауам итеүен белгән.

Урындағы халыҡ шул тиклем шартлауҙарға күнегеп бөткән. Хатта балалар ҙа. Бына яңыраҡ ата-әсәһенә етәкләнгән ҡыҙ ҡапыл яңғыраған көслө шартлауға хатта тертләмәне лә, мәктәпкә китеп бара ине, буғай. Бына шулай. Тормош дауам итә.

**➔ "Тел" алғанығыҙ булдымы?**

**Алпан:** Беҙ - юҡ. Ә бына күршеләге хеҙмәттәштәр алғаны бар, уларға төрлө милләт вәкилдәре әсир төшә. Бер поляк һәм африканлы үҙ ирке менән килгән. Ҡаршы яҡтың ғәскәрендә ирекһеҙҙән һуғышып йөрөгәндәр ҙә бар: ҡайһы осраҡта шартлатҡысһыҙ снарядтар ташлайҙар, йәки ҡурәләтә ҡыйыш аталар - һуғышырға теләмәйбеҙ, тиҙәр. Беҙгә яҡын тораҡ пункттың ир-егеттәре шулар араһында булыуы ихтимал, беҙҙең артта уларҙың ҡәҙерлеләре.

**➔ Йәштәр бөгөн заманса, ҡайһы саҡта мәғәнәһеҙ йырҙар тыңлай. Ә бына махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы йәштәрҙең музыкаль зауығы ниндәйҙер үҙгәреш кисерәме?**

**Әсән:** Беҙҙең арала йәш, һөнәр, донъяға ҡарашы һәм башҡа йәһәттән ғәйәт айырылған, төрлө кешеләр бар. Шулай ҙа яугирҙар йыш ҡына патриотик йырҙар башҡарыуҙы һорай, ундай йырҙар беҙгә нык ярҙам итә. Баян моңон бик үҙ итәләр, мин, ҡыҙғаныҫҡа күрә, уйнай белмәйем. Егерме йәшлектәр ҙә бар, улар инде заманса йырҙарҙы күберәк тыңлайҙыр, моғайын. Шулай ҙа ҡолағына һәм башына зыян килтермәй, киреһенсә, күңелен күтәрә икән - тыңлаһындар, әйҙә. Барыбер йәш егеттәрҙең яйлап донъяға ҡарашы үҙгәрә бында, улар уйлана башлай, күңелдәрендә тыуған яғына, туған халҡына һәм уның йыр-моңона ҡарата бөтөнләй икенсе, йылы хистәр уяна. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыуым минең дә ижадыма йогонто яһамай ҡалмаҫ, концертымды бөтөнләй башҡаса күҙ алдыма килтерәм хәҙер, йырҙарым да үҙгәрер, тип уйлайым.

**➔ Тылдағыларға әйтер һүҙегеҙ ниндәй булыр?**

**Алпан:** Улар бәхетле кешеләр. "Баш осонда аяҙ күк йөҙө" тигән һүҙҙәр менән өсөн элек ниндәйҙер байрамда әйтелгән теләк кенә булһа, хәҙер бөтөнләй башҡаса яңғырай. Был, мин тыныс ҡына өйҙән сығып, эштәрем буйынса ян-яғыма ҡаранмайса, ҡайҙалыр барып килә алам, тигәнде аңлата. Украинала ҡалалар емерек, кешеләр атыш-шартлауҙарға күнегеп бөткән, яҡтылыҡты даими һүндереп торалар, сиккә яҡын ҡалаларҙа бәйләнеш юҡ, ә тормош дауам итә - баҡсаларҙа эш менән булышып йөрөйҙәр, мал аҫрайҙар. Ә бында барыһы ла шул тиклем яҡшы, иң мөһиме - балаларыбыҙ тыныс йәшәй.

**Аҡ барыҫ:** Бындай осраҡтарҙа ғүмереңде, ғаиләңде, туғандарыңды ҡәҙерләй башлайһың. Улар имен-һау булһын, ошондай көндәрҙе күрмәһендәр.

**Әсән:** Унда яраланған яугирҙарға ашығыс ярҙам күрһәткәндә башыма бер уй килде: тыныс тормошта шундай ваҡтөйәк нәмәгә зарланабыҙ, көйөнәбеҙ икән. Ә бит барыһы менән дә ҡәнәғәт булырға, шатланып йәшәргә генә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Яугирҙарҙы хәстәрләп, республикабыҙ етәкселеге һәм халҡы күрһәткән ярҙам барып етәме, барлыҡ кәрәк-яраҡтар ҙа бармы икәнен белешкәс, барыһы ла бер уҡ яуап ҡайтарҙы: "Өҫтөбөҙгә, аяғыбыҙға, ашарыбыҙға бар". Беҙҙең баш осонда аяҙ күк булһын тип үҙ ғүмерҙәрен аямаған барлыҡ яугирҙарыбыҙға сикһеҙ рәхмәттәр белдерәбеҙ һәм тыуған яҡҡа имен-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләйбеҙ!**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

**Рус яҙыусыһы Филипп Диомидович Нефедов 1838 йылда Иванов-Вознесенск ҡалаһында крепостнойҙар ғаиләһендә донъяға килә. Тыуған ауылында училище тамамлай, шул йылдарҙа уҡ проза менән ҡыҙыҡһына башлай. Ф. Д. Нефедов артабанғы уҡыуын Мәскәү университетының тарих-филология факультетында дауам итә. Мәскәүҙең алдынғы баҫмаларында уның рус крәҫтиәндәренең ауыр тормошон һүрәтләгән "Безоброчный", "Крестьянское горе", "Иван-воин" һәм башҡа әҫәрҙәре нәшер ителә. Ул байтаҡ йылдар "Русский курьер" гәзитендә эшләй, әҙәбиәт һәм публицистика менән шөғөлләнә, либераль ҡараштары арҡаһында эҙәрлекләүҙәргә лә дусар була. Яҙыусы шулай уҡ этнография, археология һәм антропология менән ныҡлап мауыға, Рәсәй буйлап оҙайлы сәйәхәт ҡыла. Башҡортостан ерҙәрендә йөрөгәндә ул башҡорттарҙан бик күп легендалар, йырҙар һәм әкиәттәр яҙып ала. Тәү сиратта яҙыусының иғтибарын, әлбиттә, Салауат батыр образы йәлеп итә. Башҡорт халҡының милли батырына һәм Крәҫтиәндәр һуғышына арналған "Движение среди башкир перед Пугачевским бунтом; Салават, башкирский батыр" тигән ғилми хеҙмәт яҙа. Әҙәби әҫәрҙәре лә байтаҡ уның. Ф. Д. Нефедов үҙе йәшәгән замандағы башҡорт йәмғиәтенең ҡатмарлы тормошо тураһында бәйән иткән "В горах и степях Башкирии", "На восточной окраине" тип исемләнгән хикәйәләр циклдары менән бер рәттән, иҫ китмәле ҡатын-ҡыҙ образдары тыуҙырған "Зигда", "Ушкуль" тигән хикәйәттәр ҙә ижад итә. Был әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән көслө, ҡыйыу ҡатын-ҡыҙҙар, әлбиттә, һоҡланыу уята. Шулай итеп, Ф. Д. Нефедовтың башҡорт халыҡ легендаһына таянып ижад ителгән "Зигда", йәки башҡортса "Заһиҙә" хикәйәтенең тәржемәһен тәҡдим итәбеҙ.**




Шаян, теремек һәм ҡыйыу ине Заһиҙә. Бына иртә менән, тирә-яҡты яңғыратып, сылтырап көлгән тауыш ишетелә.

- Заһиҙә эшкә тотонған, - ти йәйләүҙәге халыҡ.

Киң далала, ҡороғон әҙер тотоп, ярһыу арғымаҡта йәш ҡатын елә...

- Заһиҙә өйөрөн ҡыуа, - ти башҡорттар, - йылҡыларының береһен ҡороҡларға ниәте.

Иртә яҙҙан башлап кистәрен йәйләүҙә ҡурай моңо ағыла, наҙлы ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелә.

- Заһиҙә ҡурай тарта, - тиҙәр, - бигерәк дәртле уйнай, ай-һай...

Аҡ тулҡынлы йылға үҙәнендә, тирмә янында, алһыу төҫтәге елән кейгән йәш ҡатын баҫып тора, башында мәрйенләп сигелгән зәңгәр ҡалпаҡ; алтын көмөш тәңкәләр тағылған ҡуйы ҡара толомдары тубығына еткән; ҡояш алһыулатҡан йөҙө йылмая, ҡуйы ҡаштары аҫтынан һирпеп кенә ҡуңыр күҙҙәр ҡарай. Ул йырлай ҙа, ҡурайҙа ла уйнап ебәрә. Йәш-елкенсәк Заһиҙәне уратып алған, үләнгә ҡарттар ултырышҡан, тирмәләренән алыҫ китмәйенсә, ҡатын-ҡыҙ ҙа йыр тыңлай.

*Тау баштарында ҡарағай,*
*Туғайҙарҙа бөҙрә тал.*
*Йәш саҡтарҙың ҡәҙерен*
*белеп,*
*Бер түйғансы бейеп ҡал.*
*Ай, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары ла,*
*Кемдә генә уйҙары.*
*Кемдә генә уйҙары ла,*
*Зифа икән буйҙары.*

- Ҡара әле, нимәгә өйрәтә ҡыҙҙарҙы, - ҡарттар үҙ-ара сөкөрләшә. - Дөрөҫөн әйтә бит, йәш саҡта күңел асмаһалар, тормош ҡорғас, ҡайҙа ул - бер-бер артлы балалар китә, кәйеф-сафа ҡайғыһы ҡалмай...

*Йәш ҡыҙҙарҙың бейегәнен*
*Ирҙәр ҡарап торалар,*
*Һоҡланыуҙарын йәшермәй,*
*Былай таҡмаҡ әйтәләр:*
*"Зифа буйлы, нәҙекәй билле*
*Ҡыҙҙар ҡайҙа китәләр,*
*Яман күҙле, уҫал телле*
*Бисәләр ҡайҙан киләләр?"*

Кемдер, түҙмәй, көлөп ебәрә.

- Ай, әсе тел, ҡалай төрттөрә бит әле ирҙәргә.

*Бүҙәнәнең балаһы ла*
*Тәшкән икән тоҙаҡҡа.*
*Тоҙағыңды ҡыҙҙарға ҡор,*
*Һуҙма, егет, оҙаҡҡа, һай,*
*Һуҙма, егет, оҙаҡҡа.*

- Үҙенә берәйһен табып бирергә кәрәк, - тип көләшә халыҡ. - Ултырмаһын әле яңғыҙ.

* * *

Заһиҙәгә ун туғыҙ йәш. Бына өс йыл инде кейәүгә сыҡҡанына, тик ире менән бер йыл ғына йәшәп ҡалды: Арыҫланы Бохараға бер өйөр йылҡы менән бер көтөү һарыҡ ҡыуып алып киткәйне, шунан бирле өнө-тыны юҡ. Бергә киткән дуҫтары әйләнеп ҡайтты, ә ул, исмаһам, бер хат-хәбәр ҙә ебәрмәй Заһиҙәгә.

- Үәт ахмаҡ, - тип аптырай халыҡ, - унда ни эшләп йөрөй икән? Ҡатынын ташлап...

- Йүнһеҙ, - тип ризалаша башҡалары. - Заһиҙәләй бисәне лә һанға һуҡмағас! Бәлә-ҡаза күрмәй генә йәшә лә ят унын һымаҡ ҡатын менән!

- Иҫәнме икән һуң? Нуғайҡаҙаҡ йәнен ҡыймаһымы икән? Әллә Бохарала мал ҡыуып тик йөрөймө?

Заһиҙәне яусылата ла башланылар.

- Ҡайтмаҫ инде Арыҫланың, - тиҙәр. - Юлда ятып ҡалғандыр ул. Көтмә уны. Арабыҙҙан беребеҙҙе һайлап ал да ҡуй.

- Мин янғыҙ түгел бит, - тип шаян яуап ҡайтара Заһиҙә. - Минең ирем бар.

- Кем һуң ул?

- Арыҫлан.

- Ул Бохарала ла инде! Иҫән булһа, ҡоллоҡталыр. Кем белә, бәлки, өйләнеп тә ҡуйғандыр.

- Юҡ, Арыҫлан башҡаны ҡатынлыҡҡа алмаясаҡ, мин дә башҡаны һөймәм, бына ҡайҙа ул Арыҫлан, - тип Заһиҙә йөрәгенә ҡурһәтә.

Береһенең дә Заһиҙәнең моңайғанын күргәне, көрһөнөүен ишеткәне юҡ: көлә, йырлай, эшен дә эшләй һәм гелән генә күңеле күтәренке.

- Ҡыҙыҡ бисә, - тиҙәр ауылда. - Ире юғалған, ә ул ҡайғырмай ҙа кеүек! Башҡаға ла күҙ атмай...

Бары тик тау-ҡаялар ғына белә Заһиҙәнең зарын:

*Уралтауҙың бейек*
*түбәһендә*
*Үҫәләр ҙә шул янғыҙ ҡарағас.*
*Вәғәҙәләр биреп, ниңә алдың,*
*Бергә ғүмер итер булмағас.*

Әммә тауҙар тыңлайҙар ҙа, өндәшмәй ҡалалар. Заһиҙә йырын тау шишмәләренә бағышлай:

*Ҡая араһынан атылып сыға*
*Шишмә лә генә түгел,*
*ағын һыу,*
*Төштәремә инеп*
*үртәмә, йәнем,*
*Күңелдәрем бигерәк*
*болоҡһоу.*

Тау йылғаларының ярһыу тулҡындары гөрһөлдәп көлгәндәй була...

* * *

Өсөнсө йәҙҙы ҡаршылай инде Заһиҙә ирһеҙ: йылғалар ҙа, тауҙар ҙа сәләмдәрен алып барып еткермәгәндәрҙер инде Арыҫланына.

Ауыл тағы йәйләүгә сыҡты.

Урмандарҙы, яландарҙы тотош бер балҡыш солғап алғандай булды, ҡар аҫтынан яңы ҡалҡып сыҡҡан сәскәләр йылмая, йылға-күлдәр ҡояш нурҙарында сағыла. Бейектә тау баштары ҙа кейеменә төрөнә. Үҙәндәрҙә, ағарып, тирмәләр күренә, ҡайҙа ҡарама - йөҙҙәр яҡтырған, тауыштар көр. Алыҫтараҡ көтөү, йылҡы өйөрҙәре... Уйна ла көл!

Заһиҙә кейәү егеттәрҙән ҡайҙа ҡасырға белмәй.

- Көтмә шул Арыҫланыңды, - ти йәш кенә егет, - оноҡҡан ул һине.

- Арыҫландың күптән юҡ инде, - ти икенсеһе, - булмаған кешене нисек көтәһең?

- Ышанма уларға, Заһиҙә,- ти ебәк бишмәт, ҡама бүрек кейгән олпат ир. - Тере ул. Күршеләрем Бохарала күреп ҡалған уны ике ҡатыны, балалары менән баҙарҙа. Йәштәргә ҡарама, Заһиҙә - йәш кешеләргә ышаныс юҡ. Ирҙә өлкәнерәк быуындан һайла: ундай ир ҡатынын ташлап сығып китмәҫ, ҡәҙерләп-иркәләп кенә йәшәр.

Заһиҙә уларҙы тыңлай-тыңлай ҙа, көлә.

- Әллә ысынлап та кейәү табайыммы икән? - ти ул. - Ҡабаланмағыҙ, уйларға форсат бирегеҙ. Унан ир һайлармын.

- Шәп итәһең! - кейәү егеттәр ҡыуанып китә. - Беҙ көтөрбөҙ. Тик оҙаҡҡа һуҙма инде.

Заһиҙә тирмәһенә инеп, уйға тала. Йөҙөндә, күҙҙәрендә һағыш. Йәш ҡатындың тол булып ултырыуы һәйбәт түгел: көтөүең кем көтәр ҙә, аттары юғалһа, кем эҙләр? Уныһы ярай ҙа ул: Заһиҙә, тырышһа, эшен алып барып сығыр. Төндәрен ирһеҙ ҡалған йәш ҡатындарҙың ҡотон алып, ҡолаҡтарына ниҙер шыбырҙап йөрөгән шайтандан да ҡурҡмай ул, тик яңғыҙы йәшәгәне килмәй Заһиҙәнең. Ул үҙенә ир табасаҡ.

Бисә-сәсәләрҙән кеме генә Заһиҙәнең тирмәһенә инмәһен, ирҙәр күлдәге тегеп ултырыуын күреп, ҡыуанып китә.

- Туй бүләктәре әҙерләй, - тип шым ғына һөйләшеп алалар, - кейәү һайлаған, тигән һүҙҙәр дөрөҫ икән.

Йәйләүҙә йөрөгән бар хәбәр - Заһиҙә тураһында.

- Кемде һайлаған икән?

Бер көн үтеп китә, икенсеһе, Заһиҙә күренмәй. Ҡолондары бәйҙән ысҡындырылған, бейәләр менән бергә дала ҡыҙыралар, ә донъяһын бер ҡарсыҡ көтә.

- Ҡыҙың ҡайҙа?

- Ҡунаҡҡа киткәйне.

Бер аҙна үтә, икенсеһе - һаман юҡ Заһиҙә. Кейәү егеттәрҙең береһе, оло ғына тол ир, Заһиҙә киткән ауылға юл ала. Барһа, Заһиҙә килмәне ул беҙгә, тиҙәр. Аптырашалар былар. Башҡа ауылдарға сапҡын ебәрәләр - береһе лә күрмәгән, береһе лә бер ни белмәй.

- Ауылыбыҙҙан бер малай үтеп киткәйне, ә бисәләр күренмәне.

Юғалды Заһиҙә.

- Шайтан алып ҡасҡандыр инде, - тигән һығымтаға килә ауыл.

* * *

Тауҙар ҙа күптән артта ҡалды, башҡорт йәйләүҙәре лә күҙҙән юғалды. Тирәяҡ - тотош дала, ҡайһы берҙә генә йылғалар осрап ҡуя. Юл буйлап еңел сәкмән, һарыҡ тиреһенән башлыҡ кейгән йәш кенә башҡорт егете китеп бара. Ауырыһына һалған таяҡҡа бәйләм, төйөнсөк аҫҡан. Ҡояш ҡыҙҙыра, далала бер йән әйәһе лә күҙгә салынмай. Бына, алыҫ түгел, йәшел ҡыуаҡтар күренде, япраҡтар араһынан ялтырап йылға күренде. Егет юлдан ситкә боролоп, яр буйына килде, башлығын сисеп, төйөнсөгөн һүтеп, тамаҡ ялғап алды. Йылғанан һыу һоҫоп, һыуһынын ҡандырҙы. Үҙе килгән яҡҡа күҙ һалды: алыҫта, алһыуланып торған болоттарға оҡшап, тауҙар күренә әле. Оҙаҡ ҡарап ултырҙы егет шул яҡҡа, күҙҙәрендә ике бөртөк йәш күренде. Ҡуйынынан ҡурайын килтереп сығарҙы. Йылға һәм дала талғын ғына моң эсендә иҙрәне.

*Тыуған ғына яҡтан*
*сығып киттем,*
*Ғәзиз Уралымды ҡалдырып.*
*Йәнем һөйгән йәрҙе*

***✓ Заһиҙә ҡуңыр күҙҙәрен башҡортҡа төбәне. "Эй, ахмаҡ! Ҡара!" - тигән һүҙҙәр менән Заһиҙә башындағы бүркен систе, уның ҡуйы сәстәре тулҡын-тулҡын булып яуырынына төштө...***



*эҙләп киттем,*
*Аяҡ-ҡулдарымды талдырып.*

Йыраусы, сәстәрен йыйып, башлығын кейҙе лә, төйөнсөгөн артмаҡлап, юлын дауам итте.

Ҡояш инде кискә табан ауыша. Егет артына әйләнеп ҡарай. Инде тауҙар ҙа күренмәй, ҡайҙа ҡарама - икһеҙ-сикһеҙ ҡылғанлы дала. Алыҫта ниҙер күренде...

Ҡараһа - диңгеҙ! Туҡтап ҡалды башҡорт. Ҡайҙа барырға? Берәй нисек ситләп үтеп булмаймы икән? Юҡ, бөтә ерҙә - һыу.

- Барып етәйем әле, - тип уйлай ул, - бәлки, кәмә табылыр.

Оҙаҡ барҙы егет, тик, күпме генә бармаһын, диңгеҙ тигәне алыҫайҙы ла алыҫайҙы, торабирә бөтөнләй юҡҡа сыҡты. Егет көтөүсе башҡорттарҙың һөйләгәндәрен иҫенә төшөрҙө. Уларҙың да юлда диңгеҙ осратҡандары булған, тик был хикмәттең бары тик шайтандың шаярыуы икәнен улар яҡшы белгән. Кискә табан тирмәләр күренде - нуғайҙарҙың йәйләүе икән. Шундуҡ егеттең ҡаршыһына һыбайлылар килеп сыҡты. Егетте уратып алдылар.

- Ҡайҙарға юл тотаһың? - тип һораны бер ҡарт.

- Бохараға китеп барам, - тине егет, - ағайым унда йәшәй.

- Ни йомош менән?

- Атайым ебәрҙе. Ағайымды алып ҡайтырға ҡушты.

Нуғайҙар үҙ-ара ниҙер һөйләштеләр ҙә егеткә баштан аяҡ күҙ ташланылар.

- Төйөнсөгөндә нимә?

Күлдәк, салбар, таҫтамал һәм икмәк.

- Атла, - тине ҡарт. - Байғош!

Тик шул саҡ бер йәш нуғай егетте туҡтатты ла:

- Ҡуйыныңда ни йәшерәһең, - тип һораны.

Егет ҡурайын килтереп сығарҙы.

- Ә, һыҙғыртҡыс! Уйна әле!

Башҡорт уйнап ебәрҙе.

- Яҡшы. Әйҙә әле беҙҙең менән!

Егет уйнай-уйнай барҙы, ә нуғайҙар уның тирәләй юрттырып килде. Ҡурай тауышын ишетеп, урамға балалар йүгереп сыҡты, тирмәләрҙән баштарына аҡ яулыҡ япҡан ҡатындар күренде, түңәрәк йөҙлө, өҫтәренә халат кейгән ирҙәр килеп сыҡты. Һыбайлылар һөрән һала:

- Бына кемде алып киләбеҙ!

Халыҡ йыйылып китте, бөтәһенең дә башҡорттоң уйнағанын тыңлағыһы килә. Бай итеп биҙәлгән иң ҙур тирмә эргәһендә балаҫ өҫтөндә хужа кеше ултыра, кәүҙәгә ҙур, үҙе биҙәкле ебәк бишмәт кейгән. Туҫтаҡҡа ҡымыҙ тултырып, егеткә һуҙа.

- Эс, - ти ул, - арығанһыңдыр.

Йөҙәрләгән күҙҙәр, мөғжизәләй күреп, егеткә төбәлгән. Ҡатын-ҡыҙ ситтәрәк тора, күбеһе матур егеткә ҡарап, ниҙер һөйләшә һәм йылмайып ҡуя.

- Бына хәҙер уйна, малай!

Ҡурайсы уйнап ебәрҙе. Тыуған яғы, Башҡортостандың хозур тәбиғәте, башҡорттарҙың тыныс тормошо тураһында ине көй. Унан ҡурай тауыштары һағышлы яңғырай башланы, ҡайғы-хәсрәт ишетелде ҡурай моңонда. Нуғайҙарҙың ҡырыҫ йөҙҙәре нурланды, ҡараштары моңланды. Ҡатындар иләп кенә көрһөнөп ҡуйҙы, ҡыҙҙарҙың күҙҙәренә йәш килде.

- Яҡшы, бик яҡшы, - тигән тауыштар ишетелде.

Ҡурайсы тын алырға туҡтағайны, тирмәнең хужаһы:

- Бигерәк шәп уйнайһың, малай. Тик йырҙарың үтә һағышлы. Күңеллерәк көйөң юҡмы? - тип һораны.

Егет бейеү көйө башланы. Нуғайҙарға оҡшаны был, ҡул саба башланылар.

- Ай, малай! Шәп егет! Әйҙә уйна, күңелдәрҙе елкендер!

Ҙур утлы шар булып, ҡояш байый... Йәйләү ҙә, өйөрҙәр ҙә, дала - барыһы ла ҡояш нурҙарына төрөндө, бар күк йөҙө ут кеүек яна. Ҡурайсы урынынан торҙо.

- Ҡуҙғалырға ваҡыт.

- Тыңла әле, егет, - тине хужа, - ошо юл буйлап барһаң, бер ауыл булыр. Туҡтатһалар, Әхмәт Шакирҙы күрергә ине, тиң. Уға Мәхмүт Гәрәй Тимашевтан сәләм еткерерһең, ҡунағына киләһе ауылға тиклем юл күрһәтеп биреүен һорай, тиерһең. Ул аңлар... Һине береһе лә йәберһетмәҫ, Бохараға имен-аман барып етерһең.

* * *

Йәйге ҡояш түҙҙермәй ҡыҙҙыра бирҙе, баратора дала ла бөтөнләй йәнһеҙләнде: бер ағас та осрамай, бер ҡыуаҡ та күренмәй, ҡайҙа ҡарама - кибеп бөткән үлән менән ҡапланған тоҙло күлдәр, тик ҡайһы берҙә генә бәләкәй йылғалар осрап ҡуя. Яҡын-тирәлә кеше-маҙар күренмәһә, егет һыу инеп ала. Көндөҙ йоҡлай, кискә табан, эҫе бер аҙ баҫылғас, юлын дауам итә: ауылдарҙа ҡунғыһы килмәй уның. Кистәрен, берәй ауылға яҡынлашһа, ҡурай тарта башлай. Уны ҡыуанып ҡаршы алалар, уйнаталар, йырлаталар, унан ултыртып ашаталар, ҡымыҙ йә айран эсерәләр. Ҡайһы саҡ юлда туҡтатһалар, старшина йәки башлыҡтың исемен әйтә лә, артабан юлында була. Мәхмүт Гәрәйгә рәхмәт инде!

Шулай итеп, ҡурайсы нуғай далаһын үтеп тә китте, һуңғы йәйләүҙең башлығы уны үҙенең дуҫына, ҡырғыҙ ауылы башлығына ебәрҙе. Был ауылда егет саҡ бәләгә тарыманы. Һеләүһен бүрке кейгән бәһлеүән бер ҡырғыҙ ҡурайсыға оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы, уның ҡыҫыҡ күҙҙәрендә ниндәйҙер осҡондар уйнап китте. Яман билдә! Ул ҡысҡырып көлөп ебәрҙе лә:

- Һин бит егет кеше түгел, - тине.

Ҡурайсы оялып китте.

- Юҡ, мин - егет.

- Ниңә һуң толомондо кәпәс аҫтына йәшерәһең?

- Башҡортостанда бар малайҙар шулай йөрөй...

Старшинаның ҡатыны, башҡорттан күҙҙәрен алмай, иренә ниҙер шыбырланы.

Тегенеһе һорауҙар яуҙырған ҡырғыҙға әйләнеп:

- Теленде тый! - тине. - Был малай - минең ҡунағым, ул миңә Сәйфулла Янбаевтан сәләм алып килгән. Һин беҙҙә ҡунырһың, - тип малайға өндәште.

Ҡырғыҙ тымды, әммә күҙҙәре тағы ла ҡыҫығыраҡ булып китте.

Бер аҙҙан старшина ҡунағын үҙҙәренә алып ҡайтты. Инеүҙәре булды, старшинаның ҡатыны:

- Һин ниңә егет булып кейендең? - тип һораны.

Ҡунаҡ кеше шундуҡ барыһын һөйләп бирҙе.

- Эй, бахырҡай, - тип, ҡырғыҙ ҡатыны уны йәлләп ҡуйҙы.

- Һин ҡурҡма, - тине хужа, - бисәмдең ишаралауы булды, мин һине үҙебеҙгә саҡырырға ашыҡтым. Абдулла - алама кеше, һине ҡыуып етер ине ул. Ял итеп ал, таң еткәс, ҡуҙғалырһың.

Хужа кеше Заһиҙәгә сәстәрен киҫергә тәҡдим итте, ләкин Заһиҙәнең оҙон толомдары менән хушлашҡыһы килмәне. Хужабикә үҙе уның сәстәрен йыуып, һөйәктән яһалған тараҡ менән матурлап тараны ла, элеккесә итеп йыйып ҡуйҙы.

Таң яңы саҡ һыҙылып килә, ә Заһиҙә, хужалар менән хушлашып, юлға ла сыҡҡан.

Түҙгеһеҙ эҫе, яндырып алып барған ҡом буйлап атланы Заһиҙә, тәүлектәр буйы кеше торлағы ла, эҫәр һыу ҙа күренмәне, ә ҡайһы саҡ, кireһенсә, ҡойма ямғырға тарыны.

Бер айҙан артыҡ барҙы ул, ниҙәр генә кисермәне үҙ юлында. Аллаларҙан ярҙам һораны, үҙен ҡурай моңо менән йыуатты. Ниһайәт, зарлы дала ла артта ҡалды, алда оло йылға күренде, ярҙарында үҫкән ҡамыштарының шаулауы ишетелде. Заһиҙә еңел тын алды - хәҙер инде Бохараға тиклем дә күп ҡалманы! Үҙенең ҡыуанысын ул ҡурайының моңонда сағылдырҙы. Ҡоштар уны тын ҡалып тыңланы, хатта йылғалағы балыҡтар ҙа, йөҙөүенән туҡтап, хайран ҡалды. Ҡамыш араһынан ниндәйҙер бесәйгә оҡшаған бер йән эйәһенең башы күренде, ул да, ергә ятып, көй тыңланы. Шул саҡ юлда тауыштар ишетелде. Заһиҙә алдында нуғайҙарға ла, ҡырғыҙҙарға ла оҡшамаған яңы кешеләр пәйҙә булды: улар үзбәктәр булып сыҡты. Заһиҙә, урынынан тороп, улар эргәһенә ашыҡты. Тегеләр туҡтап ҡалды. Заһиҙә һорауҙарын үзбәктәргә төбәне: Бохараға тиклем ни самаһы юл ҡалды, дөрөҫ барамы? Үзбәктәр тәүҙә өндәшмәйерәк торҙо - башҡорт телен аңламай улар. Ниһайәт, берәүһе төшөндө, шикелле, юл күрһәтте. Икенсеһе, тоҡсайының ауыҙын асып, икмәк, ҡауын, йөҙөм килтереп сығарҙы, Заһиҙәгә һонто.

Ғәжәп ерҙәр асылды Заһиҙәгә. Ап-аҡ өйҙәр теҙелгән, баҡсаларға күмелгән ауылдар күренә башланы, ә ауылда - алсаҡ йөҙлө ҡатындар, бейек кәүҙәле, ҡара һаҡаллы ирҙәр, һомғол буйлы егеттәр.

* * *

Бохара ифрат ҙур ҡала. Байтаҡ ерҙәр гиҙҙе Заһиҙә, әллә күпме ҡалала булды, бихисап кешеләр осратты, улар араһында башҡорттар ҙа бар ине, бөтәһенән дә Арыҫланы тураһында һорашты. Арыҫлан Рамзаев тигән кешене береһенең дә күргәне булмаған. Бер аҙҙан Бохарала йәш ҡурайсыны таный ҙа башланылар. Ауыл, ҡала баҙарҙарында сәкмән-салбар кейгән Заһиҙәнең килеп сығыуы була, тирә-яғына шундуҡ халыҡ йыйыла, уның йыр-моңон тыңлайҙар.

*Бохарала үҫкән*
*ҡарбуздарҙың,*
*Һуты ла ғына бар ҙа,*
*тәме юҡ.*
*Арыҫланһыҙ үткән*
*көндәремдең*
*Төҫө лә генә бар ҙа, йәме юҡ.*
*Сит илдәрҙә йөрөп,*
*ил ҡыҙырып,*
*Ситеккәйҙәремде*
*бөттөм туҙҙырып.*
*Уралыма ҡайтып,*
*ташҡа баҫып,*
*Булырмы икән ҡурай*
*һыҙҙырып?*

Бохарала көн иткән халыҡтың, сит илдәрҙән килгән юлсыларҙың, ҡурайсы йырлаған йырҙарҙы аңламаһалар ҙа, тауышына иҫтәре китә. Тик башҡорттар ғына яҡташының йырын аңлай, көрһөнөп ҡуя:

- Дөрөҫөн генә йырлай ҙа ҡуя шул малай. Башҡортостандан да шәберәк ер юҡ шул! - тиҙәр.

- Ниндәй генә йыр йырламаһын, Арыҫлан тигән исем ҡуша ла йырлай.

Ҡалаларҙың береһендә, Заһиҙәнең йырын ишетеп, башҡорттар үҙ-ара һөйләшә башланы:

- Мырҙаның баҡсаһында эшләп йөрөгән Арыҫлан тураһында йырламаймы икән?

- Шулайҙыр шул: исеме Рамзаев Арыҫлан бит...

Ҡурайсынан һораша башланылар: ҡайһы ырыу кешеһе ул Арыҫлан, ниндәй ауылдан, ҡасаныраҡ иленән сығып киткән?

- Беләбеҙ уны! - тине башҡорттарҙың береһе. - Һин уны Бохара ҡалаһының үҙәгендә табырһың: Алабаев мырҙала өс кеше эшләйҙәр улар.

- Нисек эҙләп табайым икән уны? - Заһиҙә ҡыуанып китте.

- Баҙарға бар ҙа, үҙебеҙҙекеләрҙең береһен табып, Алабаев мырҙаның баҡсаларын һора. Арыҫландың үҙен дә осратырһың әле баҙарҙа.

Бигерәк ҙур шул Бохара, уны бөтә яҡындағы илдәрҙең-ерҙәрҙең, барса халыҡтың хужаһы - хан үҙенең өйө итеп һайлаған. Күп-күп таш өйҙәр, алтын айҙар менән биҙәлгән манаралар, тар, кәкрәйеп һуҙылған урамдар, ебәк туҡымалар тулып ятҡан баҙарҙар, таутау булып өйөлгән ҡарбуз-ҡауындар - барыһын да күрҙе Заһиҙә. Баҙарҙа халыҡтың төрлөһө бар - байы ла, ярлыһы ла, ялан аяҡлы ҡолдар ҙа тулып йөрөй. Заһиҙәнең күңеле тулып китте, йөрәге әрнеп, йыр һуҙҙы:

*Бохара ла тигән ай, ҡаланың*
*Урамдары бигерәк*
*тар икән, һай.*
*Байлығының даны*
*таралһа ла,*
*Тормош тигәндәре зар икән.*
*Иртә менән тороп,*
*тышҡа сыҡтым*
*Таңғы һауаларҙы*
*һулайым тип, һай.*
*Сит илдәргә*
*йәйәү сығып киттем,*
*Арыҫлан атлы*
*ирҙе табайым, тип.*

Бер көн йырлай Заһиҙә, икенсе көн, тик Арыҫланы күренмәй халыҡ араһында. Заһиҙәнең йөрәге иренә ынтыла, тиҙерәк күргеһе килә уны. Тик Алабаев мырҙаның баҡсаларына бармай ул, Арыҫландың баҙарға килеп, таныш тауыш, ҡурай моңон ишетеп, ҡатынын таныуын көтә. Өсөнсө көн уйнай инде Заһиҙә баҙарҙа. Көтөүҙәре менән алыҫ яҡтарға сығып киткән, өҙөлөп көткән кәләшен, тыуған илен оноткан башҡорт тураһында йырлай ул.

*Һауаларҙа осҡан, ай, ағуна*
*Ҡанаттары талһа, ҡағына.*
*Сит илдәргә*
*киткән йәргенәһен*
*Йәш кәләше зарығып һағына.*

- Заһиҙә уйнай бит! - тигән тауыш ишетелде, һәм халыҡ араһынан ҡара мыйыҡлы, бейек йәш башҡорт килеп сыҡты. - Әй, юҡ, ниндәйҙер малай, беҙҙекеләрҙән былай. Кем һин, ҡустым, ҡайһы ырыуҙан?

Заһиҙә ҡуңыр күҙҙәрен башҡортҡа төбәне.

- Эй, ахмаҡ! - тине ул. - Тауышын ишетеү етмәй уға, һорап тора тағы. Ҡара! - тигән һүҙҙәр менән Заһиҙә башындағы бүркен систе, уның ҡуйы сәстәре тулҡын-тулҡын булып яуырынына төштө...

- Заһиҙә! - башҡорт ҡысҡырып уҡ ебәрҙе .

- Мин булмай, кем булһын!

Йәш ҡатындың күҙҙәренән йәш атылды.

Аптырашта ҡалған халыҡтың күңеле күтәрелде, тауыштар ишетелде:

- Үәт ҡурайсы! Ай, малай! Егет булмай, ҡыҙ булып сыҡты!

* * *

Көҙ еткәс, ике дөйәгә ебәк туҡымалар тейәп, Заһиҙә менән Арыҫлан да ҡайтып төштө. Бар ауыл халҡы ҡаршыларына йүгереп сыҡты, бөтәһе лә уларҙың ҡулдарын ҡыҫып, ҡыуаныстарын белдерҙе:

- Икегеҙ ҙә ҡайтҡанһығыҙ икән! Бына бит шатлыҡ! Ай, Заһиҙә! Ирен тапҡан бит.

- Төп башына ултырттың беҙҙе, - тип көлөштө кейәү егеттәр, - ә беҙ, йүләрҙәр, көткән булабыҙ...

- Мин һеҙҙе алдаманым, - тип яуаплай Заһиҙә, - үҙемә ир таптым бит.

Бер аҙна буйы ауыл Заһиҙә менән Арыҫландың яңы туйын байрам итте. Йәштәр байрам хөрмәтенә бер ни йәлләмәне - һарыҡ, тана ите, ҡымыҙ, бал! Ә Заһиҙәнең ҡыҙҙарға тараткан бүләктәре! Арыҫлан Бохарала ваҡытын бушҡа әрәм итмәгән шул - тыуған яҡтарына байтаҡ байлыҡ алып ҡайтты.

Башҡорттар һаман да Заһиҙәнең ҡыйыулығын онотмай: ҡурайсылар әлегәсә уның йырға маһирлығына, һөйөүенә һәм тоғролоғона дан йырлай.

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА тәржемәһе.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БЕСӘЙЕҢ БУЛҺА...

■ Вересаев исемендәге Мәскәү клиник дауаханаһының неврология бүлеге мөдире, невролог Джавгарат Муртазалиева инсульт "йәшәрә" тип белдерә. Элек кенә инсульт ул оло йәштәгеләр ауырыуы тигән ҡараш йәшәй ине. "50-60 йәштәгеләр инсульт кисерһә, аптырай инек, был ауырыу бынан олораҡтарҙа йыш осрай ине. Хәҙер иһә тап 50-60 йәшлек пациенттар күп. Хатта 40, 30 йәшлектәре лә бар", - ти табип һәм сәләмәтлекте йәштән ҡайғыртырға саҡыра. Инсульт нәҫел сире түгел, әммә уға килтергән сәбәптәрҙең тап гендар буйынса тапшырылыуы ихтимал. Мәҫәлән, шәкәр диабеты, холестерин кимәле күтәрелеүе, гипертония, йөрәк тибеше боҙолоуы шулар рәтенән. Шулай уҡ ҡан тиҙ ойошоуы, веналар тромбозы, тромбоэмболия ла инсультҡа килтерә ала. Ҡапыл ныҡ итеп баш ауыртыуы ла инсульт билдәһе, әммә ул инсульттың бер - геморрагик төрөндә генә була. Башығыҙға һуҡҡан кеүек икән, был ҡан тамыры шартлауы һәм баш мейеһенә ҡан һауыуы тураһында һөйләүе ихтимал. Ҡулығыҙ ҡалаҡ тота алмай башлаһа, ирен сите аҫҡа һәленеп төшһә, ярты тән ойоһа, кеше һөйләшә алмаһа, ишемик инсульт тураһында һөйләргә мөмкин. Әммә был билдәләр геморрагик инсультта ла осрай. "Ишемия мәлендә ҡан баҫымын түбәнәйтә торған дарыу бирергә ярай, әммә аспирин башҡа ҡан һауыуын, киреһенсә, көсәйтә генә". Шулай уҡ инсультты дауалап булмай тигән фекер ҙә хата. Дауалауҙың уңышлы булыуы тиҙ арала табипҡа мөрәжәғәт итеүҙән тора.

■ Дөйөм практика табибы Сергей Алендеев бесәйҙең хужалары сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай тигән фекерҙең бик үк дөрөҫлөккә тап килмәүе тураһында һөйләне. Башҡа йорт хайуандары кеүек үк, бесәйҙәргә лә аллергия булыуы ихтимал. Шулай уҡ бесәй токсоплазмоз таратыусы ла булып тора. Токсоплазмоз - инфекцион сир, нервы системаһын, бауырҙы, башҡа эске ағзаларҙы зарарлай. Ауырлы ҡатындар өсөн ул бигерәк зыян. Шуға ла шәхси гигиена һаҡлағанда һәм аллергия булмағанда ғына бесәй һеҙгә файҙа килтерәсәк. Табип фекеренсә, бесәй йә башҡа хайуан тураһында хәстәрлек күреү, ысынлап та, кешенең сәләмәтлеген нығыта. Сөнки берәйһен ҡайғыртып, уны ҡарап йәшәү психологик йәһәттән кешенең үҙенә ышаныһын, башҡаларға кәрәкмен әле тигән тойғоһон арттыра.

■ Бөгөн COVID-19 ғәҙәти вируслы сир кеүек үтә, тип белдерә эпидемиолог, медицина фәндәре докторы, Рәсәй фәндәр академияһы академигы Вадим Покровский. Рәсәйҙә һуңғы аҙнала коронавирус менән сирләүселәрҙең һаны артҡан. "Ауырыуҙың 20 процентҡа күбәйеүе әле коронавирус кимәленең нормала булыуы тураһында һөйләй. Белгестәрҙең күпселеге уның миҙгел сире булып ҡаласағы хаҡында әйтте лә инде, тимәк, көҙөн-ҡышын уның менән ауырыусылар күбәйеп аласаҡ. Әле көҙҙөң ҡышҡа күскән мәле, шуға ла һандарҙың артып китеүендә ҡурҡырлыҡ бер нәмә лә юҡ", ти ул. Эпидемиолог билдәләүенсә, коронавирус инфекцияһының төрлө штамдары бар. "Уларҙың ҡайһы берҙәрендә тәм, еҫ һиҙеүҙе юғалтыу кеүек билдәләр осрай. Дөйөм алғанда, күптәр ябай вируслы сир кеүек үткәрә. Шуға ла махсус тикшеренеү үткәрмәйенсә уның коронавирус икәнен белеп тә булмай", тигән һығымта яһай табип.

ӘЙ, ЯҘМЫШ!

# УРАМДАҒЫ ИНӘЙ



**Ул киткәс, урам бушап, етемһерәп ҡалған кеүек булды. Әйтерһең, ошо урындың айырылғыһыҙ бер өлөшө ине. Аптырайым: сит-ят бер кеше лә күңелгә шул тиклем үтеп инә алыр икән. Хәйер, нишләп сит булһын инде. Кешене белер өсөн өс йыл ғүмер әҙ түгел.**

Заһиҙә инәй менән башта ирем танышҡан. Эштән ҡайтышлай, өйөбөҙ эргәһендәге "Пятерочка" магазины янында ултырған инәйгә хәйер бирергә булған. Яғымлы йылмайыуы менән әллә ҡайҙан үҙенә иғтибарҙы тартҡандыр инде. Унан мин дә таныштым. Ййлап ҡына, һәр һүҙҙең тәмен белеп, матур итеп татарса һөйләшкән был инәй шунда уҡ күңелгә ятты. Тыуған яҡтарҙан әллә ҡасан сығып киткән, өләсәйолатайҙарҙы ғына түгел, әсәй-атайҙарҙы мәңгелек йортона оҙатҡан ауыл кешеһе өсөн бындай һөйләшеү танһыҡ икәнен аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ. Тауышын да күтәрмәй, хис-тойғоларға ла бирелмәй, тыныс ҡына хәбәрен һөйләй инәй. Күберәк һине тыңлай. Хәҙер бит тыңлай белгән кеше лә һирәк. Үҙенең хәбәрен әйтеп ҡалыр өсөн генә тыңлағанға һалышҡан кеүектәр. Ә Заһиҙә инәй аратирә генә һүҙ ҡыҫтыра. Урынһыҙ төпсөнөүҙәре менән эс-бауырыңа инмәй. Кәрәк тапһа, үҙең һораһаң ғына, әсәйҙәрсә кәңәшен биреп ҡуя. Уның янынан тынысланып ҡайтып китәһең.

Урамдағы инәй... Нишләп унда ултыра, тиһегеҙме? Яҙыусы Рәшит Солтангәрәев әҫәрендәге кеүек, "бизнесмен"-дар иҫәбенән дә, хәйер һораусыларҙан да түгел. Әллә ҡайҙан әҙерәк хаҡҡа барып алып, урамда көнбағыш, сәтләүек һымаҡ нәмәләрҙе арттырып һатып та ултырмай. Үҙенең баҡсаһында үҫтергән, ғаиләһенән артҡан дәүләтен башҡаларға ла тәҡдим итә. Иш янына ҡуш булһын, тип ултыра. Ҙур туҡталышта сауҙа иткән "бизнесмен" инәйҙәр эргәһенә бармай, магазин тышында яңғыҙы ғына урын биләгән. "Күп кеше ултырған ерҙә ғәйбәт күп була, ә мин яратмайым ундайҙы", - ти.

Көн дә эштән ҡайтышлай магазинға инеп, аҙыҡ-түлек алабыҙ. Заһиҙә инәйебеҙ әллә ҡайҙан танып, туғанын күргәндәй шатланып, беҙҙән дә алда сәләм бирә. Ваҡыт булғанда, янында оҙағыраҡ туҡталып, һөйләшеп алабыҙ. Ашығыраҡ саҡта, үҙе һиҙеп: "Бар-бар, ҡайта һал, ирең менән балаңа ашарға әҙерләргә кәрәктер бит", - тип йәһәтләтә.

Ҡабаланмағанда үҙенең тормошон да һөйләп ала: "Иптәшем бик сибәр ине. Будулайҙы уйнаған артисҡа оҡшағайны. Эшендә лә, күрше-тирә лә күберәк уны шулай Будулай тип кенә йөрөттө. 50 йылдан ашыу бергә ғүмер иттек. Тормош булғас, төрлө саҡтар булды. Йәшәй бирһен ине лә бит. Яңғыҙ ҡалғас, бик ҡыйын", - тип һағышлы хәтирәләрен һүтә.

Осрашҡан һайын һөйләшә торғас, яҡын туғандарға әйләнеп бөттөк тиерлек. Үҙе менән бергә йәшәгән Земфира ҡыҙы өсөн борсола ине. Унан бигерәк, ейәне Владислав хаҡында уйлана. Балаға ике йәш булғанда атаһы Александр үлеп китә. Мәктәп йәшенә еткәнсе йәшәй әле әсә улының атаһы тыуған яғы Һарытау өлкәһендә. Аҙаҡ атай-әсәй янына, тыуған ҡалаһы Өфөгә ҡайта. Хәҙер Владиславка 14 йәш тә булып китте.

Бер көндө инәй менән һөйләшеп торғанда турыға ғына бер машина килеп туҡтаны. "Берәй "текә"лер инде, машинаһын ситкә лә ҡуйып торманы, урынынан ҡуҙғалмай ғына әйбер алып китергә уйлаймы икән", - тип уйлап та бөтмәнем, Заһиҙә инәйебеҙҙең йөҙө балҡып китте, урынынан тороп, машина хужаһына табан атланы. Танышылыр, күрәһең...

Бер аҙҙан былар һөйләшеп бөттө. Машина ҡуҙғалып китте. Инәй кире урынына килде. "Улым", - тине ул, ҡыуаныс йөҙөнә сығып. Кем уйлаған шундай сибәр ир-егеткә тағы ярты йылдан да әҙерәк йәшәргә ҡалған тип. Һалҡын ғинуар көндәренең береһендә ҡапыл ғына йөрәк өйәнәге менән китеп барған мәңгелеккә инәйҙең Рифҡәт исемле 51 йәшлек кенә улы. Иренең үлем ҡайғыһынан баш күтәреп тә өлгөрмәгән Заһиҙә инәй бөтөнләй бөгөлөп төшә. Үҙе лә шәкәр диабеты менән сирле кешегә күпме кәрәк инде. Башҡа ауырыуҙары ла ҡиҫкенләшә, ҡан баҫымы күтәрелеп яфалай.

Шулай ҙа яҙ етеү менән Заһиҙә инәйебеҙ тағы ла күренде магазин ҡырында. Баҡсаһында үҫтергән редис, һуған, әнис, петрушка кеүек йәшел тәмләткестәрен һатты, йәй - еләктәрен, көҙ ҡыяр, помидор, ҡабаҡтарын сығарҙы. Былтырғы йәйҙең эҫелеге ниндәй ине бит. Йәшелсәләрен һатып бөтөрөргә тырышып, көнөҙөнө тиерлек ултыра. Кәрзиненең тотҡаһы һынған, күрәһең, бау бәйләп ҡуйған. Үҙе магазиндың кәрәкмәгән йәшниген алып, ҡаҡ таҡта өҫтөндә йонсоп ултыра. Беҙҙең эргәлә генә "1000 ваҡ-төйәк" тигән магазин бар. Шунан кәрзин, тотоп ҡына йөрөй торған уңайлы бәләкәй ултырғыс һатып алдым да Заһиҙә инәйгә бүләк итергә булдым. Минең тотоп килгән әйберҙәрҙе күрҙе лә аптырап китте. Үҙенә икәнен белгәс, алмаҫҡа маташты. "Һинең тәҡдим иткән әйберҙәрең таҙа, матур кәрзиндә ятһа, кешеләр ҙә шикләнмәйенсә аласаҡ, үҙең дә йомшаҡта ултырһаң, арымаҫһың. Үҙенде өләсәйебеҙ кеүек яраттыҡ, ҡасандыр уларға күрһәтеп өлгөрмәгән бәләкәй генә бер изгелек тип ҡабул ит, зинһар, баш тартма инде", - тигәс, ризалашты. Рәхмәттәр уҡып бөтә алманы. "Үҙем дә гел ҡарай инем дә ул ултырғысҡа, һис тә аҡса арттырып булмай бит, - тине ҡыуанып. - Мин һеҙгә бурыслы ҡалам бит әле. Килтерегеҙ баҡсағыҙҙың артыҡ емеше булһа, һатып бирешермен, барыбер ултырам көнө буйы".

Заһиҙә инәй, ысынлап та, донъяларының тотҡаһы ине. Ҡыҙы ла йүнле генә эш таба алмай. Донъя көтөү сығымдарын ҡапларға инәйҙең пенсияһы менән урамда үҙе үҫтергәнде һатыуҙан килгән аҡса ҡотҡара. Ҡайһы саҡ йонсоуыраҡ күренһә, ҡайтып ятырға кәңәш бирәм. "Юҡ, ултыра бирәм әле, өйҙә нимә эшләйем мин, унда ҡыҙым бар, ашарға бешереп көтөп тора. Бында, исмаһам, кешеләр күрәм, һөйләшәм, хәсрәт таратам", - ти. Эргәбеҙҙән олораҡ йәштәге бер ир үтеп китһә: "Минең бабайым да ошолайтып йөрөр ине, иҫән булһа", - тип ҡала. Улы йәшендәге кешене күрһә: "Ғүмеркәйҙәре генә булманы баламдың", - тип күҙ йәштәрен һөртөп ала. Өйҙә бөтә нәмә ирен дә, улын да хәтерләтә бит. Бында, кешеләр араһында, таныштарын да күрә, һөйләшә, үҙе әйтмешләй, ҡайғыһынан бер аҙ арына.

...Инде баҡса мәлдәре лә үтте. Көҙ етте. Ҡыш килде. Заһиҙә инәйҙе Яңы йыл менән ҡотларға мәлендә генә бара алманым. Иҫкесә яңы йыл үткәс кенә ваҡыт табып, күстәнәс, хәйер алып өйҙәренә юлландым. "Улымдың йылын үткәрергә әҙерләнәм, һин килтергән өй туҡмасын шунда ашҡа һалырмын, бик ҙур рәхмәт", - тип ҡыуанып ҡалды. Оҙатҡанда үҙҙәре тоҙлаған бер нисә ҡыяр бирҙе. "Был банкаһы бик уңышлы булмаған. Ҡыҙым баҙҙан алғас, өс литрлыҡ банка менән мотлаҡ бирермен. Тағы килерһең", - тине.

Көндәлек мәшәҡәт менән ваҡыт үтә торҙо, тиҙ генә инәйгә бара алманым. Яҙ етте. Көндәр йылынды. Ҡала әбейҙәре төрлө ерҙә, бәләкәй баҙар яһап, һатыу итә башланы. Тик беҙҙең инәй генә күренмәне. Баҡсаға китәбеҙ - юҡ, ҡайтабыҙ - юҡ. Күңелгә ҡыйын булып тора. Бер-бер хәл булмағайы, тигән шом да төштө. Барып хәлен беләйем, тим. Сирләй ине бит, ныҡлап ятып китмәгәйе.

Ҡыҙы Земфира менән ейәне Владислав ҡаршы алды. Ҡарашым менән Заһиҙә инәйҙе эҙләйем. Ғәҙәттәгесә, төпкө бүлмәнән килеп сығып: "Иҫәнме, балам, килдеңме?" - тип ҡыуанып ҡаршы алыр кеүек. "Ағайымдың йыллығын үткәргәс, оҙаҡ та торманы. 23 февралдә вафат булды, - тине ҡыҙы. - "Рифҡәт төшөмә инә, үҙе янына саҡыра, быйыл китермен инде", - тип һөйләнеп йөрөнө. Йәне тынысланғандыр хәҙер. Эргәләренә барып ятты".

Яҡын кешемде юғалтҡандай, юл буйына илап ҡайттым. Инде был донъяла ярайһы ғүмер кисереп, тыуым-үлемдәрҙе әҙ күрмәһәм дә, Заһиҙә инәйҙең китеүе, нишләптер, күңелгә ныҡ тәьҫир итте. Яҡшы кешеләр шулай йәшәйҙер инде йөрәктәрҙә үҙҙәре был донъянан киткәс тә...

...Күп, бик күп беҙҙең ҡалала урамдарға сыҡҡан инәйҙәребеҙ. Хәсрәт таратамы, һатыу итәме - бәхетле, етеш тормоштан ултырмайҙыр береһе лә. Яңғыҙлыҡ та, мохтажлыҡ та этәрәлер уларҙы был яҙмышҡа. Заһиҙә инәйҙе ҡараған табиптар ҙа: "Үҙен һаҡламаған, яндырған, кәүҙәһе генә ҡалған", - тигән. Эргәбеҙҙә лә, бер ҡыйыҡ аҫтында, ҡарамаҡҡа етеш ғаиләлә йәшәгән, ауыҙ асып һүҙ әйтергә хоҡуғы булмаған, шәүлә кеүек көн иткән, яҡты донъяларҙан биҙеп, тиҙерәк мәңгелеккә китергә теләп, ғазаптарҙан ҡотолор сәбәптәр эҙләп, эстән янып ултырғандар әҙме һуң! Улар бит бөтәһе лә урамдарға сыға алмай.

Йәшерәк саҡта ауылға ҡайтҡанымда туған тейешле бер инәйҙең: "Бәхетле булғас, ана (әхирәтенең исемен әйтә) йәшләй генә үлде лә китте. Ә мин ултырам артыҡ кеше булып, Хоҙай биргән ғүмерҙе кисереп, бер кемгә лә кәрәгем ҡалмайынса", - тип әйткәне заманында мине бик тетрәткәйне. Хәҙер ул һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлар йәштәмен үҙем дә. Шулай ҙа үлемде бәхеткә һанап ултырған инәйҙәр йәл.

Был донъяға бер кем дә артыҡ булып килмәй. Үҙ ризығы менән тыуа. Урамдарҙа түгел, урындары түрҙә булһын ине өлкән быуын кешеләренең.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# ТУҠЛАНЫУЫҢ...

## совет осорондағы кеүекме?

**СССР замананы юҡҡа сыҡһа ла, беҙ совет диетологияһы ҡанундарын бөгөн дә ҡулланабыҙ икән. 1939 йылда совет хөкүмәте "Тәмле һәм сәләмәт тукланыу тураһында китап" баҫтыра һәм унда төп диетологик ҡағиҙәләр, блюдоларҙың рецептары бирелә. Әммә хәҙерге заман медицинаһы был гәҙәттәрҙең ҡайны берҙәрен зыянлы тип, кире ҡағып та маташа.**



Әйтәйек, төшөн тәүҙә аш, һуңынан картуф иҙелмәһе йә макарон менән кәтлит ашау шул замандан килә. "Ә компот?" тиерһегеҙ Гайдайҙың киноһындағы геройҙы иҫегеҙгә төшөрөп. Кипкән емеш-еләктән ҡайнатылған компот та төшкө аштың мотлаҡ бер өлөшө, һис шикһеҙ. Туҡланыуҙың бындай моделе дөйөм ашханалар барлыҡҡа килгәс формалаша. Күптәр иртәнге, төшкө, киске ашты завод ашханаһында ашай. Эш ауыр, көс талап ителгәнлектән, ашауҙа калориялы һәм туҡлыҡлы булырға тейеш булған - быны хөкүмәт тә яҡшы аңлаған. Ә бөгөн иһә кешелек ултырып эшләүгә күсте, тиһәң дә була. Физик әүҙемлек, тимәк, былай итеп ашауҙың да файҙаһы юҡ, кеше унан һимерә башлай.

Компоттан тыш, совет кешеһе кеҫәл, һут, какао һәм сәй ҙә эсергә тейеш булған. Ашханала уларға мул ғына итеп шәкәр өҫтәп әҙерләгәндәр. Шуға ла ул капиталистарҙың газлы эсемлегенән бер яғы менән дә айырылмай, ти белгестәр. Бындай татлы кеҫәлде, какаоны йыш эсһәң, шулай уҡ һимереп китеүең бар. Бынан тыш, улар баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһай. Һыуһағанда һыу эсеү яҡшыраҡ.

Ашҡа икмәк ҡушып ашау ҙа совет заманынан килә. Кеше тиҙ туйһын өсөн эшләнә был. Шулай уҡ кәтлит өсөн фаршҡа икмәк ҡушып үткәреү ҙә экономия йөҙәтенән эшләнгән икән. Аҡ икмәк тә файҙалы тип иҫәпләнгән. Бөгөн иһә белгестәр бындай икмәкте бөтөнләй юҡҡа сығарып ташлай.

Колбаса, ыҫланған ит ризыҡтары, паштеттар совет осоронда етеш йәшәүҙең күрһәткесе булған. Кукуруз, фасоль консервалары шул мәлдән килә. Алда телгә алынған китапта колбаса изделиеларын тап ошондай йәшелсә менән ашарға тәҡдим итәләр. "Сосиска менән борсаҡ" тигән электән билдәле комбинация шулай барлыҡҡа килгән. Бөгөн иһә табиптар былай туҡланыуҙың зыяны тураһында белдерә. Бындай йәшелсәлә тоҙ күп, тимәк, ҡан баҫымы күтәрелеүгә бер сәбәп булып тора ала.

Шулай уҡ совет кешеһе рационында майлы һөт ризыҡтары әүҙем ҡулланыла. Һөт ашын, һөтлө дөгө бутҡаһын бөгөн дә балалар баҡсаларында бешерәләр. Революциянан һуң совет аҙыҡ-түлек сәнәғәте аяҡҡа баҫып, элек юғары ҡатлам кешеләре генә ашай алған һөт ризыҡтарын етештереү күбәйгәс, һөт өҫтө, ҡаймаҡ, ҡуйыртылған һөт кеүек ризыҡтар әүҙем ҡулланыла башлай. Уларҙың сәләмәтлек өсөн зыяны юҡ, ти белгестәр, шулай ҙа ҡанда холестерин кимәле күтәрелеп китмәһен өсөн майлы ризыҡтарҙы аҙыраҡ ашарға кәрәк.

Икмәккә май, уның өҫтөнә ҡайнатма һылап ашау ҙа совет осоронан килә. Ул да 1930 йылдарҙа модаға инә. Төп ингридиенты - аҡ май, уның урынына колбаса, шпрот, бешкән йә ҡыҙҙырылған ит тә ҡулланылған. Статистика күрһәтеүенсә, бөгөн дә бутерброд иң йыш ҡулланылған ризыҡ. Хәҙерге заман табиптары бутербродты ла зыянлы тип иҫбатлай. Икмәктә углеводтар күп, колбаса иһә майға, консервантҡа, буяуҙарға, нитраттарға бай.

Һурпа кубиктары, һыуға иҙеп ашай торған аштар, картуф иҙелмәһе лә совет кулинарияһынан килгән. Был "аҙыҡ концентраттары" тигән атама алған продукттар полярниктар һәм геологтар өсөн уйлап табылған, сөнки уларҙы һаҡлау өсөн махсус температура кәрәкмәй.

Бөгөнгө көн күҙлегенән нисек кенә зыянлы тип табылған хәлдә лә, хәҙерге магазин кәштәләрендәге аҙыҡ-түлектең совет осорондағы тәбиғи ризыҡтың еҫенә лә торошо юҡ. Шуға ла бында сағыштырыу үткәреү ҙә урынһыҙ. Ризыҡ иң башта сифатлы булырға тейеш. Шул саҡта ғына ул дауа буласаҡ.

ИҪКӘРТЕҮ

# ТАЖЛЫ ЗӘХМӘТТЕҢ...

## тағы бер төрө



**Үткән аҙнала ғына Рәсәйҙә коронавирустың бөтөн донъяла әүҙем таралған "Пирола" штамы юҡ, тип хәбәр итә ине Роспотребнадзор. Һуңғы көндәрҙә Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында уның 10 осрағы теркәлгән дә инде. "Омикрон"дың бер төрө булған был штамдың илебеҙгә килеп етеүе Сморондинцев исемендәге Киҙеү фәнни-тикшеренеү институты лабораторияһында рәсми раҫланған. Ул нимәһе менән айырыла һуң?**

"Пирола" штамы сит илдә йәй үк теркәлгәйне. Ул ҡапыл үҙгәрә, шуға ла йоғошлораҡ та. Әммә белгестәр әйтеүенсә, ҡурҡырға ярамай, сир быға тиклем булған штамдар кеүек үк билдәләр менән үтә. Күптәр ябай киҫкен вируслы инфекция кеүек ауырый. Төп билдәләре - 38 градустан юғарырыҡ тән температураһы, оҙайлы йүтәл, баш ауыртыуы, аппетит булмауы, һирәклөп тәм һәм еҫ юғалтыу. Элек коронавирустан нисек дауалағандар, шул ысулдар был штамм өсөн дә ярай.

Шуныһы ла бар, "Спутник" вакцинаһы был штамдан һаҡламай, ә яңыһын тағы ла бер нисә ай көтөргә кәрәк буласаҡ. Әле ул клиник һынауҙар үтә. Шуға ла һаҡланыуҙың төп сараһы булып элеккесә ҡулдарҙы йыуыу тора. Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова мөмкин булғанса битлек кейергә, кеше күпләп йыйылған урындарға сығыуҙан тыйылып торорға кәңәш итә.

Әгәр ҙә ауырый башлағанығыҙҙы һиҙәһегеҙ икән, үҙегеҙҙең һәм башҡаларҙың сәләмәтлеген хәүеф аҫтына ҡуймағыҙ, өйҙә ҡалығыҙ. Шул саҡта ғына вирус әүҙем таралыуҙан туктаясаҡ.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ЕМЕРӘЛӘР!

**Иглиндә вандалдар ремонт барған күпергә яңы ғына йәйелгән бетонды тапап бөтөргән, шулай уҡ бордюр өсөн әҙерләнгән материалды емергән. Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова был турала социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙған.**

"Вандаллыҡ менән шөғөлләнгәндәрҙән һорағым килә - һеҙ уҙ аҡылығыҙҙамы? Күперҙә ремонт тамамланыуын күпме кеше көтә, ә һеҙ яңы ғына түшәлгән бетонды тапайһығыҙ. Тротуар өсөн килтерелгән бордюрҙарҙы ниңә емерәһегеҙ? Былар барыһы ла һеҙгә йәйәү һәм машинала йөрөргә уңайлы һәм хәүефһеҙ булһын өсөн эшләнә бит. Хоҡуҡ һаҡлау органдары был тәртипһеҙҙәрҙе эҙләй ҙә инде".

Әйткәндәй, Өфөлә лә вандаллыҡ осраҡтары йыш теркәлә. Ошо көндәрҙә "Хоҡуҡ институты" туҡталышы павильонында ике билдәһеҙ ир быяланы селпәрәмә килтерә. Был вәхшилек видеокамераларға эләгә. Факт буйынса полицияға ғариза бирелгән, әле тикшереү эштәре бара.

РФ Хоҡуҡ кодексында вандализм өсөн етди хөкөм ҡаралған. 214-се статьяла әйтелеүенсә, биналар һәм башҡа ҡоролмаларҙы емереү, йәмәғәт транспортында йәки башҡа йәмәғәт урындарында милекте боҙоу штраф йәки мотлаҡ тәҙәтеү эштәре генә түгел, ә енәйәт тотош төркөм менән яһалған икән, иректән мәхрүм итеү ҙә ҡаралған. Әгәр ҙә һеҙ бындай осраҡтарға тап булғанһығыҙ икән, 8-800-600-51-84 номерына шылтыратығыҙ.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Икенсе дошман: Хәүефһеҙлекте ҡайғыртыу

Хәҙерге заманда ҡайһы яҡҡа ғына боролһағыҙ ҙа, шунда уҡ именлегегеҙҙе хәстәрләү тәҡдимдәре яуа башлай. Страховка полистары, пенсия фонды пландары, хәүефһеҙлек ҡайыштары, сигнализация системалары - ирекһеҙҙән, страховка агенттарынан страховкалауыҫы страховка юҡмы икән, тип уйлана башлайһың. Әгәр һеҙ рациональ ҡараш яҡлы икән, әйҙәгеҙ, логик фекерләп алайыҡ.

Тәү сиратта, һеҙ теләһә ниндәй хәүефтән ышанысы яҡланырға теләйһегеҙ. Шуға күрә, хәүефһеҙлек осраҡтарын, ауырыу, банкротлыҡ, электр тоғынан һуғылыу һ.б. осраҡтарҙы иҫәпкә алырға кәрәк. Әммә кемдәрҙең тормошона көнләшергә мөмкин, улар хатта хәүефле осраҡтарҙа ла үҙҙәрен ышанысы тоя. Һеҙгә хәүефһеҙлек тураһында уйламайынса йәшәргә өйрәнергә кәрәк. Изге китаптарҙы яҙманы иҫегеҙгә төшөрһәгеҙ: "Улар сәсмәй ҙә, урмай ҙа... Аллаһы Тәғәлә уларҙы туйындыра", - тип яҙылған. Аптырарһығыҙ, әммә был принцип, ысынлап та, эшләй. Әгәр ғүмерендә кемгә ышанып тапшырырға, Аллаһы Тәғәләгәме, әллә страховка компанияһынамы, тигән һайлау ҡуйһалар, мин ҡайһынын һайларға шикләнеп тормайым.

Эйе, мине бер ҡатлы тип уйлаһағыҙ - һеҙ хаҡлы. Әммә нығлы логиканы түгел, ә һуңғы һөҙөмтәне баһалағыҙ. Тормошоғоҙҙо байҡап сығығыҙ ҙа, унда кисергән биш иң матур мәлде атағыҙ. Уларҙы яҙып ҡуйығыҙ. Улар тап һеҙ барлыҡ һаҡлылығыҙҙы онотоп: "Нимә булһа ла булыр, әммә мин быны эшләйем", - тигән мәлдәр түгелме ни? Әгәр тормошоғоҙҙоң иң матур мәлдәрендә хәүефһеҙлек тураһында онотһағыҙ, ниңә хәҙер үҙегеҙҙе төрлө һаҡлыҡ саралары менән уратырға тырышаһығыҙ? Онотмағыҙ: иң ҙур байлыҡ туплаусылар эштәрен һәр саҡ хәүефле ғәмәлдәр аша башҡарған. Тормоштағы иң матур мәлдәр ҙә хәүефле ғәмәлдәр һөҙөмтәһе. Бала табырға йәки бизнес башларға йыйынғанда һеҙ запас сығыу юлына иҫәп тотмайһығыҙ, ә барлыҡ йоморткаларҙы ла бер кәрзингә һалаһығыҙ, шулаймы?

Ауыр хәлдә ҡалған эшҡыуарҙар йәки квалификациялы белгестәр менән осрашҡанда бик йыш шуға иғтибар итәм: улар уныш килтергән сығанаҡ тактикаһынан тайпылған, тәүәккәллектәрен онотоп, капиталын һаҡлай башлаған. Уларҙың тормош позицияһы үҙгәргән. Әгәр тәүҙәрәк улар һәр яңы эшкә илһамланып тотонһа, хәҙер булғанын һаҡларға тырыша. Һәм байлығын арттырыр урынға, адвокаттарын байыта.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 20 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.10, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Тайны следствия-9". [16+]
2.40, 3.35 Т/с "Морозова". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Этно-краса". [12+]**
**15.30 Преград. Net. [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15, 3.45 Остаз. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 "Плачу вперед!". Спектакль. [12+]**

## 21 НОЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
0.10, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Тайны следствия-9". [16+]
2.40, 3.35 Т/с "Морозова". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Дневник волонтера: история одной поездки на Донбасс. [12+]**
**11.15 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 20.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.20 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 3.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Специальный репортаж. [16+]**
**20.50 Хоккей. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**3.30 Тормош. [12+]**

## 22 НОЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Д/ф "Как убили Джона Кеннеди". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
0.10, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Тайны следствия-9". [16+]
2.40, 3.35 Т/с "Морозова". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Алтын тирмә. [12+]**
**10.45 Ради добра. [12+]**
**11.00, 3.30 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00, 3.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Телецентр.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 "Суд матери". [12+]**

## 23 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Д/ф "Как убили Джона Кеннеди". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
0.20, 1.05, 1.50, 2.45, 3.05, 3.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05, 1.55 Т/с "Тайны следствия-9". [16+]
2.40, 3.35 Т/с "Морозова". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45, 3.30 Остаз. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 13.45, 4.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00, 3.45 История одного села. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [16+]**
**16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Своих не бросаем. [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**1.30 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**4.15, 5.15 Телецентр. [12+]**

## 24 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.40 Матадор. [16+]
0.40 Д/ф "Дэймон Албарн. Современная британская сказка". Документальный фильм про лидера групп "Blur" и "Gorillaz". [16+]
1.45, 2.30, 3.15, 4.05, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
0.25 Шоу Большой Страны. [12+]
1.30, 2.20, 3.10, 4.00 Т/с "Тайны следствия-9". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30, 5.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**12.15 Специальный репортаж. [16+]**
**12.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 3.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Гора новостей". [6+]**
**15.15 Лит-ра. [6+]**
**15.45 "Этно-краса". [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [6+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Остаз. [12+]**
**1.00 Концерт Айгуль Каримовой. [12+]**
**3.30 "Моя семья". [12+]**

## 25 НОЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Д/ф "Как долго я тебя искала..." К 95-летию Алексея Баталова. [12+]
14.15 Х/ф "9 дней одного года". [12+]
16.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Короткая программа. Этап VI. Прямой эфир.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
19.15 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.20 Х/ф Премьера. "Камон Камон". [16+]
1.25, 2.10, 2.55, 3.40, 4.25, 5.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 В кругу друзей.
12.50 Доктор Мясников. [12+]
14.50 Юморина. [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Жилищный вопрос". [16+]
0.35 Х/ф "Нарисованное счастье". [12+]
4.05 Х/ф "Улыбнись, когда плачут звезды". [16+]
5.48 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.00 "Бай". [12+]**
**8.30, 2.45 "Ете егет". [12+]**
**9.15, 2.30 Остаз. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Крылья. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Лит-ра. [6+]**
**11.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.00, 12.45 Новые бренды Башкортостана. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Интервью. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома.**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Подарок". Спектакль. [12+]**
**0.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**1.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**4.45 Колесо времени. [12+]**
**5.45 Аль-Фатиха. [6+]**
**6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 26 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.35, 1.20, 2.05, 2.50, 3.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.30 Д/ф Премьера. "Машков". К 60-летию. [12+]
14.25, 23.00 Х/ф "Вор". [16+]
16.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Произвольная программа. Этап VI. Прямой эфир.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Перепой звезду". [12+]
21.00 "Время".
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 1.30 Х/ф "Время собирать". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.50 Большие перемены. [6+]
12.50 Х/ф "Без вины виноватая". [12+]
16.55, 19.00 Песни от всей души. [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00, 4.30 История одного села. [12+]**
**9.15 Орнамент. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15, 5.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Историческая среда. [12+]**
**15.30 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 С Днем Матери! [12+]**
**18.45 Патриот РФ. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [16+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Преображение. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.15 Республика LIVE #дома.**
**22.45 Д/ф "Украина. Бегство на восток". [16+]**
**23.15 Концерт Айнура Аминева. [12+]**
**0.45 "Шестая жена И. Грозного". [12+]**
**5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (7) дүшәмбе | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 15:06 | 17:04 | 18:34 |
| 21 (8) шишәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 15:05 | 17:03 | 18:33 |
| 22 (9) шаршамбы | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 15:04 | 17:01 | 18:31 |
| 23 (10) кесе йома | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 15:04 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (11) йома | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 15:03 | 16:59 | 18:29 |
| 25 (12) шәмбе | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 15:03 | 16:58 | 18:28 |
| 26 (13) йәкшәмбе | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 15:03 | 16:56 | 18:26 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Әгәр ҙә һин кемдәндер бер башҡа бейегерәкһең икән, был һинең башыңдың ҡаҙанышы, тигәнде аңлатмай.*

*(Веслав Брудзинский).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 26 НОЯБРЬ - ӘСӘЙ КӨНӨ

**Әсәй көнө - халыҡ-ара байрам, әммә ул төрлө илдәрҙә төрлө көндәрҙә билдәләнә.**



Күпселек осраҡта, Әсәй көнө майҙың икенсе йәкшәмбеһендә үткәрелә, шул иҫәптән Япония, Төркиә, Австралия, Бельгия, Бразилия, Канада, Германия, Италия, Финляндия, АҠШ, Дания, Эстония, Латвия, Украина, Мальта һәм Кипр утрауҙарында ла. Рәсәйҙә был байрам ноябрҙең һуңғы йәкшәмбеһе, Мысырҙа - 21 март, Белоруссияла - 14 октябрь, Грузияла - 3 март, Әрмәнстанда - 7 апрель, Ҡаҙағстанда - сентябрҙең өсөнсө йәкшәмбеһе, Ҡырғыҙстанда - майҙың өсөнсө йәкшәмбеһе, Бөйөк Британияла - марттың беренсе йәкшәмбеһе, Грецияла - 9 май, Польшала 26 майҙа, Венгрия, Испания, Португалия, Литвала майҙың беренсе йәкшәмбеһендә билдәләнә. Шведтар һәм французлар әсәйҙәрен майҙың һуңғы йәкшәмбеһендә, ә сербтар декабрҙә ҡотлай.

Рәсәй империяһында Әсәй көнө тәүге тапҡыр 1915 йылдың 1 декабрендә Скауттарҙың беренсе Петроград отрядында үткәрелә. Рәсәй Федерацияһында иһә, Әсәй көнөн беренселәрҙән булып Саха (Якутия) Республикаһы раҫлай: был дата октябрҙең өсөнсө йәкшәмбеһенә тура килә. Ә дөйөм федераль байрам көнө Рәсәй Президенты Н. Ельциндың 1998 йылдың 30 ғинуарындағы указына ярашлы индерелгән. Байрамдың төп маҡсаты - ҡатын-ҡыҙға ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт традицияларын күтәрмәләү, ғаилә нигеҙен нығытыу, тормошобоҙҙағы иң мөһим кеше - әсәйҙең әһәмиәтен айырыуса билдәләп үтеү.

Рәсәйҙә Әсәй көнөнөң төп символы - күгәрсен күҙе сәскәһе.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**44-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡыҫал. Мурзина. Нимфа. Ғалим. Өрлөк. Ирәкташ. Келәймә. Әкиәт. Көрсөк. Ислам. Һаҙ. Ҡәләм. Роза. Таяу. Йәйен. Венок. Елән. Еп. Тыва. Ыумас. Абонент. Абыстай.

**Вертикаль буйынса:** Кәримова. Ғәлиуллин. Йөкмәтке. Мари. Помада. Миәкә. Ҡарын. Һауыт. Ышаныс. Мәк. Саҙрыев. Латин. Лиана. Туй. Өшә. Ҡайны. Кәмә. Әҫтә. Кит. Манас.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 ноябрь "Внутри меня цунами"** үҫмерҙәр тарихы. 12+

**23 ноябрь "Урал батыр"** Башҡорт халыҡ эпосы буйынса ҡобайыр. 12+

**24 ноябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+

**25 ноябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш), музыкаль комедия. 18.00 12+

**26 ноябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 ноябрь "Долгое-долгое детство"** (М. Кәрим). 12+

**22 ноябрь "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим), хикәйәт. 12+

**24 ноябрь "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**26 ноябрь Премьера! "Аленький цветочек"** (С. Аксаков). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24 ноябрь "Ел тыуҙырған моң"** III халыҡ-ара фестивале концерты. 6+

**25 ноябрь "В ожидании чуда".** 11.00 0+

**"Ел тыуҙырған моң"** III халыҡ-ара фестивале концерты. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**22 ноябрь "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 13.00, 19.00 12+

**24 ноябрь "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 16+

**25 ноябрь "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән **20 ноябрь** Үрге Ҡыйғы, **22 ноябрь** Дыуан район мәҙәниәт йорттарында гастролдәр. 16+

**23 ноябрь "Әсәй, йәшә мәңге донъяла!"** А. Туҡтаев концерты. 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 ноябрь "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 16+

**25 ноябрь Премьера! "Әсәй, бына һиңә килен...дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 18.00 12+

**26 ноябрь "Как Баба Яга Соловья-разбойника женила"** (Ю. Боганов), әкиәт. 12.00 0+

**"Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 18.00 12+

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ӘЛЕГӘ ЙЫЛЫ...

Башҡортостанда ноябрь уртаһында аномаль йылы һауа торошо күҙәтелде. Хәбәр ителеүенсә, Аксаков аллеяһында хатта алмағас сәскә атты. Ләкин, синоптиктар фаразлауынса, көндәр һалҡынайта башлай. Яндекс порталы мәғлүмәттәре буйынса, ноябрҙә республика климатын һыуыҡ тип билдәләргә мөмкин. Ноябрҙә көндөҙ уртаса температура -2 градус. Был айҙа Башҡортостанда уртаса 18 ҡарлы, 11 болотло һәм ямғырлы көн көтөлә. Ә декабрь республикабыҙҙа - иң ҡарлы һәм һыуыҡ ай. Декабрҙә көндөҙ уртаса температура -9 градус була. Йылдың һуңғы айында Башҡортостанда уртаса 20 ҡарлы, 10 болотло һәм 1 аяҙ көн. Көндөҙ -10, -13, төндә -16, -18 градус. Яңы йылға табанraҡ -8, -11 градус булыуы фаразлана.

***Балаларҙы, әлбиттә, был тормошта бөтәһе лә яҡшы тип, уны иллюзияларға биреләреп, йәғни ысынбарлыҡты боҙоп күҙ алдына килтереп үҫтерергә ярамай. Шулай ҙа бала нимә яҡшы, нимә насар икәнен белеп үҫергә тейеш.***



*БАЙРАМ УҢАЙЫНАН*

**Ә һеҙ телевидениела күптән эшләйһегеҙме?**
**- Ике йыл.**
**- Моғайын, бик ҡыҙыҡтыр?**
**- Эйе. Беләһегеҙме, тиҙҙән телевидение бөтә кешелек донъяһын ныҡ үҙгәртәсәк. Театр ҙа, китап та, гәзит тә - бер нәмә лә булмаясаҡ. Тик телевидение ғына. Минең һүҙҙәремде бына егерме йылдан һуң иҫләрһегеҙ әле...**
**Хәтерегеҙгә төшкәндер, был - бынан утыҙ өс йыл элек премьераһы булған билдәле "Москва слезам не верит" исемле совет фильмынан алынған өҙөк. Уны профессор Тихомировтың өйөндә табын артында Рудольф әйтә.**

# ТЕЛЕЭКРАН БЕҘҘЕ ТӘРБИӘЛӘЙМЕ?



Киногеройҙың юрағаны юш килде: телевидение тормошобоҙға бик тәрән үтеп инде. "Зәңгәр экран"ы булмаған ғаиләне, йортто табырмын тимә хәҙер, күптәрҙең һәр бүлмәһендә тиерлек телевизор урынлашҡан. Тап уның аша илебеҙҙә, сит илдәрҙә булған хәл-ваҡиғаларҙы, сәйәси-мәҙәни яңылыҡтарҙы беләбеҙ, зәңгәр экрандарҙа яратҡан артистарыбыҙ, йырсыларыбыҙ менән осрашабыҙ, һәр кемдең үҙ тапшырыуы, шоуы бар.

"Театр ҙа, китап та, гәзит тә булмаясаҡ", тигәне генә бик үк дөрөҫләккә тап килмәй. Ниндәйҙер бер ваҡытта, бәлки, улар икенсе планға күсеп тә торғандыр. Совет власы тарҡалып, нисәмә йыл ынтылған идеология, тормош ҡиммәттәре тамырынан юҡҡа сыҡҡас, ысынлап та, театр үҙ тамашасыһын, гәзит-журналдар, китаптар үҙ уҡыусыһын юғалта яҙҙы. Әммә бик тиҙҙән улар яңынан эйә булды. Авторҙар заман ихтыяжын, маҡсатын ваҡытында тойоп, шул йүнәлешле баҫма, әҫәрҙәр сығара башланы. Бына шул ваҡытта детектив, криминал, фантастика, эзотерикаға ҡоролған китаптар уҡый башланыҡ. Гәзит-журналдарҙың һаны ла кәмемәне, киреһенсә, бөгөн төрлө ҡатлам, төрлө йәштәгеләр, һөнәр эйәләре өсөн ниндәй генә баҫма сыҡмай.

Интернет селтәре үҫешкәс, телевидениеның роле кәмене, тиер кемдер. Минеңсә, киреһенсә, был заманса мәғлүмәт технологияһы телевидениеның тағы ла нығыраҡ үҫешенә булышлыҡ итте һәм ул алдынғы позицияны биләүен дауам итә. Бөгөн уның ниндәй генә төрө юҡ. Беҙҙең быуын эфир телевидениеһын ҡарап үҫте. Унан һуң кабель телевидениеһы барлыҡҡа килде. Уны тоташтырып, төрлө йүнәлештәге тиҫтәләгән канал ҡарау мөмкинлегенә эйә булдыҡ. Төрлө сит ил сериалдарын, ток-шоу йәки күңел асыу программаларын тап ошо ваҡытта ҡарарға гәзәтләнгәнбеҙҙер, моғайын.

Башҡортостан юлдаш телевидениеһы барлыҡҡа килеү менән телевизор ҡараусыларҙың мөмкинлеге тағы ла киңәйҙе: Ерҙең һәләм юлдашы ярҙамында тапшырылған был ысул телевидениеның бөтә төрҙәре араһында беренсе урынды биләй. Башҡалар менән сағыштырғанда уның мөмкинлектәре, һис шикһеҙ, күберәк. Уның буйынса, мәҫәлән, яратҡан тапшырыуҙы йәки кинофильмды яҙҙырып, ҡабатлап ҡарарға була. Өйҙә булмау сәбәпле ҡарай алмаған программаны ла яҙҙырып алырға мөмкин. Тапшырыуҙы кәрәк урында туҡтатып, яңынан дауам итергә, балалар өсөн ҡарарға ярамаған тапшырыуҙарға "атай-әсәй контроле"н ҡуйырға була.

Телевидениеның тағы ла бер төрө бар - IP протоколы буйынса тапшырылған интерактив йәки цифрлы телевидение.

Телеэкрандың тәрбиәүи әһәмиәте тураһында һөйләгәндә уның ыңғай яҡтары ла, киреһе лә бар. Беҙҙең быуын илһөйәрлек, ватансыллыҡ рухы менән һуғарылған кинолар ҡарап үҫте. Кескәйҙәр өсөн йәнһүрәттәр ҙә әхлаҡи, физик тәрбиә биреү йәһәтенән кеҫлә ине. Бөгөнгө балалар ниндәй мультфильмдар ҡарағанына иғтибар иткәнегеҙ бармы?

Күптән түгел бер танышым һөйләп торғайны: "Элек үҙебеҙ ҡарап үҫкән "Конек-горбунок", "Жил-был пес", "Бременские музыканты", "Золотая антилопа", "Мама для мамонтенка" кеүек йәнһүрәттәр яҙылған диск алып ҡайтып ҡуйғайным, 4 йәшлек ҡыҙымдың уларға бер ҙә иҫе китмәне, киреһенсә, уны алып, бығa тиклем әллә нисә тапҡыр ҡараған, ҡайһы бер цитаталарын яттан белгән "Масяня"ны ҡуйыуын үтенде. Нисектер ваҡыт табып бергә ҡарағайным, ундағы персонаждарға иҫем китте. Масяня - тәмәке көйрәтергә, эсергә яратҡан, әҙәпһеҙ ҡыҙ икән. Иптәштәре лә унан бер ҙә ҡалышмаған. Ҡыҙҙың һәр ваҡыт тиҫтерҙәренә ярҙам ҡулын һуҙырға әҙер булыуын иҫәпкә алмаһаң, ул бында тик кире ролдә уйнай, баҡтиһәң", - тине ул аптырап.

Балаларҙы, әлбиттә, был тормошта бөтәһе лә яҡшы тип, уны иллюзияларға биреләреп, йәғни ысынбарлыҡты боҙоп күҙ алдына килтереп үҫтерергә ярамай. Шулай ҙа бала нимә яҡшы, нимә насар икәнен белеп үҫергә тейеш, шуның өсөн балалар өсөн тапшырыуҙарҙы, "Масяня" кеүек мультфильмдарҙы бергә ҡарарға һәм уның буйынса фекер алышырға ваҡыт табырға кәрәктер ололарға.

1997 йылдан алып Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Генераль Ассамблеяһы тәҡдиме буйынса йыл һайын 21 ноябрҙә Бөтә донъя телевидение көнө билдәләнә. Уның маҡсаты, билдәле инде, бөтә донъяның үҫешендә телевидение роленә иғтибарҙы йәлеп итеү, вәхшилеккә, көрә алмаусанлыҡҡа, низағҡа килтергән, халыҡ-ара ғауға уятҡан ваҡиғаларҙы сағылдырмау тураһында хәстәрлек күреүен иҫкәртеү. Бына шулар тулыһынса гәмәлгә ашырылғанда бөгөнгө тиҙ үҙгәреп торған заманда телевидениеның ролен тик ыңғай баһаларға булыр ине.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ТЕЛЬӨЙӘР*

## ҠАРАЗЛЫҠ ҠЫЛМА...

**Һирәк ҡулланылған йә иҫкергән, йә диалекттарҙа ғына осраған һүҙҙәр башҡорт теленең ҙур ҡатламын тәшкил итә. Был хазинаны йәнле телмәргә индереү, һис шикһеҙ, туған телебеҙҙе һаҡлауҙың әһәмиәтле бер сараһы булып тора. Шуны күҙҙә тотоп, һирәк ҡулланылған һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрәйек. Әйткән һүҙ - атҡан уҡ, ти халыҡ. Иҫкә алынасаҡ һүҙҙәребеҙ уҡ булмаһа ла, хәтергә эләгеп ҡалһа, телебеҙҙе байытһа, хуп булыр.**

**Ҡаңғаҡ.** Оҙаҡ ваҡыт яуым-төшөмһеҙ, аяҙ һәм ҡоро булған көн торошо. Ҡаңғаҡ көн. Ҡаңғаҡ ел. Туҡтауһыҙ ямғырҙарҙан һуң, һиһайәт, ҡаңғаҡҡа тартты.

**Ҡантар.** Күҙгә ҡырпаҡ ҡар мизгелен белдергән һүҙ. Ҡантар мәле етте. Ҡантарҙа йылғаны боҙ ҡапланы.

**Ҡараса.** Был һүҙ ҙә тәбиғәт торошон ҡылыҡһырлай. Мәғәнәһе - күҙгә ҡара һыуыҡ осор. Ҡараса килмәй көҙ булмаҫ. Октябрь айы башҡорт календарында ҡараса тип йөрөтөлә.

**Ҡапҡаҡ.** Солоҡтоң, түмәр умартаның ҡапҡасы шулай атала. Ҡапҡаҡты нығытыу. Ҡорттар ҡапҡаҡты һырыған.

**Ҡараз.** Гәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙ, мәғәнәһе - яуызлыҡ, насарлыҡ. Ҡаразлыҡ ҡылһаң, үҙеңә яҙаһы ҡайтыуы бар.

**Ҡарағаш.** Дүрт мөйөшлө ваҡ йәймәнең уртаһына тартылған муйыл, еләк һалып, ике мөйөшөн йәбештереп бешергән ҡамыр ризығы. Ҡарағаш бешереү. Тәмле ҡарағаш.

**Фәймә МӘЖИТОВА әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ФАЙҘА МЕНӘН ЗАРАР...

**бер туғандар**

Үткер бысаҡ, һимеҙ ат - табын ҡәҙерен килтерер; яман ҡатын, ялҡау ат - әжәлдән элек үлтерер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йомарт булыу - ул биреп булғандан күберәк биреү, ғорур булыу - алып булғандан әҙерәк алыу.

**(Халиль Джебран).**

Осрашыуға ваҡытында килгәндә, эргәлә быны күргән бер кеше лә булмауы ҡалай ҡыҙғаныс!

**(Франклин Джонс).**

Әгәр ҙә һин кемдәндер бер башҡа бейегерәкһең икән, был һинең башыңдың ҡаҙанышы, тигәнде аңлатмай.

**(Веслав Брудзинский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йәшәгән. Уның йәшәйеше ниндәйҙер буталсыҡ ваҡиғалар, насар күренештәр менән тулы булған. Берҙән-бер көндө ул быңдай йәшәү рәүешенән туйғанын аңлаған, аҡылға килергә, изге эштәр эшләргә, йәнен ҡотҡарырға кәрәк, тигән ҡарарға килгән. Шунан изге эштәр генә ҡыла башлаған. Әммә тормошоноң яҡшы яҡҡа үҙгәреүен тоймаған.**

**Бер ваҡыт урамдан китеп барһа, бер әбейҙең пальтоһынан төймәһе өҙөлөп төшкәнен шәйләп ҡалған. Быны күргәс, ергә эйелергәме-юҡмы, тип, байтаҡ баҫып торған был кеше. "Төймә лә булғанмы нәмә! Өйөндә быңдай ғына төймәләре туп-тулылыр әле... Изгелек эшләйем, тип, шул юҡ нәмәне эйелеп алырға тейешменме икән мин?.." - тип икеләнгән. Ә шулай ҙа төймәне эйелеп алған һәм баяғы әбейҙе ҡыуып етеп, уға төймәһен тотторған. Шуның менән был ваҡиға онотолған.**

**Был кеше теге донъяға күскән. Күрә, уның алдына үлсәү ҡуйғандар һәм уның фани донъялағы яуызлыҡтарын һәм изгелектәрен үлсәйҙәр. Үлсәүҙең һул яғында ул ҡылған яуызлыҡтар ята, ә уң яғы буш. "Тимәк, яуызлыҡтарым күберәк булып сыға инде. Их, бында ла мин уңманым!"- тип үкенгән кеше. Шул саҡ фәрештәләр үлсәүҙең уң яғына... бер төймә килтереп һала. Үлсәүҙең күрһәткесе ҡырҡа үҙгәрә. "Ошо бәләкәй генә төймә менән бәйле изгелек минең бар яуызлыҡтарымдан өҫтәрәк булып сыҡтымы ни былай булғас? Мин бит бик күп изге эштәр эшләнем, ни өсөн улар бында күренмәй?" - тип аптырап торһа, фәрештәләрҙең һүҙҙәрен ишетеп ҡала: "Үҙеңдең изге эштәрең менән ғорурланып, һин уларҙы юҡҡа сығарҙың. Ә бына ошо төймә менән бәйле һин онотҡан изгелек һине тамуҡтан ҡотҡарҙы! Изгелек бит изге эштәрҙә түгел, ә изгелектең үҙендә - йөрәктә һаҡлана..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23045

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99**
**Матбуғат таратыу 252-39-99**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1593